ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
Киске Өфө
13-19 март (буранай) 2021
№11 (949)
kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

"Башҡорттарҙың ҡунаҡсыллығын, бигерәк тә ситтән килгәндәргә ихтирамдарын беренсе урынға ҡуйырға кәрәк. Башҡорттоң ҡунағы - изге йән, уның өсөн ул иң һуңғы һарығын йәки тайын булһа ла һуйып ашата. Ҡунаҡ ҙур дәрәжәле булһа ла, башҡорт, ялағайланып, түбәнселеккә төшмәй, уға ярамһаҡланмай, үҙ абруйын һаҡлап ҡала белә".
**Д.П. НИКОЛЬСКИЙ.**

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Илһөйәрлек кенә түгел...**
хеҙмәт тәрбиәһе лә етмәй

6

**Шиғырын да, көйөн дә үҙем яҙам,**

йәки Башҡорт эстрадаһы тураһында 8-9

**Ырыуҙар ҡор йыя**

11

**Был ауылда...**
баҡыр заводы эшләгән

12

**ТВ-программа** 14

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ГӘЗИТКӘ ЯҘЫЛЫУҘЫҢ...

## серен асам һеҙгә лә

**Байтаҡтан бирле "Киске Өфө"гәзитен алдырам. Ғаилә бюджеты наҡыҫ булыуға ҡарамаҫтан (үҙегеҙ шаһит: коммуналь хеҙмәттәргә түләү өлкәһендә генә ни ҡыланалар бит!), нисек тә аҡса арттырып, йылына ике тапҡыр яратып уҡыған баҫмама яҙыла алыуыма ҡыуанам.**



Ә нисек арттыра аламмы? Был йәһәттән минең бәләкәй генә серем бар. Кемдәр бер нисек тә гәзит өсөн аҡса арттыра алмай, улар өсөн, бәлки, файҙалы кәңәш булыр, тейем. Фатирға ингәс тә, гәҙәттә, ишек төбөндә кейем шкафы тора. Шуның асыҡ көштәһендә элек стационар ҡала телефон аппараты ҡуҡыра-йып ултырыр ине. Унын кәрәге бөткәс, аппарат урынын балаларым бүләк иткән семәрле ҡумта - "Киске Өфө" копилкаһы биҙәй хәҙер. Тышына сағыу итеп шулай яҙып та ҡуйҙым әле. Хәҙер ул ҡумтаға күҙ һалмаған кеше юҡ: аталары эш хаҡы алып ҡайтамы, балалар ҡунаҡҡа киләме, дуҫ-иш, туғандар инеп сығамы, үҙем пенсия алып ҡыуанаммы - әлеге ҡумта тулылана бара, аҡмаһа ла тамып тора, ә тамсы ни эшләй - ҙур көскә эйә.

(Дауамы 2-се биттә).

КӨНАУАЗ

# ЯҠТАШЛЫҠ КӨСӨН...

## атайсалда файҙаланайыҡ!

АТАЙСАЛ

**Башҡорттар әүәл-әүәлдән бер-береһенә ярҙам итеп, дөйөм эште бер булып төптән ҡубып башҡарған. Бындай ирекмәнлекте улар өмә тигән матур исем менән атаған. Юҡҡа ғына "Һәр яҡшы нәмә - ул онотолған иҫкелек", тимәйҙәрҙер. Башҡортостанда ошо изге ҡиммәттәрҙе тергеҙеп, бер-береңә ярҙам итеүҙе системаға һалыу өсөн республика кимәлендә "Атайсал" проекты эш башлай.**

Был проект идеяһын 2019 йылда үҙенең тыуған Ишембай районының Һайран ауылына эш сәфәре ваҡытында Радий Хәбиров күтәргәйне. Ул бәләкәй ватанына ярҙам итеүсе меценаттар хаҡында һөйләргә, ауылдың ниндәй ихтыяжы булыуын асыҡларға кәрәклеге тураһында белдергәйне.

"Был халыҡ иненә дәүләт хәл итә торған проблемаларҙы һалырға тырышыуҙы аңлатмай. Был - былай ҙа, бер ниндәй сәкырыуһыҙ тыуған ауылы, ҡалаһы, балалар баҡсалары, спорт секцияларына күнел күшыуы буйынса ярҙам һуҙған кешеләргә унайлы шарттар булдырыу ул. Мин дә үҙемдең Һайраныма ярҙам итәм, уны тәртипкә килтерәм. Әгәр шундай мөмкинлек бар икән, ярҙам итергә кәрәк. Был үҙенә күрә күнел талабы, сауаплы эш", - тигәйне Радий Фәрит улы.

Проекттың "Атайсал" тип аталыуы ла нигеҙһеҙ түгел. Атайсал - ул бәләкәй ватан. Шуға ла проекттың асылы - үҙенең тыуған ауылы үҫешенә битараф булмаған кешеләргә табыу. Ул БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Фәрит Ғиндуллиндың инициативаһы менән башланған "Тыуған ауыл" проектын да үҙ эсенә ала. Әлеге ваҡытта проекттың рәсми сайты (https://ataisal.ru/) эшләй башланы. Телә-гән кеше унда инеп, үҙенең йәки үҙенә оҡшаған ауылды табып, ярҙамын йәки ниндәйҙер проектын, мәҫәлән, футбол йәки балалар майҙаны төҙөү, дөйөм территорияны, шишмәне, зыяратты һ.б. төҙөкләндереү тәҡдим итә ала. Шулай уҡ уртаҡ финанс ярҙамы күрһәтеү шарттарында республиканың ғәмәлдәге проекттарына йәки башҡа ҡатнашыусыларҙың проектына ҡушылырға мөмкин. Сайтта меценаттарҙың фотоларын, тыуған ағына ниндәй ярҙам күрһәтеүен, күпме сығым тотоноуын күҙәтеп барырға, ҡайһы муниципалитет әүҙемерәк икәнен асыҡларға мөмкин. Кемдер үҙенең шәхесен белдермәй, йәғни аноним ярҙам итергә теләһә, улай ҙа ярҙам ҡулы һуҙырға була.

Сайт уңышлы меценаттарға ауылдаштарына ҙур проектты бергәләшеп атҡарып сығыуҙы тәҡдим иткән краудфандинг майҙансығы ла булып тора. Ҡатнашыусыларға төрлө инстанциялар, ниндәйҙер килешеүҙәр, комиссиялар тикшереүен үтергә кәрәкмәй. Сайт инициативаны автоматик рәүештә аныҡ биләмә етәкселегенә еткерә, ауыл, ҡала властары был проектҡа нисек ярҙам итә алыуын уйлай. Мәҫәлән, ҡайҙалыр ер бүлеп биреү йәки майҙансыҡ эшләү талап ителә. Хакимиәт был тәҡдим буйынса халыҡ менән фекер алыша. Ә инициатива менән сығыш яһаусы 10 көн эсендә яуап ала. Шулай уҡ ярҙам кәрәк булған ауыл үҙенең ихтыяжы тураһында яҙырға ла мөмкин. Әлбиттә, ул шунда уҡ тормошҡа ла ашмаҫ, әммә ярҙам итергә теләүселәр кемгә нисек ярҙам итеү тураһында баш ватмаясаҡ. Бер ыңғай властар ҙа ауыл ерендә халыҡҡа нимә кәрәк, нимә мөһим икәнен белеп-күреп торасаҡ.

Сайтта ярҙам һорап ғариза ҡалдырғанда уны аныҡ итеп яҙырға кәрәк. Мәҫәлән, шул-шул ауылда һәйкәлде реконструкциялау йәки спорт майҙансығы эшләүгә, мәктәпкә, балалар баҡсаһына ремонт йәки китап сығарыуға финанс ярҙамы кәрәк. Әммә дауаланыуға аҡса йыйыу, реклама, дини сара үткәреү, сәйәси эшмәкәрлек, мәғлүмәт һәм агитация компаниялары менән бәйле сараларҙы проект аша үткәреп булмай.

(Дауамы 2-се биттә).

12+

✓ *Проектҡа уйланылған, ысынлап ихтыяж кисерелгән темалар буйынса ғаризалар бирергә кәрәк, ә ауыл халҡы үҙ көсө менән атҡарып сыға алырлыҡ ваҡ эштәрҙе кемдер килеп эшләр тип көтөп ултырырға ярамай.*



*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# ГӘЗИТКӘ ЯҘЫЛЫУҘЫҢ...

## серен асам һеҙгә лә

**(Башы 1-се биттә).**



Меҫкенкәй, ниндәй көнгә төшкән икән, тип төрттөрөргә ашыҡмағыҙ әле, дуҫтар. Ярлы йәшәһә лә рухи байлыҡҡа эйә булырға теләгәндәр өсөн үҙенә күрә хәлдән сығыу юлы был. Бай йәшәһәгеҙ ҙә ошолай эшләп ҡарағыҙ әле, ҡәнәғәт ҡалырһығыҙ. Юғиһә бит, беләм, ҡайһы берәүҙәр гәзиткә яҙылыу өсөн тос ҡына кәшәлүгенән бер юлы 600-700-өн сығарып биргеһе килмәй бер ҙә, үҙем шаһит бындай осраҡтарға. Ә яйлап йыйылған ошо әҙме-күпме "болдо" ҡыуана-ҡыуана алып түләйһең, буштан килгән аҡса һымаҡ ҡына тойола ул, исмаһам, рәхәтен күрәйем, тиһең. Өҙөлөбөрәк киткәндә икмәк-һөтлөк тә артып ҡала әле ул. Шулай итеп, ярты йыл рәхәтләнеп гәзит уҡыйым.

"Киске Өфө"гә шул тиклем өйрәндем, почта йәшнигенә оҙағыраҡ һалмай торһалар, яҡын дуҫымды юҡһынып, борсолам, почта бүлексәһенә шылтырата башлайым. Баш ҡалабыҙ гәзите - "Киске Өфө" уҡыусыһы икәнемде унда ла яҡшы танытҡанмын, ғәфү үтенә-үтенә килтереп китәләр. Почтальонybыҙ сер генә итеп әйтеүенсә, уның бер хеҙмәттәше минең гәзитте шунда, почтала уҡ уҡып сығырға һорап тора икән. Мин быға бер ҙә асыуланмайым, изгелеген күргәс, килтереп һалһаң, етә, тинем, тик теге гәзит яратыусы хеҙмәткәргә, минең ысул менән яҙылһын ул да, тип, сәләм дә әйтеп ебәрҙем.

Әйткәндәй, ысынлап та, был гәзитте бер уҡыған кеше уға башкөллəй ғашиҡ була ла ҡуя. Йөкмәткеле, көнүҙәк, шулай уҡ халҡыбыҙ рухиәтен сағылдырып, тарихи хәтеребеҙҙе тергеҙеп, башҡа бер ҡайҙа ла донъя күрмәгән һирәк мәғлүмәттәр баҫыла уның биттәрендә. Бына, мәҫәлән, һуңғы һандарҙың береһен (№ 5) генә алып ҡарайыҡ. Беҙ атаһы менән "Тарих һөйләйем" рубрикаһындағы "Баш ҡаланың милли рухиәт үҙәге" тигән күләмле генә яҙманы бик ҡыҙыҡһынып уҡып сыҡтыҡ һәм үҙебеҙ өсөн билдәһеҙ булған күп кенә мәғлүмәт алдыҡ. Ф.Мостафина исемендәге 20-се ҡала Башҡорт гимназияһының 1973-1978 йылдарҙағы директоры Марат Хафизов (баҫмаға Сәрүәр Сурина әҙерләгән) 1970 йылда Башҡортостандың баш ҡалаһында ҡала балаларын башҡорт телендә уҡыта башлаған тәүге мәктәптең асылыу тарихын, уға йән көстәре менән ҡаршы килеүсе партия обкомы, уның күрһәтмәһен һуҡырҙарса үтәп өйрәнгән ялағай райком хеҙмәткәрҙәре хаҡында йәшермәй асыҡтан-асыҡ бәйән итә. Ирем менән икебеҙ ҙә заманында баш ҡалабыҙҙың рухи-мәҙәни тормошонда ҡайнап йәшәргә тырышһаҡ та, М.Хафизов яҙған ул йылдарҙағы илем, телем тип йән атҡан күпселек илһөйәр шәхестәребеҙҙе яҡшы беләбеҙ тип уйлаһаҡ та, был мәҡәлә күп нәмәгә күҙҙәребеҙҙе асты. Шул шәхестәр иҫәбендәге ошо мәктәптең тәүге ябай ғына уҡытыусыларына, ысынлап та, ниндәй ҡыҫым шарттарында эшләргә тура килгән. Ана шул уҡытыусы һәм тәрбиәселәрҙең дә исемлеге килтерелгән. Мәктәп асыу өсөн көрәшкән Рәми Ғарипов, Иҙел Агишев, Мөхәмәт Исҡужин, Әмир Сиражетдинов, Хәниф Вәлиев, Диҡҡәт Бураҡаев, Шәрифйән Ишемов, Нияз Мәжитов, Булат Рафиҡов һәм башҡа бик күп зыялыларыбыҙ менән бер рәттән, ябай уҡытыусылар исеме лә тарихҡа ингән, уларҙың фиҙаҡәрлеген ил онотмай. Тик ана шул уҡытыусыларҙың фамилиялары ғына бирелгән. Уларҙы ла исемләп әйтеү кәрәк булғандыр, тип уйланым, сөнки бер үк фамилиялы кешеләр байтаҡ бит. Тере тарихыбыҙ шаһиттары һирәк ҡалып килә. 1960-1980 йылдарҙағы ҡатмарлы ошондай милли-мәҙәни осорҙағы хәлдәр тураһында иҫтәлектәр күберәк баҫылһа ине, тип теләйем. Дөйөм генә билдәле булып та, ҡайһы бер кире күренештәргә, кемдең кем икәнлегенә әлеге мәҡәләләге кеүек күҙҙәрҙе астырған, ҡатмарлы, ауыр шарттарҙа ҡыҫымға бирешмәйенсә маҡсатҡа ынтылышлы эшләгән ҡыйыу шәхестәребеҙ хаҡында тағы ла күберәк яҙылһын ине. Ошо өлкәлә "Киске Өфө"ләргә артабан да уңыштар теләйем, рәхмәт һеҙгә!

**Фәриҙә ИШМУЛЛИНА,**
**хеҙмәт ветераны.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ЯҠТАШЛЫҠ КӨСӨН...

## атайсалда файҙаланайыҡ!



**(Башы 1-се биттә).**

***Урал КИЛСЕНБАЕВ, Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе урынбаҫары:*** Бик күп меценаттар тыуған ауылдарының тормошонда ҡатнашырға теләй, әммә ҡайһы бер сәбәптәр арҡаһында быны эшләй алмай. Беҙҙең проект уларға, донъяның ҡайһы мөйөшөндә йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, атайсалға ярҙам ҡулы һуҙырға булышлыҡ итәсәк. Проект бер нисә этапҡа бүленә. Март-апрелдә мәғлүмәт таратыла һәм ҡатнашыусыларҙан ғаризалар ҡабул ителә. Майҙан алып сентябргәсә проект ауылдарҙа тормошҡа ашырыласаҡ. Көҙгөһөн, "Яҡташлыҡ көсө - Сила землячества" тип аталған ҙур йомғаҡлау форумы уҙғарыласаҡ. Унда ҡатнашыу өсөн беҙ әүҙем меценаттарҙы - Башҡортостанда йәшәүселәрҙе лә, унан ситтә төпләнеүселәрҙе лә саҡырабыҙ. Уларға рәхмәттәребеҙҙе еткереп, бергәләшеп Башҡортостанды тағы ла нисегерәк яҡшыртыу тураһында фекер алышасаҡбыҙ.

***Гөлнур ҠОЛҺАРИНА, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты:*** Бик кәрәкле һәм мөһим проект, сөнки ҡайҙа ғына йөрөһәк тә, ниндәй генә урында эшләһәк тә, йәшәүгә көстө, энергияны, илһамды беҙ тыуған еребеҙҙән алабыҙ, хатта күптән инде ауылынан айырылған кешеләр ҙә йылына бер-ике тапҡыр булһа ла тыуған яғына ҡайтып, шунда мәңгелек һыйыныу урыны тапҡан ата-олатайҙары рухына бағышлап аяттар уҡытып, уларҙың ҡәберен таҙартып булһа ла китә һәм быны үҙенең изге бурысы тип һанай. Шул уҡ ваҡытта беҙ атай-олатайҙарҙың төйәген һаҡлап йәшәгән ауылдаштар алдында ла бурыслы, сөнки тап улар булғанда ҡайтыр еребеҙ, баш эйер тупрағыбыҙ бар. Шуға һәр кеше тыуып үҫкән төйәге мәнфәғәтендә хеҙмәт итергә тейеш, тип уйлайым. Әлбиттә, быға тиклем республикала Урындағы инициативаларға ярҙам итеү программаһы эшләп килде һәм халыҡ файҙалы эштәрҙе бергәләшеп атҡарырға була икәнен аңланы. Хәҙер был программаға тағы яңы проект өҫтәлһә, ауылдарыбыҙға икенсе һулыш биреү мөмкинлеге киңерәк асылыр, моғайын. "Ил төкөрһә - күл була", тип юҡҡа ғына әйтмәгән халҡым. Был проектта ниндәйҙер ауылдан, районда сығыусылар ҙа, шул уҡ ауыл кешеләре лә, бөтөнләй был районға йәки ауылға ҡатнашлығы булмаған граждандар ҙа ҡатнаша, ниндәйҙер изге эш башҡарыуҙа үҙенең өлөшөн индерә ала. Әлбиттә, проектҡа уйланылған, ныҡлы фекер алышынған, ысынлап ихтыяж кисерелгән темалар буйынса ғаризалар бирергә кәрәк, ә ауыл халҡы үҙ көсө менән атҡарып сыға алырлыҡ ваҡ эштәрҙе кемдер килеп эшләр тип көтөп ултырырға ярамай.

***Байрас АЗАМАТОВ, Юғары математика мәктәбе магистранты:*** Беҙҙең, йәштәрҙең, ҡарашынса, был бик һәйбәт проект, сөнки тыуған ауылыбыҙға, районыбыҙға һәр саҡ ярҙам иттек һәм итәбеҙ. Әммә быға тиклем йәштәр, күпселек остаздар үҙҙәренең бәләкәй ватанына ниндәйҙер ярҙам күрһәтергә теләк белдерһә лә, уларҙы берләштергән портал юҡ ине. Шуға күрә ярҙам булды, әммә ул бәләкәй күләмдә йәки һәр кемдең мөмкинлегенән сығып күрһәтелде. Хәҙер бергәләшеп, ҡушылып, бер ҙур проектты тормошҡа ашырырға мөмкин. Барыһы ла бергә тупланһын өсөн мәғлүмәтте ныҡлап таратырға, реклама эшләргә, халыҡҡа аныҡ итеп еткерергә кәрәк. Шулай уҡ порталдың мөмкинлектәрен киңәйтеп, унда быға тиклем башҡарған эштәр тураһында һөйләргә мөмкин булһа, тағы ла яҡшы булыр ине тип уйлайым. Сөнки быға тиклем дә үҙенең тыуған яғына, тыуған ауылына ярҙам итеүселәр, ауылдарында балалар майҙансыҡтары, спорт майҙансыҡтары һ.б. төҙөтөүселәр булды, шуға проект башланғанға тиклем тормошҡа ашырылған эштәрҙе лә күрһәтергә кәрәк. Был үҙе үк матур өлгө булып торор ине. Нисек кенә булһа ла, беҙ, йәштәр ҙә, был проектҡа ҡушылып китербеҙ тип уйлайым.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2021 йылда Еңеү көнөн билдәләү тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Планға ярашлы, 7 майҙа "Башҡортостан" дәүләт концерт залында байрам концерты ойошторола, 9 майҙа Өфөләге Еңеү паркында сәскәләр һалыу, Мәңгелек ут һәм Бөйөк Ватан һуғышы геройҙары һәйкәлдәре эргәһендә хөрмәт ҡарауылы ҡуйыу, хәрби хеҙмәтсәндәр парады, һуғыш техникаһын күрһәтеү, "Үлемһеҙ полк" акцияһын уҙғарыу ҡаралған. Райондарҙа ла барлыҡ саралар коронавирус инфекцияһына бәйле индерелгән ҡағиҙәләрҙе үтәп ойошторолорға тейеш.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың икенсе ултырышында республикала ер мөнәсәбәттәрен көйләгән законды ҡабул итергә ниәтләйҙәр. Ғинуарҙа депутаттар был документты беренсе уҡыуҙа хуплағайны. Закон балиғ булмаған инвалид бала тәрбиәләгән һәм бушлай ер участкаһы алырға хоҡуҡлы ғаиләләрҙе баланың инвалидлығын раҫлаған документты шәхсән тапшырыуҙан азат итәсәк. "Властың башҡарма органы йәки урындағы үҙидаралыҡ органы кәрәкле мәғлүмәтте ведомство-ара бәйләнеш ярҙамында һоратып аласаҡ", - ти парламент рәйесе Константин Толкачев.

✓12 мартҡа Башҡортостанда коронавирустан тағы 2 кешенең вафаты хаҡында билдәле булды, йәғни пандемия башланғаны бирле 310 кеше тажзәхмәттән донъя ҡуйған. Төбәктә барлығы 30181 кешелә, һуңғы тәүлектә 129 кешелә COVID-19 раҫланған. Уларҙың 24526-һы һауыҡҡан, шул иҫәптән бөгөнгө көнгә 204-е дауаханан сыҡҡан. Һуңғы тәүлектә шулай уҡ 145 кешегә дауахананан тыш пневмония диагнозы ҡуйылған. Әле стационарҙарҙа 262 кеше, ә 5083-ө өйҙә дауалана.

✓Коронавирус пандемияһы осоронда индерелгән 3 йәшкә тиклемге балалар өсөн түләүҙәрҙе ғаризаһыҙ оҙайтыу тәртибе туҡтатылды. Республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, хәҙер түләүҙәрҙе оҙайтыу өсөн документтарҙы йыйып, йәшәү урыны буйынса Халыҡҡа социаль ярҙам итеү республика үҙәгенә йәки Күп функциялы үҙәккә мөрәжәғәт итергә кәрәк. "Төбәктә балалы ғаиләләргә 2021 йылдың 31 майына тиклем бирелә торған түләүҙәрҙе һәм ярҙамдарҙы автоматик рәүештә оҙайтыу (алты айға) ҡаралған", - тинеләр ведомствола.

*✓ Республика буйынса 23 процент респондент вәкәләтлек һәм вазифалар менән файҙаланыу, 23 проценты ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ осраҡтары хаҡында һөйләһә, 5 проценты ришүәт алыу һәм биреүселәр хаҡында белеүе тураһында әйткән.*



*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# РӘХМӘТЛЕ КҮСТӘНӘС ТӘ...

## ришүәт буламы?



**Был донъяның аптыраш тыуҙыра торған күренештәренә беҙ йылдар буйы күнегеп, ҡайһыларыбыҙ хатта был юҫыҡта оҫтарып, шымарып та китте һәм әлеге кире күренеш йәмәғәтселек аңында нормаға, ғәҙәти хәлгә әүерелде. Нимә тураһында һүҙ башлағанды хәҙер аңларһығыҙ.**

Башҡортостан халҡының 18 проценты эш урынында бер тапҡыр булһа ла ришүәт алған йә үҙе биргән, тип хәбәр итә "hh.ru" сайты махсус тикшеренеү һөҙөмтәләрен. Эйе, бының нимәһенә аптырайһың? Шунһыҙ һиңә кәрәкле ишектәр ҙә, теге йәки был кимәлдәге власть эйәләренең йөҙө-күңеле лә асылмаясаҡ. Майлаһаң-яйлаһаң, шығырлап торған ишектәр ҙә шым ғына асылып китеүсән. Әлеге 18 проценттың биргән йә алған ришүәт күләме ни дәрәжәләлер, әммә улар хәллерәк, аҡсалыраҡ кешеләр йә эшҡыуарҙар, бизнесмендар ҡатламылыр, моғайын. Ләкин уларҙың да барыһы ла был хаҡта өндәшмәүҙе хуп күрә. Юғиһә, әлеге проценттар иҫәбе 18-ҙән күпкә ашып киткән булыр ине.

Ә инде ябай халыҡҡа килгәндә, улар ришүәтсегә нимә генә бирә ала инде? Бик кәрәк эшен йомошлағанда шулай ҙа бал, матур ҡаплы кәнфит, ҡиммәтле сәй, кофе кеүек күстәнәс биреү ғәҙәте барыбыҙға ла мәғлүм. Яңыраҡ ҡына шулай табип бүлмәһендә ултырғанда быңдай хәлгә үҙем шаһит булдым. Тос ҡына шыптыр моҡсай тотҡан өлкән йәштәге бер апай килеп инде лә: "Яҡшы дауаланығыҙ, рәхмәт, ҡыҙым. Бына һеҙгә күстәнәс - ауыл ҡаҙы килтергән улым, беҙ ҡайтып китәбеҙ", - тип хушлашты ла тиҙ генә ишеккә ыңғайланы. "Что вы делаете?" тигән булып ҡыҙарынды ла табип, апай сығып киткәс, осло туфлийе менән төйөнсәк-күстәнәсте өҫтәл аҫтынараҡ шылдырып та ҡуйҙы. Ғәҙәти күренешме? Тик шуны әйтегеҙ: ришүәтме был, түгелме? Бер яҡтан, һауығып, аяғына баҫҡан кешенең ихлас рәхмәте был. Ә шул рәхмәтте һүҙ менән генә әйтеүҙе өнәмәй күптәр. Ҡоро ҡашыҡ ауыҙ йырта, тиҙәрме? Унан һуң киләсәген дә ҡайғырталыр ауырыу кеше: ошо уҡ табипҡа тағы көнө төшөүе бар бит. Ә бына иғтибар итһәгеҙ, һәр бер медицина учреждениеһының мәғлүмәттәр мөйөшөндә һәр төрлө документтар, положениеларҙан өҙөктәр, һаулыҡ һаҡлау органдары телефондары менән бер рәттән, коррупцияға ҡаршы закондан да өҙөк-иҫкәрмә элеп ҡуйылған. Унда бүләктең суммаһы 3 меңдән артһа, ришүәт булып иҫәпләнеүе бәйән ителә. Ихлас рәхмәт тойғоһо менән бирелгән хәлдә лә, табиптарға, уҡытыусыларға һәм дәүләт хеҙмәткәрҙәренә бүләк биреүҙән тыйылырға, бары тик сәскә гөлләмәһе менән генә сикләнергә кәңәш итә юристар.

Гөлләмә тигәндәй, мәктәптәрҙә хәҙер уларҙан да баш тартырға ҡарар ителгәйне, буғай. Эш урынындағы коррупция күренештәренә килгәндә, Башҡортостан буйынса тикшеренеүсе һорауҙарына яуап биргән 67 процент кеше үҙҙәренең эш урынында коррупция осраҡтары хаҡында бер ни ҙә билдәле түгел, тип әйтһә, Рәсәй буйынса ундайҙар 65 процент. Ә инде республика буйынса 23 процент респондент вәкәләтлек һәм вазифалар менән файҙаланыу, тағы 23 проценты ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ осраҡтары хаҡында һөйләһә, 8 процент кеше аҡсаға һатылыу һәм 5 проценты ришүәт алыу һәм биреүселәр хаҡында белеүе тураһында әйткән. Тикшеренеү материалдарында әйтелеүенсә, ришүәтселек тураһында иң күп белеүселәр хәүефһеҙлек өлкәһе, юриспруденция һәм төҙөлөш компанияларында икән. Ә шулай ҙа был юҫыҡта медицина, фармацевтика һәм банк хеҙмәткәрҙәре өлөшө иң юғарыһы булып ҡала килә.

Коррупцияға ҡаршы көрәш сараларына килгәндә, Башҡортостан респонденттарының 59 проценты улар эшләгән компанияларҙа комплаенс системаһы ғәмәлдә булыуы хаҡында хәбәр итә. Был саралар иҫәбендә туған-тыумаса, ирле-ҡатынлыларҙың бер урында бергә эшләүҙәрен тыйыу тәүге урында тора. 18 процент хеҙмәткәр уларға клиенттарҙан билдәләнгән хаҡтан ҡиммәтерәк булған бүләктәр алыуҙы тыйыуҙарын белдерә. 8 процент хеҙмәткәр етәксе менән уның ҡул аҫтында эшләүселәр араһында романтик мөнәсәбәттәргә тыйыу барлығы һәм 3 процент кеше, ғөмүмән, хеҙмәткәрҙәр араһында ла ғишыҡ-мишыҡ хәлдәргә рөхсәт юҡлығы хаҡында хәбәр иткән.

Бына бит, теләһәләр - эшләйҙәр. Быңдай тәжрибәне һәр бер хеҙмәт коллективына күсерергә күптән ваҡыт. Ә инде ҙур заманса компаниялар өсөн был сара уларҙың абруйы, имиджы менән бәйле. Сәләмәт хеҙмәт коллективында үҙ-ара эшлекле мөхит, бер-береҥ менән таҙа, саф, әхлаҡи мөнәсәбәттәр генә хакимлыҡ итергә тейеш. Бары шул саҡта ғына юғары эш һөҙөмтәләренә өлгәшергә мөмкин, тип иҫәпләй махсус тикшеренеүселәр.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*



# ТҮБӘНДӘР КИМӘЛЕНӘ ТӨШМӘЙЕК

**Бер танышым бар. Телефондан һөйләшһәк, уның менән кәм тигәндә бер сәғәт һөйләшәбеҙ ҙә ҡуябыҙ. Дөрөҫөрәге, ул һөйләй, мин тыңлайым. Иртән тороп, кисен ятҡансы нимә эшләгәнен, нимә күргәнен һөйләй. Алдамай. Аштырмай. Шаштырмай. Нисек бар, шулай бәйән итә. Мин хәҙер уның тураһында бөтәһен дә беләм кеүек.**

Иртә тора ул. Торғас та, ошо иртәне тыныс ҡаршы алырға насип иткән Юғары көскә, ғүмер бүләк иткән әсә-атаһына, уның бар етешһеҙлектәрен белгән, ғәфү иткән, яратҡан икенсе яртыһына рәхмәт әйтә. Ашыҡмай ғына аяғына баҫып, лимфатик төйөндәренә табан аяҡ-ҡулдарын һыпыра. Шулай итһәң, йәшлек матурлығың оҙаҡҡа һаҡлана, ти ул. Иртән мотлаҡ ҡәһүә эсә... Ҡиммәтле ҡәһүә. Матур сынаяҡтан. Яйлап. Ҡабаланмай. Түменән, хуш еҫенән кинәнес алып...

Ғөмүмән, ул иртәнге ваҡытты тик үҙенә генә арнай. Саф һауала йөрөргә ярата. Йәйәү йөрөргә тырыша. Юл аша үткәреп ебәргән водителгә баш ҡағып рәхмәт әйтеп уҙа. Магазинда хеҙмәтләндергән кассирға ла йылы һүҙҙәрен йәлләмәй. Тротуарҙа ҡаршы килгән кешеләргә лә йылмая. Мохтаждарға һорамаһа ла ярҙам итә, улар әллә ҡайҙан күренеп тора, ти ул. Бәләкәй бала осраһа, берәй тәмлекәс биреп үтә. Урам бесәйҙәре өсөн дә сумкаһында һәр ваҡыт нимә булһа ла йөрөтә. Тирә-яҡҡа һоҡлана...

Иртәнге мәлдәрҙе үҙенә генә арнаһа, кисен яҡындары өсөн йәшәй. Тәмле итеп бешерә, ризыҡты затлы һауытҡа һала, ҡыҫтап-ҡыҫтап һыйлай. Беҙҙең күбебеҙ кеүек, ашап туйғас түгел, ә яҡын кешеләре өҫтәл артына ултырғас, ошо ризыҡты биргән Ғаләмдәр хужаһына рәхмәт әйтә...

Һөйләй ҙә һөйләй... Әммә ауырыу булһа ла, яҙмышына, уны шундай хәлгә килтергән кешеләргә лә зарланмай. Ул шул тиклем тормошто ярата, һөйләшкән һайын унан үҙем өсөн күп нәмә алам. Бер үк нәмәләрҙе ҡат-ҡат һөйләһә лә, һәр ваҡыт үҙем өсөн асыш яһайым. Мин уның янында үҙемде бәләкәс кенә итеп тоям. Ҡайһы берҙә хатта үҙемде сүп итеп хис итәм. Ҡайһы берҙә, тигәнем, үҙем теләмәгән кимәлгә төшкән ваҡытта. Тап ошондай мәлдә шылтырата ла ул. Бар танышлығыбыҙ, дуҫлығыбыҙ - ошо ике телефон араһы.

...Бер аҡыл эйәһе дуҫтарҙы дүрт төргә бүлгән: "Аҙыҡ һымаҡ, көн дә мохтаж булған дуҫтар була. Дарыу һымаҡтары ла бар, уны ҡыйын саҡта үҙең эҙләп алаһың. Ауырыу һымаҡтары һине үҙе таба. Һәм тағы ла һауа кеүектәре була. Улар күрер күҙгә бик күренмәй, әммә һәр ваҡыт һинең эргәңдә", - тигән.

Мин был танышымды дүртенсе төргә индерәм. Ул миңә һауа кеүек: күренмәй, шулай ҙа һәр ваҡыт эргәмдә.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда пневмония менән ауырыу осрағы былтырғыға ҡарағанда 101 процентҡа артҡан, тип хәбәр итте Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә вице-премьер - республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин. Шул уҡ ваҡытта 100 мең кешегә ОРВИ һәм грипп йоҡтороусылар күрһәткесе 20 процентҡа кәмегән.

✓Республиканың Милли банкында хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостанда табылған ялған банкноттарҙың 90 проценты 5 меңлек купюралар. 2020 йылда төбәктең банк системаһында бөтәһе 381 ялған ҡағыҙ аҡса асыҡланған. Шуның 347-һе биш меңлек, 29-ы бер меңлек, 2-һе ике меңлек. Рәсәй банкы ҡағыҙ аҡсаларҙы тикшереп алырға кәңәш итә, шик тыуҙырғанын теләһә ҡайһы коммерция банкында бушлай тикшертергә була.

✓Журналистарҙың компетенция үҙәге буласаҡ. Башҡортостан Республикаһы Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары буйынса агентлығының коллегия ултырышында шул хаҡта һүҙ булды һәм Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министр урынбаҫары Азат Бадранов журналистарҙы яңы медиа менән эшләү ысулдарына өйрәтеү кәрәклеген билдәләне. "Эшләп йөрөүсе һөнәрмәндәрҙе саҡырып, даими нигеҙҙә эшләгән медиа-мәктәп ойоштороғоҙ. Унда һәр киң мәғлүмәт сараһы аудитория менән эшләү тәжрибәһен, шул уҡ ваҡытта баҫма матбуғаттың үҫешенә булышлыҡ итәсәк белем алһын", - тине Азат Шамил улы.

✓2021 йылдың ғинуар-июнендә Башҡортостанда ауырлы ҡатын-ҡыҙҙарҙың репродуктив мотивацияһын өйрәнеүгә йүнәлтелгән социологик тикшереү үткәреләсәк. Анкета һорауҙары ярҙамында бала табырға йыйынған 11,7 мең ҡатын-ҡыҙҙың фекере менән ҡыҙыҡһыныу күҙ уңында тотола. Алынған һөҙөмтәләр балалы ғаиләләргә яңы ярҙам сараларын әҙерләгәндә файҙаланыласаҡ.

✓Башҡортостандың балиғ булған халҡының 41 проценты тәмәке тарта. Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының 2020 йылға отчетына ярашлы был күрһәткес 41,2 процент тип фаразланған. Шулай уҡ ведомство отчетында күрһәтелеүенсә, сәләмәт тормош алып барыусылар һаны ла кәмегән. Документҡа ярашлы, 2020 йылға план күрһәткесе 50 процент тирәһе ҡуйылған, ысынбарлыҡта республиканың тик 5,9 проценты ғына сәләмәт тормош алып бара.

✓ *Һөҙөмтәлә беҙ тәҙрәләре бер-береһенә ҡарап торған күп ҡатлы йорттар кварталдарына эйә булабыҙ, ихаталар машиналар менән тула, улар халыҡ өсөн уңайһыҙлыҡ тыуҙыра, унда тиҙ ярҙам машиналары үтеп инә лә алмай.*



*ҠЫҪҠАСА*

# БАЛАЛАРҒА ҺАТМА

✓ **БР Дәүләт Йыйылышы депутаттары пленар ултырышта беренсе уҡыуҙа алкоголһеҙ тонуста тоткан эсемлектәрҙе һатыу өлкәһендә сикләүҙәрҙе боҙған өсөн яуаплылыкты ҡараған закон проектын тикшерҙе.** Уға ярашлы, граждандарға - 3-4 мең һум, вазифалы кешеләргә - 30-40 мең һум, юридик шәхестәргә 150-200 мең һумға тиклем штраф һалынасаҡ. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, былтыр республика парламенты балиғ булмағандарға энергетик эсемлек һатыуҙы тыйған һәм уны һатыу урынын сикләгән закон ҡабул итте. "Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үҫмерҙәр йыш ҡына энергетиктарҙың зарарлы эҙемтәһен белмәй эсә, - ти Константин Толкачев. - Уны даими рәүештә ҡулланыу физик һаулыҡҡа ғына түгел, ә психикаға ла кире йоғонто яһай. Йөрәк-ҡан тамырҙары проблемаларынан тыш, депрессияға, психик ауырыуҙарға ла килтерергә мөмкин. Шуға күрә, был продукцияға ҡарата ҡайһы бер сикләүҙәр бик тә кәрәк".

✓ **Рәсәйҙә ваҡ ришүәтте полиция, енәйәт-башҡарма системаһы хеҙмәткәрҙәре һәм педагогтар ала, тип хәбәр итә РИА Новости коррупцияға ҡаршы ҡануниәттең үтәлешен күҙәтеү идаралығы начальнигы Виктор Балдинға һылтанма менән.** Балдин әйтеүенсә, йышыраҡ бындай енәйәткә полиция хеҙмәткәрҙәре бара, рәсәйҙәр хоҡуҡ боҙғанда яуаплылыҡтан ҡасыу өсөн уларға ришүәт бирә. "Педагогтар имтиханда яҡшы баһа ҡуйған өсөн, ә Федераль яза башҡарыу хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре төрмәләргә тыйылған әйберҙәр индереү һәм тотҡондарға еңелерәк шарттар тыуҙырыу өсөн аҡса ала", - ти Балдин. Рәсәй Енәйәт кодексының 291.2 статьяһына ярашлы, ваҡ ришүәт күләме 10 меңдән артмай. Бындай енәйәт өсөн бер йылға тиклем иркенән мәхрүм итеү ҡаралған. Әммә ришүәтсе быға тиклем дә оҡшаш енәйәт ҡылғанда өс йылға тиклем иркенән мәхрүм ителеүе бар.

✓ **Башҡортостанда 15 йәштән өлкән эшсе көстәр һаны 2020 йылдың октябрь-ноябрь айҙарында 1,930 млн кешенән артып китте, тип хәбәр итә республика статистары.** Шуларҙың 1,814 миллионға яҡыны иҡтисадта мәшғүлдәр, 116 меңдән ашыу кеше эшһеҙ тип иҫәпкә ингән. Ә республикала эшһеҙлек кимәле 2020 йылдың октябрь-декабрь айҙарында 6 процентҡа кәмегән. "2021 йылдың ғинуары аҙағына республиканың халыҡ мәшғүллеге хеҙмәтендә 101,5 мең хеҙмәт урыны булмаған граждан иҫәптә торған, шуларҙың 96,9 меңе рәсми рәүештә эшһеҙ булып теркәлгән. Шул иҫәптән эшһеҙлек буйынса 44 мең кеше аҡсалата ярҙам ала. Рәсми теркәлгән эшһеҙлек кимәле хеҙмәткә яраҡлыларҙың 5,1 процентын тәшкил итә", - тип хәбәр итә Башстат.

✓ **Башҡортостандың "Ер мөнәсәбәттәрен көйләү тураһында" законына ярашлы, күп балалы һәм инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләр шәхси торлаҡ төҙөлөшө өсөн бушлай ер участкаһы урынына бер тапҡыр 250 мең һум түләү алырға мөмкин.** 2020 йылда бындай түләү тураһында 160 таныҡлыҡ бирелгән, 40 таныҡлыҡ буйынса муниципалитет хакимиәттәрендә эш бара. 2021 йылға республика бюджетынан 200 таныҡлыҡ биреүгә 50 миллион һум аҡса бүленгән. "Йәшәү өсөн уңайлы мөхит булдырыу" йүнәлеше буйынса 2020 йылдың 31 декабренә ҡарата Башҡортостанда күп балалы һәм инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләргә 45 000 ер участкаһы бүленгән, шул иҫәптән 1300-е - 2020 йылда. Участкалар менән тәьмин ителеш 72,8 процент.

*ЕТӘКСЕ ҺҮҘЕ*

# УРТАҠ ТЕЛ ТАБЫРҒА!



**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров торлаҡ төҙөлөшө проблемалары буйынса даими эшләүсе координацион кәңәшмә үткәрҙе. Был юлы ул айырым нөктәләрҙәге төҙөлөш мәсьәләһен күтәрҙе һәм ундағы ауырлыҡтар тураһында асыҡтан-асыҡ белдерҙе.**

"Бик йыш төҙөүсе ойошма шәхси секторҙа йәшәүселәрҙе күсерергә теләмәй, ә мәсьәләне еңел генә хәл итеп, өйҙәр араһына ҙур ҡатлы йорт ултыртып ҡуя. Шул уҡ ваҡытта балалар баҡсалары, спорт майҙансыҡтары, ҡала халҡының яратҡан скверҙары юҡҡа сыға. Халыҡ менән кәңәшләшеп тә тормайҙар. Ошо баҡыт эсендә Өфө ихаталарынан күпме хоккей ҡумталары, футбол майҙансыҡтары юҡҡа сыҡҡанын күҙ алдына ла килтерә алмайым. Ә улар балаларға кәрәк. Һөҙөмтәлә беҙ тәҙрәләре бер-береһенә ҡарап торған күп ҡатлы йорттар кварталдарына эйә булабыҙ, ихаталар машиналар менән тула, улар халыҡ өсөн уңайһыҙлыҡ тыуҙыра, унда янғын һүндереү, тиҙ ярҙам машиналары үтеп инә лә алмай.

Бындай төҙөлөш алып барыусыларҙы халыҡтың фекере лә, улар яғынан булған ҡаршылыҡтар ҙа ҡыҙыҡһындырмай. Руставели урамы эргәһендәге йорт мәсьәләһенә урап ҡайтһаҡ, мин асыулы халыҡты күрҙем һәм уларҙы һуңғы сиккә еткергәндәрен аңланым. Халыҡты шул тиклем мыҫҡыллларға ярамай. Әммә төҙөүселәрҙе был ҡурҡыныс түгел. Улар үҙҙәренсә эшләй, бер нәмәнән дә ҡурҡырға кәрәкмәй икәненә инанғандар. Улар үҙҙәренең документтарын дөрөҫ тип иҫәпләй. Шуға күрә мин шундай рөхсәт биргән Өфө ҡалаһы хакимиәтенә ҡәнәғәтһеҙлек белдерәм. Һөҙөмтәлә беҙгә бик ауыр ҡарарҙар ҡабул итергә тура килә, улар ике яҡлы. Бер яҡтан, төҙөүселәрҙең төҙөлөштө туҡтатыуын һорайбыҙ, әммә мин ундай вәкәләткә эйә түгел. Шота Руставели урамындағы төҙөлөштө туҡтатыуҙы һорайбыҙ, уның буйынса һаманғаса һуңғы ҡарар юҡ, әммә беҙ унда төҙөлөш алып барырға юл ҡуймаясаҡбыҙ. Зорге урамындағы парк зонаһында ла төҙөлөштө туҡтатыуҙы һорайбыҙ. Яңыраҡ документтар буйынса иң күбе алты ҡатлы йорттар төҙөүгә рөхсәт алып, Армавир урамында 27 ҡатлы йорттар төҙөй башлауҙарын асыҡланыҡ. Былар - республикала булған проблемалы объекттарҙың бәләкәй генә өлөшө.

Төҙөлөш - бик мөһим, кәрәкле, социаль әһәмиәтле бизнес икәнен дә аңлайбыҙ, төҙөүселәргә ихтирам менән ҡарайбыҙ. Әммә мин Өфөләге төҙөлөштә суд, пропаганда һуғышына әйләндерергә теләмәҫ инем. Шуға күрә, беҙгә артабан ниндәй ғәмәлдәр башҡарырға икәнен уйларға кәрәк. Өфөгә билдәле ярҙам күрһәтеү һәм булған баҫымды тотоп тороу өсөн Ҡала төҙөлөшө советын булдырҙыҡ. Уның төҙөлөштө туҡтатырға ла, рөхсәт итергә лә вәкәләте юҡ. Ул бары тик халыҡтың да, ҡаланың да, төҙөлөш бизнесының да мәнфәғәтен иҫәпкә алған кәңәшмә органы.

Был мәсьәлә буйынса фекер алышырға кәрәк. Артабан да шулай дауам итеү мөмкин түгел. Башҡортостанда төҙөлөш эшмәкәрлеген яйға һалырға йүнәлтелгән тәҡдимдәребеҙҙә бер яңылыҡ та юҡ. Рәсәй Федерацияһының бик күп субъекты күптән быны менән шөғөлләнә. Күптән түгел республиканың Төҙөлөш министрлығы Премьер-министр Андрей Назаров етәкселегендә Мәскәү өлкәһенә барҙы. Унда төҙөлөш күләме беҙҙекенән бер нисә тапҡырға артығыраҡ. Һәм һәр төҙөүсе ярамаған урынға бармаясағын яҡшы белә. Ә төҙөлөштә проектлаған территорияның мәктәп, балалар баҡсаһы, поликлиника һәм башҡа социаль объекттарға ихтыяжы иҫәпкә алына.

Минә Өфөлә төҙөлөш бизнесын алып барыу ни тиклем ауыр һәм уның килеме Мәскәү өлкәһенә ҡарағанда күпкә түбән булыуы тураһында бик күп әкиәт һөйләнеләр. Мин Мәскәү яңы етәкселеге менән һөйләштем һәм хаҡтарҙы бергә сағыштырҙыҡ. Ҡайһы берҙә Өфөлә торлаҡ йорт төҙөү шундай уҡ объектты Подольскиҙа, Реутовола, Королевта төҙөүгә ҡарағанда килемлерәк".

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# МИЛЛИ МӘКТӘПТӘР БУЛЫРМЫ?

**РФ Дәүләт Думаһы Башҡортостан парламентының "Мәғариф тураһында" федераль законға "этномәҙәни белем биреү ойошмаһы" терминын индереү инициативаһы менән тәҡдим иткән закон проектын ҡарауҙы апрелгә тәғәйенләгән.**

БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары был категорияға туған телдәрҙе өйрәнгән мәктәптәрҙе индереүҙе күҙаллай. Закон проектына ярашлы, белем биреү теле (телдәре) мотлаҡ этномәҙәни белем биреү ойошмаһының Уставында күрһәтелергә тейеш. Шулай уҡ этномәҙәни муниципаль белем биреү ойошмаларын муниципаль районда йәки ҡала округында аныҡ территорияға бәйләмәҫкә тәҡдим ителә. "Туған (рус теле булмаған) телдә уҡытҡан белем биреү ойошмаһын аныҡ территорияға бәйләүҙең мәғәнәһе юҡ. Закон буйынса гражданин белем биреү телен һәм ниндәй телдә өйрәнеүҙе ирекле рәүештә үҙе һайларға хоҡуҡлы. Ғәмәлдә иһә ата-әсәләр баланы милли мәктәпкә алып килә лә, уның өсөн белем биреүҙең икенсе телен һайлай. Мәктәп ҡатмарлыҡтар менән осраша, сөнки кәрәкле кадрҙар һәм тейешле уҡытыу-методик әсбаптар менән тәьмин ителмәгән. Әгәр этномәҙәни белем биреү ойошмаһының уставында уҡытыу теле күрһәтелһә һәм ул аныҡ территорияға бәйләнмәһә, уның уҡыусыларға сифатлы белем биреү мөмкинлеге ҙурыраҡ буласаҡ", - ти БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөләге "Биатлон" спорт-һауыҡтырыу комплексы территорияһында 8 март көндө утыҙ алтынсы тапҡыр Өфө саңғы марафоны уҙғарылды. Унда Рәсәйҙең 32 төбәгенән һәм 87 ҡалаһынан барлығы 490 спортсы һәм һәүәҫкәр ҡатнашты. 50 километр арауыҡта ир-егеттәр араһында беренсе урынды Алмаз Таипов, ҡатын-ҡыҙҙар араһында Башҡортостандан Диана Кинйәғолова яуланы.

✓Ә. Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы Булат Йосоповтың "Шағир көндәлеге" фильмында икенсе пландағы һәм эпизодик роль башҡарыуға кастинг иғлан итте. Ҡатнашыу өсөн 7 йәштән 65 йәшкә тиклемгеләр 3 минутлыҡ сығыш әҙерләргә, анкета тултырырға тейеш. Һайлап алыу Өфөлә Актерҙар йортонда 21 март сәғәт 10-да башлана.

✓Өфөлә "Яңы моң" халыҡ-ара музыкаль конкурсының һайлап алыу туры үтте. Ярышҡа 7 илдән 5 меңдән ашыу кеше ғариза ебәргән, онлайн-тыңлауҙан һуң 55 йырсы һайлап алынған. Жюриҙа билдәле Рәсәй продюсеры Лина Арифуллина, йырсы Гөлназ Асаева һәм проект авторы, Башҡортостандың халыҡ йырсыһы Радик Юлъяҡшин. Ҡатнашыусыларҙың һайлап алыуҙағы сығыштарын 13 марттан Башҡорт юлдаш телевидениеһында ҡарарға була. "Яңы моң" проекты Башҡортостан Башлығының 30 миллион һум грантын алғайны.

✓Өфөлә 21 һәм 22 мартта "Gastro master" ҡунаҡсыллыҡ чемпионаты уҙғарыла. Ярыштар "Торатау" Конгресс-холл бинаһында "Йәмәғәт туҡланыуы индустрияһы халыҡ һаулығы һағында" республика кулинария форумы сиктәрендә Башҡортостан Башлығы гранты аҡсаһына ойошторола. Рестorандар һәм республиканың һөнәри уҡыу йорттары уҡыусылары командалары ике көн ярышасаҡ. Еңеүселәр быйыл сентябрҙә Пермдә үтәсәк "Легенда" Бөтә Рәсәй кулинария олимпиадаһында, һуңынан Мәскәүҙәге Chef a la Russe чемпионаты финалында Башҡортостан намыҫын яҡлаясаҡ.

✓Февраль аҙағында реклама щиттары хужаларынан Өфө полицияһына билдәһеҙ кешеләрҙең алюмин панелдәрҙе урлауы тураһында ғаризалар килә. Улар дөйөм алғанда 600 мең һумдан ашыу зыян күргән. Енәйәтте тикшереү бүлеге хеҙмәткәрҙәре шик төшкән 25 һәм 26 йәшлек ике Өфө кешеһен ҡулға алған. Енәйәтселәрҙең дүрт осраҡҡа ҡағылышы булыуы раҫланған, улар яҡтылыҡты сағылдырыусы жилеттар кейеп эш иткәнлектән, граждандарҙа шик тыуҙырмаған.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

✓ *"Ҡашҡаҙан" паркы Рәсәйҙә һыу сығанағында урынлашҡан иң яҡшы парк булырға тейеш. Сөнки күл кеүек бындай үҙенсәлекле тәбиғәт объекты бер ҡалала ла юҡ тиерлек", - ти Радий Фәрит улы.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ҠАРҘАР ИРЕЙ, ҺЫУ ТАША...



**Әлегә ҡар иреү түгел, киреһенсә, яҙ менән ҡыштың бер-береһенә ал бирмәй ҡырталашҡан мәле - яҙ тиҙерәк үҙенең идара вәкәләттәрен урынлаштырырға теләһә, ҡыш ғали йәнәптәре, үҙенә алған йөкләмәһен үтәп бөтөргә тырышып, йә ҡар яуҙыра, йә буранын сығара. Хәйер, йылдың был миҙгеле тап шулай булырға тейештер ҙә, тәбиғәттә ошо айҙа аҡман-тоҡман бурандары уйнауына хәҙер инде күнегергә ваҡыт.**

Әлбиттә, бындай күренеш автоһәүәҫкәрҙәргә һәм ҡала йәшәйешен тәьмин итеүсе хеҙмәттәргә генә ауырлыҡтар тыуҙыра, шуға ла ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмәлә алда торған ташҡын мәсьәләһенең көн үҙәгенә сығарылыуы ла юҡҡа түгел. "Өфө ҡалаһының Граждандарҙы һаҡлау идаралығы" МБУ начальнигы Рафаэль Әхмәтов белдереүенсә, быйылғы ташҡын, ғәҙәттәгесә, өс төрлө сценарийға ярашлы үтеүе мөмкин: йылға нығ ташмағанда, йәғни 330-660 сантиметрға күтәрелгәндә, һыу ярҙарынан сыҡмай һәм һыу баҫыу күҙәтелмәй; һыу кимәле 700-800 сантиметр булғанда, Дим, Ленин, Киров райондары территорияларының 1699 йорт (5559 кеше йәшәй) бер өлөшө һыу баҫыу зонаһына эләгә; һыу кимәле нығ күтәрелгәндә - 850-990 сантиметр - атап үтелгән райондарҙа һәм Калинин районы биләмәһендә барлығы 2186 йортто һыу баҫыуы күҙаллана.

Әлеге ваҡытта алынған мәғлүмәттәргә ярашлы, Ағиҙел йылғаһында ҡар ҡатламы 49 сантиметр тәшкил итә, йәғни норманан 7 процентҡа кәмерәк. Димдә - 44 сантиметр (19 процентҡа күберәк). Ағиҙелдең, Ҡариҙелдә лә индереп, ҡар ҡатламындағы һыу 103 миллиметр тәшкил итә, йәғни норманан 20 процентҡа әҙерәк. Димдә был күрһәткес 110 миллиметр (норманан 11 процентҡа күберәк). Боҙ ҡалынлығы нормаһы 45-80 сантиметр булғанда, әле ул 30-65 сантиметр ғына. Йылдағыса, махсус хеҙмәттәр яҙғы ташҡынды әҙемтәһеҙ һәм хәүефһеҙ үткәреү өсөн алдан әҙерләнә. Әлеге ваҡытта ташҡынға ҡаршы 26 штаб, 57 граждандарҙы ваҡытлыса урынлаштырыу пункты ойошторолған. Шулай уҡ эсәр һыу скваженаларын, колонкаларҙы герметизациялау, ямғыр һәм ҡар һыуҙарын ағыҙыу канализацияларын таҙартыу һәм башҡа объекттарҙы тикшереү буйынса эштәр алып барыла.

Ҡала хакимиәтенең иғтибар үҙәгендә булған икенсе мәсьәлә - Салауат Юлаев проспекты менән Зәки Вәлиди урамы киҫелешендәге юл сиселешен ремонтлау барышы. Ҡатмарлы һауа шарттарына ҡарамаҫтан, был участкала төҙөлөш-монтаж эштәре графикка ярашлы, ике сменала, шул иҫәптән төнөн дә алып барыла һәм юлды планлаштырылған ваҡытта - 1 сентябрҙә асыу көтөлә.

Яҙ - ташҡын мәле генә түгел, төҙөкләндереү эштәре башланған ваҡыт та. Быйыл Өфөлә "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркын төҙөкләндереү эштәре тамамланыуы көтөлә. Шулай уҡ Совет майҙаны ла гөрләйәсәк - тротуарҙар һәм газондар эшләнәсәк, ағастар ултыртыласаҡ, юл һалынасаҡ. "Беренсе Май" мәҙәниәт һәм ял паркы ла, Киров районындағы объекттар ҙа үҙгәреш кисерәсәк. Ҡыҫҡаһы, баш ҡала тағы ла матурыраҡ, гүзәлерәк, йәмлерәк буласаҡ.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# БЫНДА КҮЛ ҺӘМ...

## парк буласаҡ

**Республика Башлығы Радий Хәбиров менән Өфө ҡала хакимиәте башлығы Сергей Греков баш ҡаланың Октябрь районында урынлашҡан "Ҡашҡаҙан" паркын төҙөкләндереү барышын тикшерҙе.**

Төҙөлөштө тормошҡа ашырыусы ойошма вәкилдәре һүҙҙәренсә, тотош паркка атама биргән күл беренсе тапҡыр тулыһынса таҙартыла. Бының өсөн ул киптерелә, яҡынса 40 мең йөк машинаһы ләм, батҡаҡ һәм көнкүреш сүп-сары сығарыла, төбө тәрәнәйтелә. Иң тәрән урында ул дүрт метрға етәсәк. Балсыҡ "йоҙағы" - һыу бер кимәлдә торһон өсөн эшләнгән ҡоролма тамамланыу алдында. Һыу сығанағы экологияһына күл эргәһендәге шәхси секторҙа урынлашҡан йорттарҙан ағып төшкән һыуҙар имен булмаған санитар хәл-торош тыуҙырһа, төрлө паразиттар менән зарарланыуға килтерһә, төҙөкләндереү барышында күл тирәләй махсус ҡоролмалар эшләнгән. Ул ирегән ҡар, ямғыр, шул иҫәптән шәхси секторҙан ағып төшкән һыуҙарҙы йыйып, Жуков урамындағы коллекторға ағыҙасаҡ.

Башҡорт дәүләт университетының Экология һәм хәүефһеҙлек кафедраһы профессоры Айрат Ишбирҙин яңыртылған күлдең һыуы таҙа һәм уның экосистемаһын, биологик төрлөлөгөн тергеҙергә мөмкин булырына ышана.

"Беҙ төрлө варианттарҙы ҡараныҡ. Әммә дөрөҫ ҡарар ҡабул иттек тип уйлайым һәм шуның менән ғорурланам. Эйе, күлде таҙартыуға күп аҡса һалдыҡ, әммә ул алдағы 50 йыл дауамында таҙа буласаҡ. Һыу инергә мөмкин булған таҙа күл булдырабыҙ. Халыҡ беҙҙән шуны талап итә лә инде. Бөгөн экологияға ихтыяж ҙур", - ти Радий Хәбиров. Шулай уҡ республика Башлығы "Ҡашҡаҙан" паркы ла халыҡтың ихтыяжын ҡәнәғәтләндерергә тейешлеген һыҙыҡ өҫтөнә ала. Бында көслө спорт блогы бар, киләсәктә балалар баҡсаһын яңыртыу, велосипедсылар һәм йәйәүлеләр өсөн айырым юлдар эшләү, уңайлы пляж, ял зонаһы булдырыу ҡарала, ҡыҫҡаһы, йылдың һәр миҙгелендә лә парк гөрләп торорға тейеш. Радий Хәбиров әйтеүенсә, паркта кәм тигәндә ике ресторан эшләргә, уларҙың береһе пирс зонаһында урынлашырға тейеш. Шунда уҡ оркестр майҙансығын булдырыу планлаштырыла. Ә күлдең уртаһында елкәнле карап торасаҡ. "Ҡашҡаҙан" паркы Рәсәйҙә һыу сығанағында урынлашҡан иң яҡшы парк булырға тейеш. Сөнки күл кеүек бындай үҙенсәлекле тәбиғәт объекты бер ҡалала ла юҡ тиерлек, - ти Радий Фәрит улы. - Әгәр беҙ алдыбыҙға шундай ҙур маҡсаттар ҡуймаһаҡ, тәүге унау иҫәбендә ҡаласаҡбыҙ, ә иң алдынғылар рәтендә булғы килә. Әйткәндәй, һуңғы өс йылда Бөтә Рәсәй бәләкәй ҡалаларҙа һәм тарихи биләмәләрҙә уңайлы ҡала мөхитен булдырыуҙың иң яҡшы проекттары конкурсында лидерлыҡты һаҡлайбыҙ. Конкурс буйынса алынған гранттар арҡаһында республиканың 16 муниципалитеты үҙенең үҙәк майҙанын тәртипкә килтерә. Әле яңы конкурсҡа документтар ебәрҙек һәм яңы енеүҙәр көтәбеҙ".

Радий Хәбиров Өфө ҡалаһы мэры Сергей Грековҡа яңыртылған парк быйыл октябрҙә асылырға тейеш, тигән бурыс ҡуйҙы.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# КҮРГӘҘМӘГӘ КИЛЕГЕҘ!

**"Боронғо Өфө" Республика тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығында "Боронғо дәүерҙәр эҙенән" тип аталған күргәҙмә эшләй.**

Унда археологик экспедицияларҙа табылған артефакттар ҡуйылған. Музей-ҡурсаулыҡ белгестәре йыл һайын республика буйлап археологик разведкаға сыға. Уның барышында улар яңы археологик һәйкәлдәр аса, ҡыҙыҡлы артефакттар таба. Шулай уҡ тәжрибәле археологтар йәштәр менән тәжрибәһен уртаҡлаша. Бындай эштәр йәш белгестәрҙе әҙерләү һәм улар археология эштәре алып барыуға рөхсәт алһын өсөн кәрәк. Күргәҙмәлә таш быуаттан алып Башҡортостандың Урал арьяғынан уның көнбайышына тиклем булған археологик мәҙәниәт менән танышырға мөмкин. Әйткәндәй, Башҡортостан артефакттар буйынса Волга буйы федераль округында беренсе урын биләй. "Өфө ҡаласығы - II" кеүек уникаль археологик һәйкәлдәр, артефакттар бар, әммә уларҙы һаҡлау һәм күрһәтеү өсөн махсуслашҡан урындар юҡ.

# КИТАП БҮЛӘК ИТЕГЕҘ...

**Күптән түгел Халыҡ-ара китап бүләк итеү көнөнә арнап уҙғарылған "Яратып, китап бүләк ит - 2021" Бөтә Рәсәй акцияһына Өфөләге 47-се балалар китапханаһы ла ҡушылды.**

Акция баҫмаларҙан да оло бүләк юҡлығын тағы бер ҡат йәш быуындың хәтеренә төшөрөү маҡсатында ойошторолғайны. Был сараны балалар китапханаһы оло түҙемһеҙлек менән көтөп алды һәм Шаҡша биҫтәһендә йәшәүселәр йыйған бүләк - китаптарҙы ҡыуанып ҡабул итте. Китапхананың ветеран хеҙмәткәре Римма Мәүләтбаева 28 китап, ә Наталья Офий донъяны танып-белергә ярҙам итеүсе энциклопедия тапшырған. Акция барышында барлығы 184 баҫма дана тупланған. "Пандемия тормошҡа етди үҙгәрештәр индереү сәбәпле беҙ ойоштorған байрамдар, төрлө викториналар, оҫталыҡ дәрестәре, осрашыуҙар һәм башҡа ҡыҙыҡлы саралар онлайн форматта "Бәйләнештә" селтәрендәге махсус биттә (vk.com/rodnik_16) үткәрелә. Китапхана ҡиммәтле бүләктәр өсөн барыһына ла ҙур рәхмәт белдерә. Был акция әле лә дауам итә, шуға баш ҡала халҡынан балалар өсөн яҙылған китаптар көтөп ҡалабыҙ", - ти китапхана мөдире Любовь Оснач.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Аллергия

❖ Бер тигеҙ нисбәттә алынған бәпембә һәм дегәнәк тамырҙарын ваҡлап ҡушырға, шуның 1 ҡалағына 1,5 стакан һыуыҡ һыу ҡойоп, төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк талғын утта 10 минут ҡайнатырға, һөҙөргә. Көн дауамында 3 тапҡыр һәм кискелеккә берҙе яртышар стакан эсергә, ашау ваҡытын күҙәтмәскә лә мөмкин. Был төнәтмәне аллергия сыҡҡан урындарға һөртөргә лә ярай.

## Юғары ҡан баҫымы

❖ Әрселмәгән лимон һәм ярты стакан мүк еләген ит турағыстан үткәрергә. Ярты стакан гөлйемеште ҡәһүә тартҡыс ярҙамында онтарға. Барыһын да бергә ҡушып, 1 стакан бал өҫтәп, болғарға. Ай һайын бер аҙна дауамында иртәнсәк һәм кискеһен 1-әр ҡалаҡ ашап дауаланырға.

❖ 1 балғалаҡ ваҡланған ялан туҡранбашы сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. Килеп сыҡҡан бер стакан төнәтмәне өскә бүлеп, көн дауамында эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ ваҡланған бесәй үләне (валериана) тамырына 1 стакан араҡы ҡойорға һәм 2-3 аҙна төнәтергә. Ҡан баҫымы күтәрелеүен дауалағанда төнәтмәне көнөнә 4 тапҡыр 10-ар тамсы эсергә.

## Бөйөр ауырыуы

❖ Бер тигеҙ нисбәттә меңъяпраҡ, арыҫлан ҡойроҡ, күгүлән (горец птичий), ялан ҡырҡбыуыны үләндәрен алырға. Йыйылманың 1 ҡалағын термосҡа һалып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк һөҙөргә. Килеп сыҡҡан төнәтмәне өскә бүлеп, ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә.

## Псориаз

❖ 25-әр грамм алоэ, сөйәл үләне, ҡылыс үлән (аир) тамыры һуттарын һәм шул уҡ миҡдарҙа аш һеркәһе, етен майын бергә ҡушып, өҫтөнә 300 грамм ҡайнар һыу ҡойорға. 2-3 сәғәт төнәтеп, һөҙөргә һәм сылатҡыстар яһарға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✔ *Бөгөнгө заман мәктәбендә хеҙмәт дәрестәренә етди иғтибар булмауына ғәжәп итәм. Был нимә, илгә белемле, әммә тәрбиәһеҙ, әҙәпһеҙ, әхлаҡһыҙ, илен, телен һөймәгән, ҡулы бер эш белмәгән кешеләр кәрәк тигәнде аңлатамы?*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



## БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Беҙҙең эраның I-II меңъйыллығы осоронда йөн туҡымалар етештереү бик киң таралған булған. XIX быуатта ул Кесе, Көньяҡ-Көнбайыш, Урта Азия ерҙәрен үҙ эсенә алған.

Урта Азияның бөтә урындарында ла йөн туҡымалар һуғыу таркалған. Күсмә һәм ярым күсмә тормош алып барған (борон) халыҡтар араһында ҡырғыҙҙар төрлө тулаһы баҫыуы менән айырылып торған. Шул уҡ ваҡытта йөн ептән туҡымалар етештереү оҫталығын Памирҙағы боронғо күсмәндәр ҙә белгән, тип билдәләй тикшеренеүселәр. Балсыҡ һауыттарҙа ҡалған туҡымалар эҙен махсус тикшереү һөҙөмтәһендә беҙҙең эраға тиклем II-I меңъйыллыҡтар тирәһендә Фирғәнә оҫталары туҡыусылыҡ эшен камил үҙләштереүе асыҡланған. Был оҫталыҡ быуындан быуынға тапшырыла килгән: Памир халҡы XIX - XX быуат башында ла тик йөндән һәм төрлө ҡатышмалары булған туҡымалар етештерә белгән: һарыҡ йөнөн кәзә мамығы менән ҡатыштырғандар.

Көньяҡ-Көнбайыш һәм Урта Азия халыҡтарының да туҡыу оҫталығы юғары кимәлдә булыуы иғтибарҙы йәлеп итмәй ҡалмай. Анатолия төрөктәренең туҡыма туҡыу оҫталығы тураһында телгә алғанда В.П. Курылев был территорияла йөн эшкәртеү ғәҙәттәре бик боронғо осорҙарҙа барлыҡҡа килгән, тип иҫәпләгән: әле беҙҙең эраға тиклем II-I меңъйыллыҡтар тирәһендә үк был ерҙәрҙә йәшәгән хеттар йөн туҡымалар етештергән. Кесе Азиялағы беҙҙең эраға тиклем I меңъйыллыҡ осорона ҡараған ҡәбер таштарында иләүес, орсоҡ, урынағастарының барельеф һүрәттәре табыла. Ошо дәүерҙә Боронғо Мысырҙа ла туҡыусылыҡ яҡшы үҫешкән. Кесе Азия һәм Мысырҙа туҡыусылыҡ традициялары Боронғо Грек донъяһындағына ҡарағанда өлгөргәнерәк булған. Сығанаҡтарҙа Мысырҙың арҡыры станоктары Грецияның аҫма станоктарынан нимәһе менән өҫтөн булыуы ла яҙып ҡалдырылған.

Кавказ халыҡтарының мәҙәниәте Яҡын Көнсығыш йоғонтоһонда үҫешкән. XIX быуатта Евразия ҡитғаһында Кавказ йөн туҡыма һуғыу буйынса танылған үҙәктәрҙең береһе була. Баҙарҙарҙа Дағстан, Чечен, Ҡабарҙы, Имеретияның туҡымалары һатылған. Осетин туҡымалары бөтә Кавказда дан тотҡан: таулы Осетияла йөн туҡыма һуҡҡанда мамыҡ ҡушҡандар. Төньяҡ Кавказдың малсылыҡ менән көн күргән төрки халыҡтары (ноғайҙар, балҡарҙар, ҡумыҡтар) йәшәгән ауылдарҙа етештерелгән туҡымалар айырылып торған, улар уны үҙҙәренең хужалыҡ кәрәк-ярағына ғына тотонған.

Ике ҙур төбәк - Урта Азия һәм Кавказ - хужалыҡта һарыҡсылыҡҡа өҫтөнлөк бирелгән ҙур туҡыусылыҡ ареалында игенселек һәм малсылыҡ традицияларының йәнәшлеген һәм бер-береһенә йоғонтоһоноң төрлө варианттарын сағылдыра. Боронғо Көнсығыш мәҙәниәттәрендә туҡыусылыҡ яҡшы үҫешкән булыуын фактарға нигеҙләнеп айһалған анализ дәлилләй. Был территориянан ситтәрәк йәшәгән көньяҡ һәм көнбайыш малсы төркиҙәр тарихының тәүге осоронда уҡ тәпәш ҡул станоғы ярҙамында туҡыма һуғыу үҙләштерелгән булған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

**Совет мәктәбендә уҡығандар яҡшы хәтерләйҙер: беҙҙә кеше маймылдан барлыҡҡа килгән, ул фәҡәт хеҙмәт аша кешегә әүерелгән, ике ҡул менән ҡорал тотоп эшләр өсөн аяғына баҫҡан, вертикаль йөрөгәс, яйлап ҡойроғо ҡыҫҡарып, аҙаҡтан бөтөнләй юҡҡа сыҡҡан, тип уҡыттылар. Хатта ошо эволюция барышы тураһындағы һүрәт һаман булһа күҙ алдында тора әле. Мәҡәләмде ошолайтып башлап ебәрһәм дә, мин кешенең балсыҡтанмы, ҡабырғананмы барлыҡҡа килеүе тураһында бәхәс ҡорғом килгәндән түгел, ә бөгөнгө балаларға ниндәй тәрбиә биреү хаҡында уйланыуҙарым менән бүлешкем килгәндән ҡулыма ҡәләм алдым.**

# ИЛҺӨЙӘРЛЕК КЕНӘ ТҮГЕЛ...

## хеҙмәт тәрбиәһе лә етмәй



Тәрбиәсе булмаһам да, йәш быуынды тәрбиәләү мәсьәләһе мине һәр ваҡыт борсоно. Сөнки һөнәрем буйынса, йәшерен-батырыны юҡ, төрлө йылдарҙа нәҡ ошо тәңгәлдәге "аҡ таптар" менән йыш осраштым. Эшләгән дәүерҙә бик күп үҫмерҙәр менән аралашырға, әңгәмәләшергә тура килә ине. Шуныһына иманым камил: хоҡуҡ боҙоусылар, енәйәт юлына баҫыусылар араһында күберәк имен булмаған ғаиләләрҙә үҫкән, тейешле тәрбиә, иғтибар күрмәгән, буш ваҡытында бер нәмә менән дә шөғөлләнмәгән балалар осрай ине.

Бөгөнгө заман мәктәбендә хеҙмәт дәрестәренә етди иғтибар булмауына, уҡытыу менән тәрбиә эшен айырып ҡарауҙарына ғәжәп итәм. Был нимә, илгә белемле, әммә тәрбиәһеҙ, әҙәпһеҙ, әхлаҡһыҙ, илен, телен һөймәгән, ҡулы бер эш белмәгән кешеләр кәрәк тигәнде аңлатамы?

Минеңсә, бөгөн бигерәк тә йәш быуынға хеҙмәт һәм илһөйәрлек тәрбиәһе биреү беренсе урында торорға тейеш. Хеҙмәттә сынығыу алған кеше генә ныҡлы рухлы, көслө ихтыярлы булыуын Бөйөк Ватан һуғышы һәм унан һуңғы ҡатмарлы йылдар күрһәтте бит инде. Улар бер ниндәй ауырлыҡ алдында ла бөгөлөп ҡалманы. Ярай, бик яҡшы билдәләргә уҡып та сығыр бала, үҙе теләгән абруйлы уҡыу йортона инеп, белем дә алыр, ти. Әгәр ҙә ул үҙенең тыуған ерен, илен яратмаһа, күберәк эш хаҡы түләгән, еңел йәшәү шарттары вәғәҙә иткән сит илгә сығып китмәҫ тип кем әйтер? Күпме "аҡыл" ситтә бөгөн? Әгәр ҙә уларға белем биреү менән бергә, Тыуған илгә, Ватанға һөйөү тәрбиәләһәк, үҙебеҙҙең геройҙарыбыҙ менән ғорурланырға өйрәтһәк, телебеҙгә, тарихыбыҙға һаҡсыл һәм ихтирамлы мөнәсәбәт тәрбиәләһәк, уларҙың күбеһе республикабыҙҙың, илебеҙҙең социаль-иҡтисади ҡеүәтен арттырып, үҙебеҙҙә эшләр ине...

Бөгөнгө сығарылыш уҡыусыларының ҡулына сүкеш тә тота белмәй үҙ аллы тормош юлына сығыуы ҡыҙғаныс. Баланы, тәү сиратта, ындай эшкә ғаиләлә өйрәтергә тейештәр, тип әйтеүселәр булыр. Эйе, дөрөҫ, ата-әсә тәрбиәһен бер нәмә менән дә алмаштырып булмай. Әммә күп атайҙар айлап, яртышар йыллап, хатта йыл буйы балаларын кеше итәм, түләүле булһа ла юғары уҡыу йортона индерәм, тиген изге ниәт менән сит тарафтарҙа бил бөгә. Уларҙың да төп маҡсаты - улын, ҡыҙын белемле итеү, яҡшы эшкә урынлаштырыу. Шулай итеп, ғаиләлә лә тәрбиә мәсьәләһе артҡы планға күсте. Ә бит тормошта, һин ҡайҙа йәшәһәң дә - ауылдамы, ҡаламы, кем булып эшләһәң дә - етәксеме, ғалиммы, уҡытыусымы, төрлө ваҡыт була, ҡулына балта ла, сүкеш тә, бысҡы ла алырға тура килә. Тик ир-егет, бигерәк тә йәштәр араһында ошо сөй ҡағыу, кран йүнәтеү, гардин элеү кеүек ябай ғына көндәлек мәшәҡәттәр ҙә ҙур проблемаға әйләнгән осраҡтар бар. Юҡҡа ғына йәмғиәттә "Муж на час" тигән хеҙмәт барлыҡҡа килмәне. Уның менән башлыса тап үрҙә әйтеп киткән ирҙәре ситтә эшләгән ҡатын-ҡыҙҙар һәм ҡулында эш ҡоралы тота белмәгән ғаилә башлыҡтары ғына ҡулланалыр, тип әйтһәм, бер ҙә яңылыш булмаҫ. Ә һыуы ағып торған кранды бороп ҡуя, гардин, йоҙаҡ ҡуя белгәндәр был йомоштарҙы барыбер үҙе белгәнсә үҙе башҡарасаҡ.

Хеҙмәт тәрбиәһе етмәүе үҫеп килгән быуынды формалаштырыуҙа иң төп йүнәлештәрҙең береһе икәнен иҫбатлаған бик күп миҫал килтерергә мөмкин. Беҙҙең быуын эшләп үҫте. Класта иҙән йыуыу, таҡта һөртөү кеүек бурыстарҙы эшкә лә һанамай торғайныҡ. Хәҙер иһә быларҙың барыһы ла "балалар көсөн ҡулланыу" тип һанала икән дә. Экологик өмәләр, күмәкләп класты йыуыу, йыйыштырыу һымаҡ эштәр үҫмерҙәрҙә коллективлыҡ, ярҙамсыллыҡ, яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләгәнен береһе лә инҡар итмәйҙер. Мин үҙем 5-се класты тамамлаған йылды каникулда беренсе тапҡыр колхоз бесәнен йыйырға сыҡтым. Өс йыл рәттән йәй көнө эшләнем. Был йылдарҙы һағынып иҫкә алам, байтаҡ тормош һабағы алдыҡ беҙ тиҫтерҙәрем менән ошо колхозға бесән әҙерләшкән ваҡытта. Эштән бер кем дә үлмәй, киреһенсә, сыныға ғына.

Бөгөн балалар баҡсаһынан, мәктәптән алып, йәш быуынды тәрбиәләүгә ҡағылышы булған бөтә ойошмалар, белем биреү менән бергә, балаларҙы тормошҡа әҙерләргә тейеш. Йәшерен-батырыны юҡ, яңыса программалар, технологиялар артынан ҡыуып, өҫтәүенә, Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләнеп тиеп, белем биреү учреждениеларында тәрбиә мәсьәләһе һуңғы осорҙа йылдан-йыл ситкә күсерелә барҙы. Мәғлүм булыуынса, уҡыусылар урта кластарҙан уҡ техник юғары уҡыу йорттарына инергә әҙерләнә башлай. Хеҙмәт һәм илһөйәрлек тәрбиәһе биргән дәрестәр һанын арттырыуҙы заман үҙе талап итә. Үҫмерҙәргә ниндәй ҡылығы һәм эше өсөн яуап бирергә кәрәклеге тураһында башланғыс кластарҙа уҡ аңлатыу эшен башларға кәрәклеге лә көнүҙәк мәсьәлә. Юғиһә, беҙҙә был йәһәттән тәүге тәжрибәне бала берәй хоҡуҡ боҙғас йәки енәйәт ҡорбаны булғас ҡына ала.

Юғары трибуналарҙан, киләсәк - йәштәр ҡулында, тип әйтергә яратабыҙ. Ә киләсәгебеҙ илен һөйгән, тарихы менән ғорурланған кешеләр булғанда ғына ышаныслы. Шуға күрә уларҙы бөгөндән тәрбиәләргә, әҙәп, әхлаҡ, хеҙмәт тәрбиәһен бирергә кәрәк. Уҡып бөткәс, еңел тормош, оҙон аҡса эҙләп ситкә китмәһен өсөн...

**Мират РЫҪҠОЛОВ.**
**Мәләүез районы.**

✓ Соҡорой ошондай мәғлүмәт теркәп ҡалдырған: "Беҙҙең төп бабабыҙ Иҫән үҙ заманында үтә бай кеше булып, тирә-яҡта киң танылыу тапҡан. Буласаҡ Бөрө өйәҙе ерҙәрендә ул барса башҡортто яҡындан белә".



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ ИРӘКТЕ - ЯУГИР БАШҠОРТ ЙӨРӘКЛЕ



Алтын Урҙа дәүләтенең бер өлөшө булған Ҡаҙан ханлығы хандары, башҡа монгол ханлыҡтарында ҡабул ителгән традицияларҙы дауам итеп, ошо территорияла һәм яҡын-тирәлә йәшәүсе яугир халыҡ вәкилдәрен хәрби хеҙмәткә яллап, үҙ ғәскәре составына ала торған була. Хеҙмәтттәре өсөн быларына айырым привилегиялар ҡаралған була: тарханлыҡ дәрәжәләре бирелә, билдәле бер территорияла уларға ғына тәғәйенләнгән ер биләмәләре бүлеп бирелә (русса - ленные владения). Тап шул замандарҙа, атап әйткәндә, XVI быуаттың тәүге сирегендә, Ыҡ йылғаһы үҙәне буйҙарында көнсығыш (Себер даруғаһы) һәм көньяҡ (Нуғай даруғаһы) башҡорт олоҫтарының дубликаттары барлыҡҡа килә. Был кесе олоҫтар, күрәһең, XVIII быуатҡа тиклем һаҡланып ҡалған: 1730 йылда Өфө канцелярияһы чиновниктары тарафынан төҙөлгән бер документта Ыҡ буйындағы Бөрйән, Табын, Түңгәүер, Әй, Тамъян, Ҡыпсаҡ, Һеңрән, ә Уса даруғаһынан Ирәкте һәм Ғәйнә олоҫтары теркәлгән.

Башҡорт тархандары араһында Ирәкте ырыуы вәкилдәре лә була. Мәҫәлән, 1523 йылда Ҡаҙан ханы Сәхиб-Гәрәй тарафынан Шәйех-Әхмәткә (был кешенең Ирәкте шәжәрәһендәге Әхмәтшәйех баба булыуы ихтимал) һәм уның иптәштәренә тарханлыҡ бирелеү хаҡындағы ярлыҡта ошондай мәғлүмәт теркәлгән: "...Шейх Ахмед сын Мухаммеда, и сын Шейх Ахмеда Абдал, и еще Сейид Ахмед, и его младший брат Муса сын Махмутека, сын Сейида Якуб, и его младший брат Буланс, и еще младший брат его Нур Сейид, эти семеро явились к нам и били челом; они, оказывается, являются людьми, которые стали тарханами от наших прежних господ ханов; и мы также пожаловали, этих упомянутых лиц и, дабы доволен был всевышний бог и еще ради заступничества Мухаммеда - посланника Аллаха, произвели тарханами".

Күрәһең, ирәкте этнонимының килеп сығышы башҡорт яугирҙарының Ҡаҙан ханлығына хәрби хеҙмәткә ялланыуы менән бәйле була. Ошо заманға ҡараған ҡайһы бер сығанаҡтарҙа "ирәк" тигән боронғо төрки һүҙе осрай. Ул "кәлгә", "нығытма", "кремль" мәғәнәләрендә ҡулланылған. Тимәк, ирәкте һүҙенең тамыры "ирәк" булһа, уға башҡорт теленең көнсығыш диалекты һөйләштәренә ярашлы -те эйәлек суффиксы ҡушылған. Яңы һүҙҙең мәғәнәһе - кәлгә хеҙмәтен үтәүсе. Ирәкте атамаһын алыусыларҙың күпселеге ҡара-табындар булһа ла, ошондай хәрби хеҙмәткә төрлө сығышлы башҡорт яугирҙары килеп урынлаша. Ирәктеләрҙең ата-бабалары, йәғни ҡара-табындар, Ҡаҙан ханы Сәхиб-Гәрәй Ыҡ йылғаһы буйында биргән ерҙәргә күсеп килгәнгә ҡәҙәр, Мөхәммәт-Ғәли Соҡоройҙоң "Тәзкирәт ли-ль-ихван ва-ль-ахбаб" ("Туғандарыбыҙҙың һәм яҡындарыбыҙҙың тарихын хикәйәләү") исемле әҫәрендә яҙылғанса, тәүҙә Барда һәм Галич йылғалары буйында көн иткән. Йәнә, бына тағы ла бер ҡыҙыҡлы мәғлүмәт: тарихи Ҡасимов ханлығында (ул Ока йылғаһы үҙәнен биләй) Ирәкте һәм Ҡаршын бейлектәре (русса - беляктары) булған. Күрәһең, хәрби хеҙмәт менән көн итеү юлын һайлаған ирәкте һәм ҡаршын тархандары (бей-кенәздәре) Мәскәү һәм Ҡасимов ханлыҡтарына тиклем үк барып сығып, күрһәткән хеҙмәттәре өсөн улар иҫәбенә бирелгән ерҙәр менән тәьмин ителгән.

Иҫән-баба (сығанаҡтарҙа: Асан бей) заманында ирәктеләр Ыҡ буйҙарын ҡалдырып, Танып үҙәнендәге ерҙәргә күсеп китә. Р.Ғ. Кузеев яҙып алған риүәйәттәргә ярашлы, Иҫән-баба һунар итергә яратҡан була. Бер мәл ул үҙенең улдары менән Танып буйҙарына килеп сыға, сөнки был яҡтар төрлө кейеккә бай була. Ул бында Таҙлар ырыуы аҡһаҡалы Таҙ-баба менән осрашып, дуҫлашып китә. Шунан инде Таҙ-баба Иҫән-бабаны үҙ ҡәүеме биләгән ерҙәргә бергәләшеп көн итергә саҡыра. Ә икенсе шәжәрәлә һәм Ғәли Соҡоройҙоң "Тәзкирәт"ендә ирәкте халҡының Ыҡ буйҙарын ташлап китеүе сәбәбен башҡасараҡ аңлата. Иҫән бей Ҡаҙан ханы илсеһе Суртмаҡ менән конфликтҡа инә, сөнки быныһы ирәктеләрҙе ханға ярҙамға килмәүҙә ғәйепләй: "Әммә беҙҙең бабабыҙ Иҫәндең, күрәһең, Ҡаҙан ханына ярҙам итергә аҡсаһы һәм дә, күрәһең, Ҡаҙанға ебәрерлек ғәскәре булмаған. Шунан улар урыҫ ғәскәренең Ҡаҙанды ҡамауы һәм уны алыуы хаҡында ишетте. Шул саҡта был килмешәк Суртмаҡ, урыҫтарҙан ҡурҡып, Иҫән ғәскәрен ебәрмәне, тип уйлап, Иҫән менән ыҙғыша һәм әрләшә башланы, уны ҡурҡытырға теләне: "Бына, Ҡаҙандан ғәскәр менән килербеҙ һәм бында барығыҙҙы ла ҡырып бөтөрөрбөҙ!" - һәм, асыуы ҡабарып, Иҫәндән икенсе ергә киткән, тип әйтәләр... Был батша Иван Васильевич заманында булған имеш, ҡыш көнө. Иҫән хан ҡама бүрекен кейгән, аяҡтарына ҡама тиреһе менән ҡапланған саңғыларын бәйләп алған, һәм яңғыҙы сығып киткән. Мәскәүгә килгәс, ул был тарафтар хандарының баш эйеүҙәрен еткергән, үҙенең буйһоноуы билдәһе итеп үҙ имзаһын ҡуйған һәм йортона кире ҡайтҡан". Әлбиттә, бында хәл иткес тарихи ваҡиға фольклор сығанаҡтарына хас булғанса тасуирлана. Шулай ҙа XVI быуат урталарында яҡын күршеләре - ғәйнә һәм уран тархандарының аҡ батшаға баш һалыуы хаҡында ирәкте юлбашсылары хәбәрҙар булып, үҙҙәре лә ошо юлды һайлай. Тик уларҙың иң яҡын ҡәрҙәштәре - табын башҡорттары, шулай уҡ терһәк, әйле, һеңрән, ҡошсо, һарт ырыуҙары аҡһаҡалдары Шибанидтар нәҫеленән булған Себер хандарына - Мортаза ханға, һуңынан уның улы Күсем ханға тоғро ҡалып, Рус дәүләте составына XVII быуат баштарында ғына ҡушыла.

Нуғай хандары ҡыҫымы аҫтында ҡалған төньяҡ-көнбайыш башҡорттары яу ҡайтарыу яғынан маһир булған ирәктеләр менән бер төптән сығыш яһауҙы хуп күрә. Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой "Тәзкирәт" әҫәрендә ошондай мәғлүмәт теркәп ҡалдырған: "Беҙҙең төп бабабыҙ Иҫән үҙ заманында үтә бай кеше булып, тирә-яҡта киң танылыу тапҡан. Буласаҡ Бөрө өйәҙе ерҙәрендә ул барса башҡортто яҡындан белә, ирәкте халҡының башлығы була. Әгәр ҙә ки ҡайпан, һәм дә гәрәй, һәм дә таҙлар, һәм дә байҡы, һәм балыҡсы башҡорттары, әгәр ҙә ки ошо башҡорттар өҫтөндә үҙ түрәләре булған хәлдә лә, ошо түбәләр башлыҡтарының барыһы ла уны үҙ башлығы итеп таный һәм үҙҙәре өҫтөндә торған хан тип белә". Ғалим Р.Ғ. Кузеев хәрби яҡтан башҡаларҙан күпкә өҫтөн булған ирәктеләрҙең Танып үҙәненә килеп, әүәлерәк ошонда йәшәгән таҙлар ырыуы биләмәләренә хужа булып китеүен ысынбарлыҡҡа тап килә, тип иҫәпләй. Риүәйәттәрҙәге Таҙбабаның ирәктеләргә үҙ ерҙәрен бүлеп биреүе хаҡындағы мәғлүмәтте ике башҡорт ырыуы араһында хасил булған, һуңғараҡ осорға ҡараған дипломатик мөнәсәбәт рәүешендә ҡабул итергә кәрәктер.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Ватан өсөн йән ҡыҙғанмай һинең улдарың, Урал

1942 йылдың йәй айҙарында Сталинград һуғышы исеме аҫтында донъя тарихына инәсәк иҫ китмәле ҡыйралыш башлана. Немец армияһы, Сталинград ҡалаһын яулап алып, Волгаға сығырға, шул рәүешле ил үҙәге менән Кавказ араһындағы бәйләнеште өҙөргә ынтыла. Ҡыҙыл Армия бик аянысды хәлдә ҡала. Дошмандың тере көстәре һәм ҡоралдары буйынса күпкә өҫтөн частары ҡыҫымында Көньяҡ-Көнбайыш һәм Көньяҡ фронттары ғәскәрҙәре сигенергә мәжбүр була. 2 сентябрҙә һуғыш хәрәкәттәре Сталинград янына килеп етә, ә 13 сентябрҙә немецтар ҡаланы тулыһынса яулап алыу маҡсатында штурм башлай, улар тимер юл вокзалын баҫып ала, стратегик пункт булған Мамай курганын да биләй. Ҡан ҡойошло алыштар ҡала урамдарына күсә. Әммә совет һалдаттарының йән аямай ҡаршы тора алыуы арҡаһында ғына фашистар ҡаланы тулыһынса ҡулға төшөрә алмай. Ике ай буйына барған ҡырылышта дошман да быҡаса күрелмәгән юғалтыуҙарға дусар ителә: урам һуғыштарында 700 меңдән ашыу фашист һалдаттары юҡ ителә йәиһә яралана, ул 1 меңдән ашыу танкыларын, 1400 самолетын юғалта. Немецтар 1942 йылдың ноябре урталарында оборонаға күсергә мәжбүр була.

Ҡыҙыл Армияның Юғары Баш Командованиеһы Ставкаһы июль айында уҡ Сталинград фронтын булдырып, артабан контрһөжүм башлау маҡсатында ошо тарафта үҙ резервтарын туплай башлай. 1942 йылдың 22 октябрендә Сталинград фронты яңынан Көньяҡ-Көнбайыш фронты тип атала башлай. Уның составына 8-се атлы корпус та индерелә, шуның өсөн 112-се Башҡорт атлы дивизияһы ла корпус частары менән Брянск фронтындағы позицияларын башҡа уҡсы дивизияларға ҡалдырып китә. 1942 йылдың 9 октябрендә дивизия подразделениеларына Верхний Ломовец тигән тораҡ пункт янында тупланырға приказ бирелә. Тап ошо урындан дивизия атлы марш менән Воронеж өлкәһенән Сталинград өлкәһенә тиклем 550 саҡрымлыҡ юл үтә.

Һуғыш ваҡытындағы атлы маршты хәрби частың бер урындан икенсе ергә ҡәҙимге рәүештә күсеп барыуы, тип кенә ҡарап булмай. Фронт йыраҡ булмағас, немец самолёттары көндөҙҙәрен разведка осоштарын туҡтатмай. Тик төндәрен генә маршта булып, таң атыуға барса ғәскәрҙе маскировкалау талап ителә. Сәғит Әлибаев, Сабир Ҡадиров үҙҙәренең мемуар яҙмаларында карталар, схемалар етешмәүе арҡаһында төнөн ориентирланыу, дөрөҫ юлдар табыуҙың үтә ҡыйын булыуы хаҡында ла иҫләй. Атлы полктар артынан обоздар: хәрби припастар, аҙыҡ-түлек тейәлгән машиналар, ат егеүле арбалар, махсус тыл подразделениелары, корпус госпитале, ветеринария лазареты һис бер артта ҡалмайынса барырға тейеш була. Маршҡа сығыр алдынан полк командирҙары Таһир Кусимовҡа һәм Ғариф Макаевҡа, артиллерия начальнигы Мөнир Вәливҡа подполковник званиелары бирелһә, частарҙа хәрби комиссар вазифаһы бөтөрөлөүе айҡанлы батальон комиссары Сәғит Әлибаев майор, ә өлкән батальон комиссары Мөбәрәк Назиров подполковник званиеларына лайыҡ була.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Йырға тип махсус шиғыр яҙа күптәр. Беренсе куплет менән өсөнсөһө араһында бәйләнеш юҡ. Сюжеты юҡ. Шиғырҙың йәне лә, рухы ла юҡ. Бындай йырҙарҙа алыш-биреш, аҡса мәғәнәһе генә ята, ә ижад тураһында һүҙ ҙә юҡ.*



# ШИҒЫРЫН ДА, КӨЙӨН ДӘ

## йәки Башҡорт эстрадаһы

**Бөгөн башҡорт эстрадаһы еңел булмаған осор кисерә. Шоу-бизнесҡа ҡоролған йыр сәнғәте мәҙәниәт сиктәренән алыҫлашып, бары бизнес ыҙанында ғына ҡалмаҡсы. Әммә мәҙәниәт, милли мәҙәниәт шоу-бизнесҡа тиклем дә йәшәгән һәм йәшәргә тейеш ҡиммәттәр. Һәм уны йәшәтеүҙең ниндәй юлдары, алымдары, мөмкинлектәре бар? Ошо хаҡта һөйләшеү өсөн Башҡортостандың халыҡ артисы, музыкант, концертмейстер Ғәли АЛТЫНБАЕВ, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының художество етәксеһе Сулпан АҪҠАРОВА һәм реклама бүлеге етәксеһе Ирина ЗАХАРОВАны саҡырып, әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**Хөрмәтле сәнғәт әһелдәре, бөгөнгө башҡорт эстрадаһына байҡау яһап китәйек әле. Нисек уның бөгөнгө хәле?**

**Ғәли Алтынбаев:** Мин үҙемде белә-белгәндән алып башҡорт моңо эсендә йәшәйем. Дүрт-биш йәштә үк гармун менән ҡуша алып йөрөйҙәр һәм уйнаталар ине. Ошо алтмыш йылдан ашыу ваҡыт эсендә күпме көйҙәр башҡарғанмындыр, күпме моң ишеткәнмендер - әйтә лә алмайым. Совет осоронда Башҡорт дәүләт филармонияһы Советтар Союзының иң көслө коллективтарының береһе булды. Ә ниндәй йолалар йәшәй ине унда!

Әле күптән түгел генә Башҡортостан юлдаш телевидениеһында опера йырсыһы Сәлих Хөснийәров тураһында тапшырыу күрһәттеләр. Аҡ-ҡара төҫтәге лентала, архив материалы. Ә ниндәй замансалыҡ ул кадрҙарҙа! Сөнки был иҫкермәй, ҡартаймай торған классик ҡомартҡылар. Ул тауыш, ул башҡарыу һәләте, ул артислыҡ, ул хистәр... Бына филармония, дәүләт филармонияһы кимәле ошолай була. Профессионаллек кимәле ошолай була. Шулай итеп, яҡшы көй (йыр) бар, яҡшы булмаған ("насар" һүҙен музыкаға ҡарата ҡулланмайыҡ) көй (йыр) бар. Яҡшы башҡарыусы бар, бар яҡшы булмаған башҡарыусы. Мин музыка һәм йыр өлкәһен шулай ғына бүләм. Ашыҡ-бошоҡ сыймаҡланған йырҙарға сәхнәлә урын булырға тейеш түгел, тип иҫәпләйем. Бына һеҙҙән һорайым әле: берәй билдәле йәш композиторҙың исемен ҡапыл ғына хәтерләй алаһығыҙмы? Берәй ысын шағирҙың шиғырҙарына көй яҙған һәм йырҙары хит була алған һәләтле кешене беләһегеҙме? Йырға тип махсус шиғыр яҙа күптәр. Беренсе куплет менән өсөнсөһө араһында бәйләнеш юҡ. Сюжеты юҡ шиғырҙың, композиция ҡоролошо юҡ әҫәрҙә. Хис бар, һүҙҙәр, рифма һәм ритм бар, йәғни был шиғырҙа материалдар (һүҙҙәр) техник яҡтан ғына ҡоролған. Шиғырҙың йәне лә, рухы ла юҡ. Бындай йырҙарҙа алыш-биреш, аҡса мәғәнәһе генә ята, ә ижад тураһында һүҙ ҙә юҡ.

**Ирина Захарова:** Тамашасы булараҡ әйтәйем әле. Иртәнсәк интернетты асып ебәрһәм, Айгиз Ханов Рим Хәсәновтың "Ҡышҡы романс"ын башҡара. Рәхәтләнеп тыңланым. Ул йырҙы нисә йылдар ишетһәм дә, ятлап бөткән булһам да, күңелдә бер генә лә кире тойғо уянманы, киреһенсә, тағын мондарҙан көйөфөм күтәрелеп китте. Нимәгә һөйләйем быны? Бына ошондай профессионалдар тарафынан тыуҙырылып, һәләтлеләр тарафынан башҡарылған йырҙар ғына ыңғай хистәр булдыра. Р.Хәсәнов, Х.Әхмәтов, С.Низаметдинов, З.Исмәғилев кеүек композиторҙарҙың йырҙарында нисәмә быуын үҫкәнбеҙ һәм һаман да шуларҙы алмаштырыр, исмаһам, шуларға етерлек ижад итә алғандарҙы таба алмайбыҙ.

Бөгөн Башҡорт дәүләт филармонияһында эшләгән йырсылар - улар башҡорт эстрада классикаһын һаҡлаусы йәштәр. Улар ғүмерҙәрен тап ошо изге миссияға бағышлағандар. Аҡса эшләүгә, дан ҡаҙаныуға һәм башҡа ялтырауыҡтарға арбалмайынса, халыҡтың йыр-моңон ололарҙан өйрәнеп алып, киләһе быуындарға тапшырып ҡалдыра торған команда улар. Филармония бит модалар яһаусы, яңылыҡтар индереүсе түгел, ә халыҡ ижадын, классик әҫәрҙәребеҙҙе һаҡлап йәшәтеүсе ойошма. Сәнғәттең архивы, уставы, ҡомартҡылар һандығы булырға тейеш филармониялар. Шуның өсөн дә был ойошмалар дәүләт тарафынан ҡаралырға, яҡланырға тейеш. Профессионал кимәлдәге бындай эстрада башҡа бер ерҙә лә юҡ. Республикабыҙҙа заманында уны һаҡлап ҡала алғандар, башҡорт мәҙәни ижадын, боронғо мираҫты, йыр-моң ҡуҫағилешлеген үҙгәртмәй, боҙмай, башҡаларҙыҡы менән бутамайынса, ошо көндәргәсә йәшәтә алғандар. Был бит тиккә генә түгел.

Филармонияның бәҫе төшөп китте, тиҙәр. Ә кем төшөрә ул бәҫте? Филармонияла эшләүҙең ҡатмарлы хеҙмәт икәнен күптәр белмәйҙәр ҙә әле. Алһыҙ-ялһыҙ гастролдәр, иң төпкөл ауылдарҙы хеҙмәтләндереү, сит өлкәләрҙәге милләттәштәребеҙҙе лә йыр-моңға һыуһатмау. Барып аҡса йыйыу өсөн концерт биреү түгел, ә башҡорт моңон, халыҡ ижадын, милли эстраданы оноттормау, халыҡты үҙ асылына яҡынайтыу өсөн тырышыу ул филармонияларҙың маҡсаты. Концерттарға ла теләгәндә сыҡтың, теләмәгәндә юҡ түгел, хөкүмәт учреждениеһы булараҡ, план, аныҡ мәсьәләләр һәм үтәләһе эштәр бар. Төрлө даталарға, байрамдарға, хәл-ваҡиғаларға ҡағылышлы яңы программалар сығарыу, репетициялар, репертуарҙы үҫтереү һәм башҡалар ҙа ваҡытты, көстө ала. Шул уҡ ваҡытта бөгөнгө көн талабына ла яраҡлашырға кәрәк. Тамашасы еңелелпегә, уйын-көлкөгә, йәғни шоу концерттарға өйрәнеп китте. Әммә бындай концерттарҙың үҙҙәренә лә, киләсәк быуындарына ла дөрөҫ, профессиональ, ысын сәхнә мәҙәниәтен бирә алмаҫын онотто.

Филармония сәхнәһендә йырсылар ғына түгел, нәфис һүҙ оҫталары ла, хореографтар ҙа, йәғни төрлө йүнәлеш оҫталары ла бар. Әйткәндәй, бөгөн яңғыҙ бейеү башҡарыусылар юҡ иҫәбендә. Үҙешмәкәрҙәр араһында килеп сыға ул ундай бейеүселәр, тик белемдәре булмау сәбәпле, эшкә алып булмай, ә уҡырға теләмәйҙәр. Нәфис һүҙ оҫталары ла бармаҡ менән генә һанарлыҡ бөгөн. Бөтөн алып барыусылар тамадаға әүерелеп бөттө. Юмор жанры юҡҡа сыҡты, тип әйтергә лә була. Сикләнгән һәм әҙәпһеҙ темаларҙағы стендаптарҙы мәҙәниәттең бер өлөшө тип әйтһәң, бөтөнләй мәғәнәһеҙлек булыр. Ундайҙы беҙҙең халыҡ аңлап та етмәй, ҡабул да итмәй, тип уйлайым.

**Сулпан Аҫҡарова:** Үкенескә ҡаршы, хәҙерге заман эстрадаһындағы йәш йырсыларҙың күбеһе үҙ репертуарына халыҡ йырҙарын алмай. Ә бит элегерәк йырсы халыҡ йырҙарын һәм классик әҫәрҙәрҙе башҡарһа ғына үҙ һөнәренең оҫтаһы итеп һанала ине. Репертуарҙа был темә юҡ икән, тимәк, һин әле профессионалдар кимәленә үҫеп етмәгәнһең. Бөгөн иһә шоу эстрадаһында ундай универсалдарҙы бик һирәк осратаһың. Бөгөн, бәлки, үткән менән хәҙергене сағыштырыу ҙа кәрәкмәйҙер, сөнки элекке сәхнәлә бары тик профессионалдар ғына булған һәм улар үҙ кимәлдәрендәге мәҙәниәтте тотоп торған да инде. Үҙешмәкәрҙәр тап ана шул кимәлгә етеү өсөн уҡыған, өйрәнгән, күпте белергә ынтылған. Бөгөн бының киреһе... Оло сәхнә шоу-концерттар менән күтәрелгәндәр өсөн генә тәғәйенләнгән һымаҡ. Ауыҙыңды асырға өйрәнгәнһең икән, дөрөҫмө, дөрөҫ түгелме, йырсы була алаһың, тигән ялған һеңдерелә. Бына шулай хаталар ебәреү ҙә, ялғанлау модаға әүерелде. Продюсер табып алаһың да, заман технологиялары менән тауышыңды үҙгәртеп, ике-өс нотанан торған йырҙар менән концерттар бирәһең. Йыр ундай башҡарыусыларҙа сәнғәт өлгөһө түгел, ә һатып алынған тауар ғына. Интервьюларын тыңлағанда ла хатта күберәк шәхси тормоштары, машиналары, йорт-ҡаралтылары тураһында һөйләйҙәр. Ә йырҙы кем яҙҙы? Үҙем яҙҙым. Шиғырын да, көйөн дә үҙем яҙҙым да, үҙем башҡарам. Бына шундай "профессионалдар" күбәйгәндән-күбәйә бара бөгөн.

Беҙҙең филармония эстрадаһы Рәсәйҙәге, бәлки, донъялағылыр әле, берҙән-бер милли эстрада. Нимә әйтергә теләйем? Профессиональ милли эстраданы ошоғаса һаҡлап ҡала алғанбыҙ икән, тимәк, уға хөкүмәт тарафынан тейешле иғтибар ҙа булырға тейеш. Уның бөгөнгө эстрада сығышы оҡшамай икән, тимәк, был мәсьәләне ҡулға алып хәл итергә кәрәк. Әммә бында маҡсат үҙгәрешһеҙ ҡалырға тейеш: филармония эстрадаһы эстрада нигеҙе, уның мейеһе, эталоны булһын. Бында мәҙәниәт һәм сәнғәт йәшәй. Ә йәш проекттар, шоу-программалар икенсе урында торһон. Үкенескә ҡаршы, беҙҙә бөтөнләй икенсе йүнәлештәрҙе күтәреп сығалар, киләсәк быуындарға бирә алмаҫтайҙы, мираҫ итеп тапшырып булмаҫтайҙы... Былай барһа, берәй егерме йылдан һуң йәштәребеҙ "Нимәгә ул халыҡ йырҙары, ҡурай кемгә кәрәк, композиторҙар, шағирҙар нимәгә ул, нимәгә беҙгә музыкаль белем!" тиәсәктәр. Унан инде сәнғәт-музыка мәктәптәренең дә, филармонияларҙың да, институттарҙың да кәрәге ҡалмаҫ. Шул саҡ башыбыҙға йәбешербеҙ ҙә, һуң булыр. Профессионализм менән энтузиазмды бутау бәләһе булаҫаҡ был.

**Ысын сәнғәт һәм шоу-бизнесты нисек айыра ала тамашасы?**

**Ғәли Алтынбаев:** Шоу-бизнес тураһында һүҙ алып барғанда уның эсендә мәҙәниәтте, ысын сәнғәтте эҙләү урынһыҙ. Классик эстрада һәм шоу йырҙары икеһе ике урында йәшәй. Бына беҙ, профессионалдар, нисек эшләйбеҙ? Аккомпаниаторҙарымдың бер нисәүһен генә һанап китәм: Радик Гәрәев, Флүрә Килдейәрова, Вәхит Хыҙыров, Иҙрис Ғәзиев, Нәзифә Ҡадырова. Мин был кешеләрҙең йырҙарҙы нисек итеп донъяға ялтҡандарын беләм. Композитор ижад иткән көйҙә улар үҙ моңдарына, тауыштарына ултыртыу өсөн дә айҙар буйына эшләй. Йырҙың һәр һүҙен, һәр нотаһын үҙҙәренә һеңдереп, уның менән бер бөтөн булғас ҡына тамашасыға сығаралар. Ә бөгөн ҡайһы берәүҙәр элекке йырҙарҙы алып, ноталарын алмаштырып, араларына шау-шыу ҡушып, үҙ ҡалыптарына һалып алалар ҙа - әйҙә инде! Ошо тәңгәлдә классик йырҙарҙың хоҡуғын һаҡлай торған бер генә хеҙмәт тә булмауы үкенесле. Ниндәй намыҫ менән классик йырҙарҙы әхәлләй ала улар? Кем уларға ундай хоҡуҡ биргән?

Совет киноларына ни өсөн урайбыҙ ҙа әйләнеп ҡайтабыҙ. Сөнки улар кино сәнғәтенең алтын өлгөләре. Беҙ уларҙы атамалары менән беләбеҙ һәм уларҙан алынған цитаталарҙы ҡабатларға яратабыҙ, шулай бит? Ә замана сериалдарын иҫләйбеҙме? Юҡ, сөнки улар сәнғәт өлгөләре түгел, улар әҫәрҙәргә ҡоролмаған, улар артында роман авторҙары, профессиональ режиссерҙар, һәләтле артистар тормай. Йырҙа ла шулай уҡ. Исеме лә билдәле булмаған уртаҡул шағир тарафынан йәки илһам килгәндә кемдер сыймаҡлағандан яһалған шиғырға шундай уҡ һәләтһеҙ композитор ишараты көй яҙа ла, уны тауышһыҙ йырсы башҡара. Музыка, йыр сәнғәтендә былай булмай. Шоу-бизнеста була - эйе, тик ысын сәнғәткә йыр тыуҙырыу процесы үтә лә яуаплы һәм юғары кимәлдәге оҫталыҡ талап иткән ижади хеҙмәт.

**Сериалдар артында көн үткәргән, шоу-тапшырыуҙар менән йәшәгән һәм меңәрләгән һумдарға шоу-концерттарға билет алған халыҡ та күп кенә бит. Кешеләр ваҡыттарын һәм аҡсаларын иллюзион, яһалма, алдаҡ, ялтырауыҡ донъяға исрафлауға йәлләмәй. Был нимәнән килә?**

**Ирина Захарова:** Миҫал өсөн һөйләйем: берәй район үҙәгенә барабыҙ, филармония артистарының иҫ киткес бай классик концертын тәҡдим итәбеҙ, билет хаҡы 100 һум. Таныштарға шылтыратам, юҡ, беҙ Илсөйәр Бәҙретдиноваға билет алдыҡ, тиҙәр. Күпмегә алдығыҙ? Иң осһоҙон 800 һумға. Классиканы, халыҡсанлыҡты, юғары мәҙәнилекте бер сәғәтлек даңғыр-доңғорға һәм билдән түбән шаярыуҙарға алмаштырған әҙәмдәргә ни әйтерһең? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бындай миҫалдарҙы бихисап килтерергә була.

**Эстрадаға килеп ингән йәш кешегә ниндәйҙер талаптар ҡуйыусы берәй орган бармы беҙҙә? Мәҫәлән, берәү эстрада йырсыһы булырға теләне икән, ул ниндәй шарттарҙы үтәргә тейеш?**

**Сулпан Аҫҡарова:** Ундай тикшереүсе орган юҡ, әммә беҙ дәүләттә йәшәгән йәмғиәт, беҙҙә Мәҙәниәт министрлығы, Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы һәм башҡа яуаплы органдар бар. "Йәштәр нимә йырлай?" тигәнде генә түгел, ә иң беренсе "Йәштәр ниндәй юл менән бара?" тигән һорауҙар өҫтөндә лә уйларға кәрәктер.

Һәр кемдең шәхси мәҙәниәтен күҙ уңында тотканда, ул кешегә ғаиләлә һалына. Һәм ғаиләлә нимәләрҙер өлгәшеү өсөн шул тәңгәлдә хеҙмәт итергә, шул тәңгәлдә үҫешергә тейеш булыу өйрәтелә. Алайыҡ, йырсы йә музыкант булыуҙы. Мәҙәни кимәле булған ата-әсә балаһын ошо өлкәлә шөғөлләндерә, ошо өлкә-

✓ ***Телде белһә, улар мәғәнәһеҙ йырҙарҙы башҡармаҫ та ине. Әҙәбиәтте аңлаһа, үҙҙәренең шағир түгеллеген дә, музыка өлкәһен төшөнһә, көй яҙа белмәүҙәрен дә, тауыштары юҡлығын да аңғарыр ине.***

# ҮҘЕМ ЯҘАМ, … тураһында

нең белгесе итергә тырыша. Быны ул балаһының һәләтенә ҡарап билдәләй. Йәғни, аҙаҡ үҫеп етеп, сәхнәгә менеп баҫҡан кеше үҙе эшләгән өлкәлә белемле һәм һәләтле булырға тейеш. Уның хеҙмәте тамашасыға файҙалы һәм фәһемле булырға тейеш. Бына шундай белем, энергия, эмоция тулҡындары менән алмашыу ул йыр-моң тыңлау.

Эстрадаға аяҡ баҫыусы йәштәрҙең дә мәҙәни кимәле уларға ғаиләһенән эйәреп килгән, улар шунан юғарыраҡ та, кәмерәк тә була алмай. Әгәр халыҡ йырҙарын, классик музыканы, ретро көйҙәрҙе тыңлап үҫкәндәр йәки шундай концерттарға йөрөгәндәр, йырсыларға эйәреп йырлағандар икән, улар еңел-елпегә эйәрә алмаясаҡ. Ә инде сәнғәт донъяһына осраҡлы ғына килеп ингәндәр һәм аңдарына, ҡандарына йыр сәнғәтенә ҡарата һөйөү һәм хөрмәт һалынмаған икән, уларға ул төшөнсәләрҙе бер ниндәй ҙә орган һеңдерә алмаясаҡ.

**Ирина Захарова:** Йыр бит ул тулы әҫәр, драматургияһы, конфликты, кульминацияһы бар. Башҡарыусы уның бөтөн ошо эстәлеген күрһәтә белһен. Әсәй тураһында йырлап, "бум-бум-бум" ыңғайына сәхнәлә һикерә икән, мөхәббәт тураһында "иртәнге биштә мин һиңә ҡуна киләм" тип йырлай икән йәки "Башҡорт сәй эсә" тигән һөйләмдән генә тотош йыр була ала тип уйлай икән, был мәҙәниәтһеҙлек, наҙанлыҡ, белемһеҙлек. Ә беҙ күмәкләп шул мәғәнәһеҙлеккә ауыҙ йырып ҡарап торабыҙ, күптәребеҙ битараф, күптәребеҙ ҡул ғына һелтәй. "Халыҡҡа оҡшай" тип уйлай йәштәр. Юҡ, асылда, мәҙәни кимәле булған халыҡҡа оҡшамай улар. Бындай йыр һәм көйҙәр башҡорт сәнғәтен күрһәтер өлгөләр түгел, бындай йырҙар йәшәмәйәсәк. Шуның өсөн йәштәрҙе йүнәлтер органдар, уларҙың ижадын дөрөҫ юҫыҡҡа ыңғайлатыр остаздар булырға тейеш.

**Йәштәрҙең классик концерттарға йөрөмәүенең сәбәптәрен һанап китәйек…**

**Сулпан Асҡарова:** Йәштәр хәҙер телевизорҙан да ситләшеп, гаджеттарға, интернет донъяһына инеп батты. Унда ла иғтибарҙары файҙалы нәмәләлер тип уйламайым мин. Йәштәр интернет зомбиҙарына әйләнгән. Ундағы ҡыҫҡа текстарҙы, бер ниндәй тәртиптәргә һәм ҡанундарға һалынмаған телмәрҙәрҙе, кем нисек теләй, шулай төшөп һалынған фотолар теҙмәһен ҡарап-ҡабул итеп кенә өйрәнгән. Бер нәмә уйларға, фекерләп ултырырға кәрәкмәй. Ҡараның, күрҙең - һәм бөттө.

Әммә йәштәргә артыҡ ҡаты бәрелмәҫ инем мин. Уларға бөгөн донъя шар асыҡ, бер ниндәй сикләүҙәр юҡ. Беҙҙең заманда тыйыулы нәмәләр күп ине һәм шул иҫәптән попса, рок, рэп кеүек музыка жанрҙары ла илебеҙгә килеп инеп, таралып китеүенә бер быуын ғүмер генә үткән әле. Көнбайышта утыҙынсы-ҡырҡынсы, илленсе-алтмышынсы йылдарҙа йәштәр төркөмдәре ойошоп, тамашасыны геү килтергән, матурлыҡ конкурстары үтеп, шау-шыу ҡуптарған, беҙҙә шул хәл бөгөн бара. Юҡҡамы ни, һәр икенсе башҡорт егете йырсы булырға маташа, һәр икенсе башҡорт ҡыҙы һылыуҡай бәйгеһендә ҡатнаша. Тик улар был тәңгәлдә лә оло хеҙмәт һәм тырышлыҡ кәрәк икәнде аңлап етмәй.

Иң беренсе сәбәптәрҙең береһе интернет һәм заманға эйәреп маташыу, минеңсә. Әммә былар барыһы ла ваҡыт үтеү менән үҙгәрер ул. Тик урта йәшкә еткәндә шул виртуаль интернет донъяһында формалашҡан йәш башҡорт йәмғиәтенең үҙ асылын онотоп ҡуйыуына ғына хәүефләнәм.

**Ғәли Алтынбаев:** Тормошта мәғәнә, мәғәнәлек тигән бер йөкмәткеле төшөнсә бар. Бөгөнгө йәштәргә бына ошо етешмәй. Улар хәҙер шоу ярата. Концерт та шоу булһын, кино ла шоу булһын, кисә лә шоу булһын. Шоу эсендә, әлбиттә, мәғәнәгә урын ҡалмай. Өфө филармонияһы концерттарында берәү ҙә сығып мәғәнәһеҙ йыр йырламаясаҡ. Йәштәргә кәрәк булған "клево" йырҙарҙың һәр юлын тикшереп сыҡҡанда ғына ла мәғәнәһеҙлектән ҡолап китергә була. Юҡ, мин йәштәрҙе әрләмәйем, әммә асылында мәғәнәлеккә урын булмағандарҙан был донъяның төрлө ҡатмарлы ҡатламдарын, бороloштарын, бөгәрҙәрен аңлауҙы көтөү ҙә мөмкин булмаясаҡ. Йәш саҡта кеше аҡылһыҙ була ла, олоғая бара аҡыллана, тигән хәбәр дөрөҫ түгел ул. Йәшлектә аңһыҙ булған ҡартайғансы ла шулай ҡала. Шунлыҡтан йәштән үк белемгә, аңға, ысын мәҙәниәткә, мәғәнәлеккә ынтылырға кәрәк.

**Ирина Захарова:** Ҡапыл килеп, ҡапыл юғала торған эмоцияларға мохтаж бөгөн кеше. Беҙ ысынлап та тыйылып, баҫылып үҫкән быуындар, халыҡтар. Хис-тойғоларыбыҙҙы шарран асып өйрәнмәгәнбеҙ. Һәм ҡапыл тормоштар үҙгәреп, шоу тапшырыуҙар, концерттар, шоумендар барлыҡҡа килде. Улар беҙҙең йәмғиәткә яҙғы ташҡын булып бәреп инде. Был шоуҙарҙа хистәрҙе ҡапыл сығарып, теләһәң - йырлап, теләһәң - бейеп, теләһәң - һыҙғырып, теләһәң ни эшләп ҡайтырға була. Көслө музыка, дәртле ритмика, төҫлө уттар, сағыулыҡ һәм башҡа шоу факторҙары кеше мейеһен ҡуҙғыта, унда рәхәтлек, күңеллелек тойғоһон уята. Бына шуға алдана ла халыҡ. Шул ваҡытлы эйфорияға мохтажлыҡ кисерә. Тик был тойғоларҙың, яуапһыҙ хистәр кеүек, бары уларҙың ғына энергияһын һура икәнен аңламай. Тимәк, концерт ҡарау өсөн дә, йыр менән йырҙы айыра белеү өсөн дә аҡыл кәрәк.

Икенсенән, туған телде белеп, аңлап етмәү ҙә ҡамасаулай бөгөнгө быуынға. Телде белһә, улар мәғәнәһеҙ йырҙарҙы башҡармаҫ та ине. Әҙәбиәтте аңлаһа, үҙҙәренең шағир түгеллеген дә, музыка өлкәһен төшөнһә, көй яҙа белмәүҙәрен дә, тауыштары юҡлығын да аңғарыр ине. Был өлкәгә мин һәләтле, белемле йырсыларыбыҙҙы индермәйем. Хаталар хаҡында ғына һүҙ йөрөтәм.

**Филармонияларҙың һәм филармония артистарының роле, тимәк, ниндәй? Йәғни, улар популяр артистар булыуҙы тәүмаҡсат итеп ҡуймай, улар рухи ҡомартҡыларҙы һаҡлаусы һәм киләсәккә тапшырыусы булып тора. Дөрөҫ аңлайбыҙмы?**

**Ирина Захарова:** Дөрөҫ. Шуның өсөн дә филармония артистарын шоу артистары менән сағыштырыу урынһыҙ. Был икеһе ике донъя халҡы. Филармониялар, театрҙар милли мәҙәниәтте, донъя мәҙәниәтен һуғарыусы усаҡтар. Улар дәүләт тарафы ҡарамағында булырға һәм тулыһынса ҡурсаланырға тейеш. Миҫал өсөн генә алам, филармония артистары иркенләп телевидениеға ла үтә алмай. Бер үк йырсылар көнө-төнө экранда. Халыҡҡа тап ана шул аҡсаһы менән алға сығыусылар ғына тәҡдим ителә.

Икенсе мәсьәләне лә әйтеп китәм. Ҡатыраҡ булыр, әммә тура һүҙ. Татарстанда, мәҫәлән, үҙен хөрмәт иткән бер түрә лә, бер хөкүмәт етәксеһе лә, йәмәғәт ойошмалары башлыҡтары ла саҡырыу ҡағыҙы тотоп концертҡа килмәй. Улар билетты һатып ала. Беҙҙә иһә, ярты зал саҡырыуға килгән кешеләр менән тула. Был бит артистарҙың хеҙмәтен, филармония эшмәкәрлеген хөрмәт итмәү тигәнде күрһәтә. Кемдәрҙер кемдәрҙер өсөн бушлай эшләй булып сыға. Ябай завод эшсеһе билет һатып ала ала, ә етәксе ала алмай, тимәк. Был да мәҙәнилек күрһәткесе, һәр кемдең әхлаҡи кимәле ул.

**Сулпан Асҡарова:** Башҡорт йәмғиәтенең йөҙө булған күп етәкселәр һәм шәхестәр башҡорт эстрадаһын белмәй ҙә хатта. Сөнки улар филармония һәм театрҙарға йөрөмәй. Минән хатта: "Нәзифә Ҡадырова йырлаймы ни әле?" - тип һораған билдәле кешеләр бар. Улар бөгөнгө көн Нәзифә апайыбыҙҙың бер бөртөк фонограммаһыҙ һәм микрофонһыҙ ҙа "эх" тә итмәйенсә икешәр сәғәтлек концерттар биргәнен белмәй. Халыҡ йырын да, романстарҙы ла, классик әҫәрҙәрҙе лә, заман эстрадаһын да юғары кимәлдә башҡарыусы примабыҙҙы ла күрмәгәс, уларҙан нимә көтөргә? Беҙҙә бит шулай, кеше үҙе барҙа ҡәҙерләмәйбеҙ, хөрмәтләмәйбеҙ, ижадын тейешле баһаламайбыҙ, ә арабыҙҙан китһә - барабан һуға башлайбыҙ. Беҙ иң ҙур, юғары концерттарыбыҙҙа тап ана шул сәхнә таланттарын, бөйөк йырсыларыбыҙҙы күрһәтергә тейешбеҙ. Йәштәр уларҙы күрһен, ысын сәнғәт өлгөһө ниндәй икәнен белһен өсөн...

Филармонияның эстрада художество етәксеһе, баш режиссеры булараҡ, хәҙер ҡул аҫтымдағы теләһә ниндәй артисҡа теләһә ниндәй жанрҙы биреп, ошоно эшләргә кәрәк, тип әйтә алам һәм уның быны башҡара алырына иманым камил. Ә шоу артистарының был мөмкинлегенә шикләнәм. Бына ошо айырманы аңлаһын ине йәмғиәт һәм етәкселек. Профессионалдарҙы хөрмәт итә һәм баһалай белһен ине. Минең теләгем шул ғына.

**Профессиональ йырсыларға шоу-бизнестан өҫкәрәк күтәрелеү йәки тамашасыны яулап алыу өсөн нимәләр етмәй?**

**Ғәли Алтынбаев:** Беҙҙең йәмғиәттә быуындар бәйләнеше тигән нәмә өҙөлөп ҡалды. Йәғни, атай-олатайҙарыбыҙ беҙгә күп кенә рухи ҡиммәттәрҙе тапшырып өлгөрә алмай ҡалды. Ят музыка, ят йырҙар тыңланыҡ, ят мәҙәниәтте һеңдереп маташтыҡ, ят телде өйрәндек һәм башҡалар. Ошо арауыҡта милли мәҙәниәткә булған бәйләнеш тә юйыла яҙҙы. Был юҡлыҡты, бушлыҡты ана шул яһалма, ситтән килгән, алдаҡ нәмәләр тултырҙы ла инде. Бөгөн шул юғалтыуҙарҙы кире тергеҙеп, ҡоршап, ялғап маташабыҙ. Был, әлбиттә, еңел түгел. Тик мөмкин булмаған хәл дә түгел. Шоу-бизнесты бер ҡайҙа ла итеп булмай бөгөн. Ул үҙенең урынын алып нығынған. Әммә беҙҙең тормош асылы икенсегә нигеҙләнгән. Мин, мәҫәлән, юғары сәнғәт өлгөләрен башҡарыу өсөн яратылғанмын һәм шул юлыма тоғромон. Минең эргәмдә шундайҙар күп. Беҙ бар икән, тимәк, беҙҙе тыңлаусылар, яратыусылар ҙа етерлек. Һәм шоу-бизнес менән ярышыу беҙҙең маҡсат та түгел. Беҙ мәңгелек өсөн эшләйбеҙ, шул ғына.

Беҙҙең заманда йәштәр йыры йәки ололар йыры тигән айырмалар булманы, йәштәр концерты тигәне лә юҡ ине. Ауылға концерт килһә, иң алда балалар иҙәндә ултырҙы, унан ололар теҙелер ине, иң артта йәштәр булды. Концерт төрлө быуындарҙы ла берләштереп, бер моң менән сорнай ине. Асылда, ошолай булырға тейеш тә.

**Сулпан Асҡарова:** Был хаҡта мин йыш уйланам. Үҙ-үҙемә һорауҙар бирәм, ғәйеплеләрҙе эҙләйем... Әммә аңлай алмайым. Ваҡыттар, заманалар үҙгәрҙе, тип кенә лә әйткем килмәй. Был хаҡта күп кенә тамашасылар менән дә һөйләшәбеҙ. Асылда, күп халыҡ филармония артисының шоу концертта һикереп йөрөүселәрҙән һәм тауышһыҙ, моңһоҙ "йондоҙҙарҙан" күпкә юғарыраҡ икәнен аңлай. Ҡайһы бер концерттарҙан һуң "Ни өсөн бындай матурлыҡты, бөйөклөктө бөтә ерҙә лә күрһәтмәйегеҙ?" тип әйтеп китәләр. Ә бит бөтөн концерттарҙа ла тигәндәй, гастролдәрҙә, ауыл клубтарында, ҡала майҙандарында сығыш яһай улар. Тамашасы уларға "Браво" ҡысҡыра! Ә һөҙөмтәлә шоу йырсылары күренә, ә профессионалдар юҡ.

Бөгөнгө шоу-бизнес менән продюсерҙар етәкселек итә. Артисын күберәк ишеттереү, күрһәтеү өсөн йүгереп йөрөй улар. Финанс ярҙамын да, башҡаһын да таба. Телевидение, реклама, роликтар, клиптар, матбуғат конференциялары, сәхнә костюмдары... Һанай китһәң, уңыштың һикһән процентын ошо хеҙмәттәр алып килә шоу бизнеста. Ә беҙҙең осраҡта профессиональ башҡорт эстрадаһының продюсеры кем? Һәм ни өсөн уны милли мәҙәниәттең үҫеше ҡыҙыҡһындырмай?



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына шундай ҡатмарлы һәм үткер мәсьәләләр борсой бөгөн Башҡорт дәүләт филармонияһы етәкселеген, артистарын. Милли башҡорт эстрадаһын йәшәтеү һәм заманға ярашлы тейешле кимәлдә тотоу өсөн көрәшә улар. Үҙ сиратыбыҙҙа, беҙ, "Киске Өфө" гәзите коллективы, барлыҡ башҡорт халҡын профессиональ башҡорт эстрадаһының тамашасыһы булырға, үҙ мәҙәниәтебеҙҙе, сәнғәтебеҙҙе тейешенсә баһаларға һәм уның үҫешенә булышлыҡ итергә саҡырабыҙ.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмә ҡорҙо.**

*✓ Соҡор, ысынлап та, тәрән ине. Ике кеше бейеклеге бар. Бәлки, күберәктер ҙә. Ысынлап та, кемдер ҡоҙоҡ ҡаҙып маташҡан, шикелле. Һыуы сыҡмағас, туҡтағанмы, әллә, миҙгел быйылға тамам, яҙын дауам итермен, тип уйланымы?*




Ир үҙкурсаланыу тәртибен боҙорға булды. Был хәлдә, йәғни бер ҡайҙа сыҡмай, түбәгә төкөрөп, дүрт стенаға ҡарап, фатирҙа ғына ятыуҙы, тажзәхмәт тигән батшалар вирусы барлыҡҡа килгәс уйлап таптылар. Ҡытайҙа башланған был сир бар донъяны баҫып бара тиҙәр, Рәсәйҙә лә бик таралмаһын өсөн, өйҙә генә эшләргә, халыҡ күп йөрөгән урындарҙа булмаҫҡа, тип бик тә тыялар. Балалар мәктәпкә йөрөмәй хәҙер, өйҙә компьютер битлегенә генә ҡарап, уҡытыусыны тыңлайҙар, йәғни дистанция һаҡлайҙар, бер-берен виртуаль күрәләр, виртуаль аралашалар, виртуаль һағынышалар.

Ирҙе лә ситтән тороп эшләүгә күсерҙеләр, офиста ултырмай, кәрәкле ҡағыҙҙарҙы өйөндә эшләй ҙә үҙәк аппаратҡа ебәрә. Комбинатта бухгалтер ул. Бисәһенә түләүле отпуск һымаҡ ял биреп ҡуйҙылар. Ул - ошо уҡ комбинатта ашнаҡсы. Өс бүлмәле фатирҙа бисәһенә, үҙенә, бишенселә уҡып йөрөгән ҡыҙына һәм берҙән-бер улына, икенсе йыл улар менән көн күреүсе ауырыу әсәһенә урын еткән дә кеүек. Ҡыҙы менән әсәһе үҙ бүлмәләрендә мәж килһә, ир менән ҡатын күп ваҡытын залда һәм кухняла үткәрә. Аҙна-ун көн шулай һәйбәт кенә йәшәнеләр: эш осоронда ныҡлы эләкмәгән йоҡо туйҙырыу, төрлө тәмле ризыҡтар бешереп тамаҡ һыйлау, кино ҡарау, китап уҡыу кеүек танһыҡ шөғөлдәр шәп, унай булды. Улар араһында өйҙәге төрлө ваҡ хәстәрҙәр, эш, ҡыҙының уҡыу мәшәҡәттәре менән булдылар - күңелле, бер аҙ хатта кинәнес менән үтте шулай ваҡыт. Ике көнгә бер тапҡыр ауыҙ-морононды битлек менән ҡаплап, ҡулына резина бирсәткә кейеп, һаҡланып ҡына магазинға сығып киләһең дә ятаһың шулай хөрриәттә. Ә тағы ла, кибеттән ҡайтҡас, өйгә "зараза" алып ҡайтманыңмы, үлтерә һал паразиттарҙы тип, дезинфекция урынына ҡулдарҙы, ауыҙ-морондарҙы спиртлы һыу менән һөртөп, ышҡып алғас, ҡатының теге утлы һыуҙы ла бер-ике рюмка һалып бирһә, кәйефтәр бөтөнләй күтәрелеп китә.

Ләкин икенсе аҙна аҙағында бындай тормош та ялҡыта башланы. Көн дә бер үк шөғөлдәр, бер үк күренештәр, бер үк кешеләр (ниндәй генә яҡын булмаһындар) тамам биҙҙерҙе. Барыһынан бигерәк, күңел дә, аң да был бүлмәгә генә түгел, был донъяға һыйыша алмай башланы. Үҙкурсаланыуға түҙмәй, берәү һигеҙенсе ҡаттан һикергән, Ҡырғыҙстанда һайлауҙан һуң дәүләт түңкәрелеше булған, ир менән ҡатын бер-береһен сәнскән, оппозиционер Навальныйҙы ағыулауҙа ғәйепләп, Рәсәйгә тағы ла санкциялар ҡабул ителгән, ҡарабойҙай менән көнбағыш майына тағы ла хаҡтар артҡан, Криштиану Роналду коронавирус менән ауырып киткәс, "Ювентус" футбол клубының акцияһы Милан фонд биржаһында ете процентҡа кәмегән... Түҙерлек ине был хәбәрҙәр ҙә.

Һигеҙенсе көндә бисәһе, ошо тәрилкәңде артыңдан йыуып ҡуйһаң да булыр ине, тип ғәйеп тапты. Урамдан туфлийын таҙартмай ингән өсөн бер бөжәккә әйләнде ир, бара-бара диванда аунап, нишләргә белмәй йөрөгән хайуан ине. Түҙерлек ине әле.

Бер көн, ошо өс бүлмәле фатирҙа алты кеше нисек йәшәмәк кәрәк, был ваҡытта арыу кешеләр баҡсаһында йә дачаһында ял итә, тигәс, кем әйтмешләй, сыҙамлығының түҙемлеге шартланы.

- Нисек алты кеше? - тип кенә һорай алды.

- Әсәйем менән һин күҙемә дүрт кеше булып күренәһегеҙ хәҙер, - тигәс, Ир ашығып кейенергә тотонды. Ғәҙәттә, балыҡҡа йә тәбиғәткә сыҡҡанда кейә торған свитерын кейҙе, штормовкаһын елкәһенә һалды, юл ыңғайы ишек төбөндә ятҡан биштәрҙе эләктерҙе. Кәрәк булыуы бар.

- Ҡайҙа бараһың, хәйерсе?

- Мин ер, дача эҙләргә барам, - тине лә Ир сығып китте. Үҙ бүлмәһе ишеген асып, әсәһе генә оҙаҡ ҡарап торҙо, бер ни өндәшмәне. Ҡарашы моңһоу ине.

Машинаһын ҡыҙҙырманы. Дөрөҫөрәге, асҡыс үҙе менән түгеллеген тышҡа сыҡҡас ҡына аңланы. Кире ингеһе килмәне. Ҡайҙа барырға белмәй, оҙаҡ ҡына тапанып торҙо. Рәхәтләнеп, көҙгө һауаны һуланы. Рәхәт тә кеүек, тик үҙен ирекле итеп хис итә алманы.

"Ысынлап та, ер ҡарап, тәбиғәткә сығып, ер-һыу күреп киләм әле. Кеше был осор ер биләмәләрен йә теҙәлгән дачаһын һатыусан, мәле шундай", - тип уйланы ла автовокзал яғына ыңғайланы. Ҡала яны транспорты шунан хәрәкәт башлай.

* * *

Урамдан үткәндә лә, автовокзалда торғанда ла мейеһендәге ығы-зығы туҡтаманы. "Һатам", "алам", " битлек кейегеҙ" кеүек тауыштар ишетелеп ҡала. Баҙар кеүек, тик баҙар түгел, беҙҙең тормош. Костюмлы кешеләр ҙә уҙа. "Нефттең барреле күпме?" "Нишләп бензинға хаҡ арта?" "Белоруста митингылар тымдымы?" "Кредит ставкаһы - 21 процент". " Америка һаман Сирияға бомба ташлай". "Тағы ла теракт булған". "Роснефть", "Газпром" акцияларының хаҡы төшмәнеме әле?" "Мин һине теләйем!" "Беҙ яңы йорттан фатир алдыҡ, ура!" ... Ныҡ шау-шыу менән тулған мейе тышҡа сыҡҡас та телевизорҙан, компьютерҙан тулған бысраҡтан, мәғлүмәттән арына алмай, шул тормош менән йәшәне әле. Киоскынан бәләкәй шешә менән һыу һәм битлек алды. Шунһыҙ ярамай. Инспекторҙар, кондукторҙар, полицайҙар, ирекмәндәр һәм башҡалар: "Битлегең ҡайҙа?" - тип йәнде өтөп бара. Битлекһеҙ, ысын йөҙ менән йөрөргә ярамай. Яһалмалыҡ ҡына вирустан ҡотҡара, яһалмалыҡ ҡына был донъяла йәшәргә форсат бирә ала. Беренсе тура килгән автобусҡа, дөрөҫөрәге, тыуған көнө һандары тура килгән, йәғни 273-сө һанлы маршрутка ултырҙы ла китте. Автобуста артҡа йәйелеп ултырҙы. Уфф, ниһайәт, ирекке сыҡты.

Билет тикшереүсенән:

- Ҡайһы яҡҡа был маршрут? - тип һораны.

Тегеһе асыуланып:

- Ҡайҙа барғаныгыҙҙы ла белмәйһегеҙме? Иглинға, - тине.

- Беләм, - тигән булды Ир.

Баҡсалар башланғас та тура килгән бер туҡталышта төшөп ҡалды. Уның менән бергә төшкән ҡатындан: "Был яҡта ер һатыусылар бармы икән?" - тип һораған булды. Алһа ла, алмаһа ла, ваҡыт уҙғарып, бауыр аҫтынан ел үткәреп, юҡ йомошто бар итеп йөрөп килһен әле.

- Бына был яҡта һаталар тип һөйләйҙәр, тик ерҙәре бик уңдырышһыҙ, дым юҡ, тиҙәр.

- Шулай ҙа ҡараштырып киләйем әле, - тигән булды Ир.

Яңғыҙы ҡалды. Оло юлдан төшөп, баҡсалар яғына ыңғайлағас, ҡапыл ҡолағы һыҙлағанын тойҙо. Һәм кинәт... тынлыҡ, ҡолаҡ ярырлыҡ тынлыҡ. Ҡоштар һайраған кеүек. Шаптыр-шоптор килеп аяҡ аҫтында үлән, япраҡ кыштырлай. Ир йүгерергә тотонды, ҡоласын йәйеп яланға ҡарап торҙо. Бына ҡайҙа хөрриәт! Нефть тә, теракт та, Роналду ла, бисә лә юҡ. Битлеген систе лә елгә осорҙо. Бында мин - үҙ-үҙем. "Далаларым, ҡырҙарым, күккә ашҡан Уралым!" - Салауат Юлаев шиғыры юлдары автоматик рәүештә хәтеренә килде. "Эһе-һей!" - тип берҙе ҡысҡырып алды. Шаярһыны килде. Тирә-яғына ҡаранып алды ла "ат менеп" сабырға тотондо. Иркенлекте тойҙо. Тыны ҡысыла башлағас, ергә һуҙылып ятты. Тағы һикереп торҙо ла аҙымлап ер үлсәргә тотонды. "Тә-әк, былай 25, буйға 40 метр, 10 сутый тин. Бара-а, шулай ҙа, 15 сутый булһа, шәберәк булыр ине. Ҡояшҡа күҙен ҡыҫып ҡарап уйланып торған булды. Ун сутый? Ерҙән кем туйған, ул күп булған һайын етмәй. Их, 20 сутый булғанда... Ерҙе тотоп, усына һалып ҡараны.

- Нишләп уңдырышһыҙ булһын инде, - тип һөйләнде. - Ҡара, ниндәй майлы тупраҡ. Мостай әйтмешләй, тот та икмәккә һыла. Уңдырышлы ер. Хужаһын табырға кәрәк.

Тағы аҙымлап һанап китте лә үҙенсә күҙ алдына килтерергә тотондо. "Бына бында өй торор, тә-әк, етегә һигеҙ, ҡабатлаһаң, 56 квадрат метр. Юҡ, бәләкәйерәктер ул, бер һалғас, әсәйгә лә иркенерәк булыр, ҡыҙыма ла - унға ун булһын. Оһо, бында - мунса, эргәһендә - беседка, сабынып тирләп-бешеп сығаһың да мәтрүшкәләп тороп сәй һемерәһең. Теге яҡ ситкә гараж, оҫтахана ҡуйғанда... Бында - баҡса, картуф-кишер тигәндәй. Үҙ ҡыярың, үҙ помидорың. Тәәк, мул ғына уңыш биргән бер алмағас та ултыртырға кәрәк. Бынау беседка эргәһендә булыр, үрелеп кенә алаһың да ҡабаһың". Шунан ҡысҡырып көләп ебәрҙе.

- Алма, беш, ауыҙыма төш... Шәп тә!

Тағы ла аҙымлап һанап китте. "Ун сутый. Әҙерәкме икән? Өфөгә йыраҡ түгел. Бер, ике..."

Оло Ер шарын аҙымлап үлсәп йөрөгән Ир ҡапыл юҡ булды. Шаптыр-шоптор соҡорға килеп төштө ул.

## Беренсе көн

Ир оҙаҡ ҡына ыңғырашып ятты. Мейеһен "ҡалала ҡалған" көндәлек мәхшәрҙәр быраулай башланы, ҡолағына бисәһенең ҡысҡырған тауышы ишетелгәндәй булды. "Икәүегеҙ дүртәү булып күренәһегеҙ!" Башын баҫып, ҡапланып ята бирҙе. Шунан ҡалҡынды, бер аяғының һыҙлауын тойоп, икенсеһенә генә баҫты. Ҡағынып алды. Оҙаҡ өҫкә ҡарап торҙо. Тынлыҡ. "Бынының һәйбәт". Тубығын тотоп яңынан ултырҙы. Итеген систе лә, балағын күтәреп, тубығын ҡарай башланы. Тубыҡ түгел, ахыры, аҫтараҡ һыҙлағандай. Балағын төшөрҙө.

- Нимә был? Ҡоҙоҡ тиһәң, һыуы юҡ. Тәрән генә ҡаҙылған, - тип һөйләнде.

Соҡор, ысынлап та, тәрән ине. Ике кеше бейеклеге бар. Бәлки, күберәктер ҙә. Ысынлап та, кемдер ҡоҙоҡ ҡаҙып маташҡан, шикелле. Һыуы сыҡмағас, туҡтағанмы, әллә, миҙгел быйылға тамам, яҙын дауам итермен, тип уйланымы? Улай тиһәң, күптән ҡаҙылғанға оҡшаған, йәй урталарында, эҫелә. Төбө ҡатып бөткән. Стеналары ла. Кешенең ғәмһеҙлегенә аптырарһың, шуның ауыҙын бер-ике таҡта менән ҡаплап китһә, булмаймы ни? Кешенән бигерәк, мал йә йәнлек-фәлән төшөп, сыға алмай ятһа. Ярай, мин әмәлен табырмын да ул, тип уйланды.

Ир ике аяғына ла баҫып ырғып ҡараны ла шунда уҡ: "Әлеү, әлеү. Аяғым, аяғым", - тип йәлп итеп яңынан ултырҙы. Һул аяғын ышҡып ултырҙы ла яңынан баҫты.

- Юҡ, һынмаған былай. Ҡаймыҡҡан, шикелле, өләсәйеңдең ата ҡаҙы, - тип төкөргән булды. Ипләп кенә тағы һикереп ҡараны.

- Нимә булды был? Мөгәрәп тиһәң... Әллә ҡоҙоҡмо? - тип һөйләнгән булды. Эсенә ҡурҡыу, шом ғәләмәте инеүен тойоп, шулай һөйләнде ул. Үрмәләп ҡараны. Оҙаҡ ҡарап торҙо. Ырғып маташты. Ҡатҡан стеналарға тотоноп менерлек йөй ҙә, берәй тамыр-фәлән ҙә булмаһа ла, нимәләр табырға тырышты, тик өҫкә менеп булманы, яңынан килеп төштө. Ике аяғын ике яҡҡа йәйеп маташҡайны, һул аяҡ иркенләргә ирек бирмәне. Бер яҡҡа ике аяғын терәп, икенсе яҡ стенаға ике ҡулы менән таянып менергә уйланы, тик улай бөтөнләй килеп сыҡманы. Кәүҙәнең оҙонлоғо етте лә, тик көс һәм һығылмалылыҡ юҡ ине. Ултырып хәл йыйып алды. Тағы менеп ҡараны.

- Нимә һуң был? Бейек кенә. Ҡоҙоҡ тиһәң, һыуы юҡ. Эһеһей. Бармы берәйһе, эһе-һей! - ысынлап та күңелен шом баҫты.

- Сығып булмаһа?

Ҡолағын тырпайтып тыңлап торҙо. Ҡыштырлаған кеүек тауыш ишетелгәндәй булғас:

- Кем бар унда? Участок номер тридцать семь, минеке. Мин һатып алам. Ере уңдырышлы. Ҡоҙоғо ла бар. Эй, эһеһей, ишетәһегеҙме? Хәҙер сығам, - тип һөйләнде.

Бар көсөнә һикереп, нимәгә булһа ла йәбешеп сығырға маташты, тик ыңғырашып сүкәйә биреп ултырҙы.

- Уф, аяғым, б... Һынмаған шикелле, - ҡалҡынып, тағы сүкәйеп ултырып ҡараны. "Приседание килеп сыға, тик һул аяҡ һыҙлай шулай ҙа". Уфылдап тәненең башҡа урындарын тотҡолап ҡараны. Һаман күңелендәге әйтеп аңлата алмаҫлыҡ сәйер тойғоно ҡыуыр өсөн һөйләнеүен белде:

- Ҡалай елле килеп төштөм. - Арҡаһынан биштәрен һалды. - Бынау булмаһа, ҡабырға һыныр инеме икән? Ҡабырға, имеш, саҡ хана булманы һиңә. Һиңә? Һиңә, һиңә... Һе, кем әле мин? Исемем нисек әле? Бына шайтан. - Башын тотоп ҡараған булды. - Ҡайһы шөрөп былт итеп килеп төштө икән? Исемде онотсәлә. Эһе-һей, кем әле мин? Шаяртам, шаяртам...

**(Дауамы бар).**

✓ *Хәҙер юрмый ҡәбиләһе башҡорттары Башҡортостандың Баҡалы, Туймазы һәм Шаран, Татарстан Республикаһының Әлмәт, Лениногорск, Бөгөлмә, Аҙнаҡай һәм Мөслим райондарында йәшәй.*



*ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ*




# ЫРЫУҘАР ҠОР ЙЫЯ

## Данлы, даланлы ҡаңлы

**Борон ҡаңлы башҡорттары тарихи Башҡортостандың көнбайыш өлөшөндә бик ҙур территорияны биләгән. Биләмәләренә Иҙәш, Төрөш, Юрмый, Киәҙе ҡушылдыҡтары менән бергә Сәрмәсән йылғаһы үҙәне һәм Ҡандракүл буйы, шулай уҡ Ҡармасан, Яубазы, Нөгөш (Өҫән йылғаһы ҡушылдығы), Ағиҙел (Бөрө ҡалаһы тирәһендә) йылғалары үҙәндәре ингән. Ҡаңлыларҙың аҫаба ерҙәрендә ике өйәҙ үҙәгенә - Бөрө һәм Бәләбәй ҡалаларына нигеҙ һалынған.**

Хәҙерге ваҡытта ҡәбиләнең аҫаба биләмәләренә Благовар, Бөрө, Бүздәк, Бәләбәй, Дүртөйлө, Дәүләкән, Кушнаренко, Мишкә, Саҡмағош, Туймазы һәм Шаран райондары инә. Ҡаңлылар үҙҙәренең арҙаҡлы шәхестәре менән дә хаҡлы рәүештә ғорурлана ала. Башҡорт милли хәрәкәте лидерҙарының береһе Муллаян Халиҡов, башҡорт халҡының бөйөк шағиры Шәйехзада Бабич, сәсән Фәррәх Дәүләтшин, яҙыусылар Хәким Ғиләжев һәм Башҡортостандың халыҡ шағиры Факиһа Туғыҙбаева, Башҡортостандың халыҡ артистары Фидан Ғафаров, Таңсулпан Бабичева, Илсөйәр Ғизетдинова. Был исемлекте тағы әллә күпме дауам итергә мөмкин.

Ошо көндәрҙә Бүздәк районы ерендә булып үткән ҡаңлы башҡорттары ҡоронa атап үтелгән райондарҙан барлығы 91 делегат килде. Делегаттар баш ҡаланан килгән ғалимдар Салауат Хәмиҙуллин, Юлдаш Йосопов, Искәндәр Сәйетбатталовтың, шулай уҡ тыуған яҡ тарихын, шәжәрәһен өйрәнгән яҡташтарының сығыштарын тыңланы, үҙҙәре йәшәгән район башҡорттарының тарихи һәм рухи мираҫына бәйле көнүҙәк мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләште. Мишкә районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Мөнир Нурисламов оло ҡорҙа сығыш яһап, "Без ҡаңлылар. Без бергә. Без башҡортлар" тип белдерҙе.

Саранның пленар өлөшөнән һуң ырыу Советына ағзалар һайланды. Шулай уҡ Факиһа Туғыҙбаева шиғырына Нәфирә Иҡсанова яҙған йырҙы ҡаңлыларҙың гимны тип раҫланылар. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡарамағындағы Геральдика комиссияһы тарафынан эшләп тәҡдим ителгән гербты делегаттар бер тауыштан хупланы. Ҡаңлылар балыҡсыларҙан ҡала Ырыу башлығы менән Советы, гербы һәм гимны булған икенсе ырыу булды.

Шулай уҡ йыйында ырыу ҡарары ҡабул ителде. Документҡа Башҡортостан Республикаһы үҫешенә мөһим өлөш индергән шәхес Муллаян Халиҡов исемендәге республика премияһын булдырыу; башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында уҡыу-уҡытыу буйынса ҡулланма әсбаптар әҙерләү һәм баҫтырып сығарыу; 112-се Башҡорт атлы дивизияһында хеҙмәт иткән ҡаңлы ырыуы вәкилдәренең исемдәрен мәңгеләштереү тураһында һәм башҡа тәҡдимдәр индерелде.

## Шәхестәргә бай юрмый

**Юрмый - төньяҡ-көнбайыш башҡорттары составындағы боронғо башҡорт ҡәбиләһе. Этнонимы болғарҙарҙа, венгрҙарҙа һәм сыуаштарҙа билдәле. Юрмыйҙар V быуат аҙағында башҡа башҡорт ҡәбиләләре һәм куртугурҙар менән ҡәбилә союзы һәм боронғо башҡорт халҡын барлыҡҡа килтереүҙә ҙур роль уйнаған тигән мәғлүмәттәр ҙә бар. Юрмыйҙарҙың формалашыуына йәнәй, ҡатай, юрматы башҡорт ҡәбиләләре менән күрше булыуҙары йоғонто яһай. XII-XIII быуаттарҙа улар - Дала Зәйе һәм Шишмә йылғалары буйында, ә XIII-XIV быуаттарҙа Ыҡ йылғаһы бассейнында көн иткән, күршеләре байлар, бүләр, йылан, ирәкте, ҡатай һәм ҡырғыҙ башҡорт ҡәбиләләре менән аралашып йәшәгән.**

XIV быуат аҙағы - XV быуат башында юрмый ҡәбиләһенең бер өлөшө ҡатайҙар менән Себер яҡтарына күсенә һәм Төй, Етеҙ Танып йылғалары буйлап урынлаша. Бер өлөшө юрматы ҡәбиләһе менән көньяҡҡа юлланып, Ашҡаҙар, Ағиҙел, Стәрле йылғалары һәм Нөгөш йылғаһының уң яғында йәшәй башлай. Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуынан һуң ҡәбиләнең биләмәләрендә Ҡаҙан даруғаһының Юрмый улусы барлыҡҡа килә. XVII быуат аҙағынан XIX быуатҡа тиклем юрмыйҙарҙың ерҙәре - Бөгөлмә өйәҙенә, а кантон идаралығы системаһы дәүерендә 12-се башҡорт кантонына инә. Хәҙер юрмый ҡәбиләһе башҡорттары Башҡортостандың Баҡалы, Туймазы һәм Шаран, Татарстан Республикаһының Әлмәт, Лениногорск, Бөгөлмә, Аҙнаҡай һәм Мөслим райондарында йәшәй. Был ырыуҙың биләмәһенең күп өлөшө элек Минзәлә өйәҙенә ҡараған, шуға ла уларҙы Минзәлә башҡорттары тип атайҙар. Татарстанда ҡалған юрмый ырыуы башҡорттарының киң билдәле ауылы, әлбиттә - Аҙнаҡай районының үҙәге Аҙнаҡай. Әлмәтмулла исемле тағы бер юрмый башҡорттары ауылы Әлмәт районына исем биргән.

Юрмый ырыуы башҡорттарынан күп кенә арҙаҡлы шәхестәр сыҡҡан. Шуларҙың иң билдәлеһе - мәшһүр башҡорт ғалимы, дин әһеле Ризаитдин Фәхретдинов. Ул 1859 йылда Кисеүсат исемле юрмый башҡорттары ауылында тыуған (хәҙерге Татарстандың Әлмәт районы). 1912 йылда бирелгән паспортында ла Кисеүсат ауылы башҡорто тип яҙылған. 1891 йылда Өфөгә күсеп килә. Бында ул Рәсәй мосолмандары диниә назаратында эшләй. Арҙаҡлы башҡорт зыялылары Мифтахетдин Аҡмулла, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Зәйнулла Рәсүлевтар менән хеҙмәттәшлек итә. Ике башҡорт ғалимы Ризаитдин Фәхретдинов менән Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев 1895 йылда венгр ғалимы А. Вамбериҙы Башҡортостан буйлап оҙатып йөрөй, уға башҡорт теле буйынса материалдар йыйыуҙа ярҙам итә. 1917 йылда Ризаитдин Фәхретдин ихлас күңелдән Башҡорт милли хәрәкәтенә ҡушыла. 1917 йылдың декабрендә Ырымбурҙа Каруанһарайҙа үткән 3-сө Дөйөм Башҡорт ҡоролтайында әүҙем ҡатнаша. Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайына (парламентына) ағза итеп һайлана. Ризаитдин Фәхретдиновтың Ғабдрахман һәм Ғәбделәхәт исемле улдары ла автономия өсөн көрәштә ҡатнаша. Ғәбделәхәт Фәхретдинов 1917 йылдың көҙөндә Ырымбур губернаһы башҡорттары исеменән Рәсәй ойоштороу йыйылышына депутат итеп һайлана. Өлкән улы Ғабдрахман Фәхретдинов милли хәрәкәт етәкселәренең береһе була. 1918 йылдың августында Башҡортостан хөкүмәтенең мәғлүмәт бүлеге мөдире булып эшләй. Бер үк ваҡытта - "Башҡортостан хөкүмәтенең теле" гәзитенең мөхәррире. 1919 йылда Башҡорт Совет Республикаһының Социаль тәьминәт халыҡ комиссары вазифаһын башҡара. 1920 йылдан Башҡортостандың Дәүләт нәшриәтендә эшләй. 1923-1924 йылдарҙа БАССР Хөкүмәтендә (Башсовнарком) тәржемәсе була. Хөкүмәт ҡарарҙарын, бойороҡтарын башҡортсаға тәржемә итеү эше менән шөғөлләнә. 20-се йылдар башында Ғ. Фәхретдинов башҡорт халҡының тарихын өйрәнә, материалдар туплай. Ошо эштең һөҙөмтәһе булып, 1925 йылда уның "Башҡорт тарихы" тигән китабы донъя күрә. Был хеҙмәтендә ул боронғо дәүерҙәрҙән алып хәҙерге көндәргә, йәғни Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһы барлыҡҡа килгән ваҡытҡа тиклем башҡорт халҡының тарихына байҡау яһай.

Юрмый башҡорттарынан сыҡҡан тағы бер күренекле шәхес - яҙыусы һәм дәүләт эшмәкәре Афзал Таһиров. Ул 1890 йылда Бөгөлмә өйәҙенең Абдрахман ауылында (хәҙерге Татарстандың Әлмәт районы) тыуған. 1931 йылда Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитетының рәйесе итеп һайлана. 1934 йылда Башҡортостан Яҙыусылар союзын ойоштора һәм уның тәүге рәйесе итеп һайлана, "Һалдаттар", "Ҡыҙыл гвардиясылар", "Ҡыҙыл армиясылар" исемле роман-трилогия яҙа.

Яҙыусы, драматург Фазыл Туйкин да - шулай уҡ Юрмый ырыуы башҡорттарының күренекле вәкиле. Ул 1887 йылда Бөгөлмә өйәҙенең Зәй-Ҡаратай ауылында тыуған (хәҙерге Татарстандың Лениногорск районы). Ул күп кенә әҫәрҙәр яҙа. Башҡорт халыҡ ижады өлгөләрен туплай. Фазыл Туйкиндың иң күренекле әҫәре 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан башҡорт яугирҙарына бағышлана, "Ватан ҡаһармандары" исемле тарихи пьеса яҙа. Унда башҡорт яугирҙарын данлай. Уның ағаһы Кәбир Туйкин да яҙыусы булараҡ таныла.

Советтар Союзы Геройы Фәйзулла Әһлединов та - юрмый башҡорттарынан. Ул 1915 йылда Минзәлә өйәҙенең Һаҫыҡкүл ауылында (хәҙере Татарстандың Аҙнаҡай районы) тыуған. Һуғыш ваҡытында взвод командиры ярҙамсыһы булып хеҙмәт итә. 1943 йылда Днепрҙы аша сыҡҡанда күрһәткән батырлығы өсөн Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. Шулай итеп, юрмый ырыуы башҡорттары үҙенең күренекле шәхестәре менән дан тота. Улар - башҡорт халҡының тарихында яҡты эҙ ҡалдырған ир-уҙамандар.

Уҙған аҙнала Баҡалы ауылында ошо данлы Юрмый ырыуының йыйыны үтте. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары менән осрашыуҙан балалар ҙа ситтә ҡалманы - "Тамыр" телеканалы һәм "Аҡбуҙат" балалар журналы коллективы, "Мәргән уҡсы" хәрәкәте етәксеһе Юлай Ғәлиуллин улар менән Мостафа ауылында осрашып, төрлө уйындар ойошторҙо, Нурбостан һәм Шумер йәнһүрәттәрен күрһәтте, теләүселәр өсөн уҡ атыу буйынса оҫталыҡ дәресе, һуңынан яңы өйрәнгән мәргәндәр араһында ярыш үткәрҙе.

Ә был ваҡытта ололар ырыу йыйынында артабан тупланып, бергә-бергә эш итеү маҡсатында мөһим мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләште. Улар Өфөнән килгән ғалимдар менән бер рәттән, ырыуҙаштары - тыуған яҡты өйрәнеүселәр, шәжәрә төҙөүселәр, төбәк башҡорттары тарихын тикшереүселәрҙең сығыштарын тыңланы. Йыйын һуңында ырыу советы һәм уның башлығын һайланы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡарамағындағы Геральдика комиссияһы тарафынан әҙерләнгән герб буйынса фекер алышып, уны һәм ырыу ҡарарын ҡабул итте.

Юрмый ырыуы Ырыу советы рәйесе итеп Мостафа ауылы мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Эльмира Насырованы һайланы, советҡа ырыу вәкилдәренән тыш, республиканың билдәле шәхестәре лә индерелде. Улар араһында Баҡалы районының почетлы гражданы, "Баҡалы" яҡташтар ойошмаһы рәйесе Рауил Кәримов, билдәле шағирә, Аҡбуҙат балалар журналы баш мөхәррире Лариса Абдуллина, Өфө дәүләт нефть техник университеты ректоры, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы Айрат Шаммазов бар.

Ырыу ҡарарына билдәле башҡорт яҙыусыһы Нәжип Асанбаевтың исемен мәңгеләштереү; башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектына иғтибарҙы арттырыу; 112-се Башҡорт атлы дивизияһында хеҙмәт иткән юрмый ырыуы вәкилдәренең исемдәрен тергеҙеү, ырыу йәштәренең төрлө республика һәм халыҡ-ара сараларҙа ҡатнашыуҙарына булышлыҡ итеү һәм башҡа тәҡдимдәр индерелде.

ИНТЕРНЕТТАН



# АХ, ХУШ ЕҪТӘР!

■ Япония ғалимдары ҡайһы бер еҫтәрҙең кеше сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһауын, хатта ҡандың химик составын үҙгәртергә һәләтле булыуын раҫлаған. Мәҫәләң, стресс ваҡытында үҙенә оҡшаған эфир майының еҫе көсөргәнештән арындыра, тынысландыра, депрессиянан ҡотҡара. Бер төркөм ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, лимон, манго, ала миләүшә еҫе тап ошо сифаттарға эйә.

■ Сальмонелла кеүек хәүефле бактериялар печенье менән крекерҙарҙа ярты йылға тиклем йәшәй, тип белдерә Америка ғалимдары. Тикшеренеүҙәрҙә бактерияның ағыуланыуға килтергән 5 төрө ҡатнашҡан. Белгестәр крекерҙар өсөн тәғәйенләнгән сырға һәм ер сәтләүеге майына, шулай уҡ печеньеның шоколадтан һәм ванилиндан торған өҫтәмәләренә бактерия ҡушҡан һәм уларҙан сэндвичтар яһаған. Сэндвичтар Цельсий буйынса 25 градус температурала һаҡланған. Ғалимдар ваҡыты-ваҡыты менән уларҙағы бактерияларҙың торошон тикшергән. Әммә ярты йылдан һуң да уларҙың үҙҙәренең йәшәү һәләтен юғалтмауы ғалимдарҙы ла аптыратҡан. Хәҙер улар ҡоро аҙыҡтарҙың бар төрҙәрен дә тикшереп ҡарарға йыйына.

■ Оҙаҡ йоҡлаһаң, баш мейеһе әүҙемлеге түбәнәйә. Шуға ла оҙаҡ йоҡлау сәләмәтлек өсөн зыянлы, тип белдерә ғалимдар. Һынауҙарҙа 45 йәштән өлкән 230 кеше ҡатнашҡан. Тәүлегенә 9 сәғәт йоҡлаған һәм етмәһә, аҙ хәрәкәтләнгән кешеләрҙең организмы тәмәке тартыу йә араҡы эсеүҙән күргән зыянға тиң, имеш. Былдай йәшәү рәүеше алып барыусылар араһында иртә үлем хәүефе 4 тапҡырға юғары. Ә баш мейеһенең әүҙемлеге түбәнәйеүе депрессияға килтереүе ихтимал икән. Тәүлегенә 11 сәғәткә тиклем йоҡлаусы ҡатын-ҡыҙҙар балаға уҙа алмай яфалана.

■ Хәтерҙе, тиренең, сәстәрҙең торошон яҡшыртыу өсөн төрлө витаминдарҙы йыш ҡабул итәһегеҙме? Белгестәр билдәләүенсә, кеше витаминдарҙы аҙыҡ-түлек менән дә етерлек ала, шуға ла өҫтәмә рәүештә витаминдар эсеүҙең кәрәге лә юҡ. Гарвард медицина мәктәбе ғалимдары 120 мең кешенең ауырыу тарихын өйрәнгән. Тикшереү өсөн Е витаминын алғандар. Ғалимдар әйтеүенсә, был витаминды күпләп ҡулланыу баш мейеһе ҡан тамырҙарының зарарланыуына - инсультҡа килтереүе ихтимал. Ошондай уҡ тикшеренеүҙәр Швецияла ла үткән. Ул саҡта ғалимдар А витаминының артыҡ булыуы үпкә яман шешенә, Е витаминының инсультҡа килтереүен асыҡлаған.

■ Йель университеты (АҠШ) ғалимдары асыҡлауынса, медитация психик ауырыуҙарҙы, шул иҫәптән шизофрения һәм аутизмды профилактикалау өсөн иң яҡшы сара булып тора. Невролог Джадсон Брюэр медитация ваҡытында баш мейеһе ҡабығы әүҙемлеген тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән. Оҙайлы ваҡыт медитация менән шөғөлләнеүселәр сит йоғонтоға бирелеп бармай, улар үҙҙәренең хәлен дөрөҫ баһалай ала. Шизофрения һәм аутизм менән яфаланыусы пациенттарға үҙҙәре тураһындағы уйҙар тынғы бирмәһә, медитация былдай уйҙарҙы ситкә ҡыуып, күберәк әлеге ваҡытта тирә-яҡта барған ваҡиғаларға йүнәлтергә мөмкинлек бирә.

ТАРИХ ҺӨЙЛӘЙЕМ

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров Мәләүез районының Воскресенск ауылында булып, ундағы XVIII быуаттағы тарихи ҡораманы - баҡыр иретеү заводы бинаһын ҡараны. "Заводты беҙҙең ата-бабалар төҙөгән. Уның мөһабәт архитектураһы бөгөнгәсә һаҡланып ҡалған. Был ҡорама буйынса күҙаллаған пландарыбыҙ бар, һәр хәлдә, был урын киләсәктә турист Мәккәһенә әйләнергә тейеш" , - тине Радий Фәрит улы.**

# БЫЛ АУЫЛДА...

## баҡыр заводы эшләгән



Эйе, бөгөн, ҡасандыр кирбестән төҙөлгән мөһабәт, ғорур стеналары ғына ҡалған, Воскресенск (Пугачев) баҡыр иретеү заводы ситтән килеүселәрҙе үҙенә саҡырып тора кеүек. Тирә-яҡ тарихына туранан-тура ҡағылышы булған был тарихи ҡомартҡы янында булған һайын уның стеналарына ҡағылһам, бында бер нисә быуат элек ошо бинаны төҙөгәндә михнәт күргән кисәге крәҫтиәндәр, бөгөн заводҡа беркетелгән эшселәрҙең, аһ-зарын тоям, ишетәм кеүек. Завод менән танышыу көтмәгәндә килеп сыҡты. СССР тип аталған ҙур илдә йәмле бер апрель иртәһендә коммунистик өмә бара ине. Тирә-йүнде йыйыштырыуға Воскресенск халҡы ла бөтә ауылы менән сыҡҡан. Урындағы бер тракторсы картуф баҡсаһы һөрә торған һабанын тағып, завод биләмәһе янынан үтеп барышлай, ҡоралмалды яңылыш "эшкә" ҡуша, төрәндәр нимәгәлер эләгеп ҡала. Быға аптыраған механизатор, тракторын туҡтатып, төшөп ҡарай. Ер аҫтынан ҙур булмаған ике тимер мискә килеп сыға. Тирә-яҡта өмәлә йөрөгәндәр йүгереп килеп етә, һауыттарҙы лом менән көскә асып ҡарайҙар. Унда XVIII быуат аҙағында ҡойолған биш тинлек баҡыр аҡсалар була. Шул ваҡыт эргәләренән үтеп барған ауыл хужалығы инспекторына күрһәтәләр, уныһы, минең нумизмат икәнемде иҫенә төшөрөп, һигеҙ монетаны миңә алып килә. Аҙаҡ бөтә аҡсаны тейешле органдар йыйып алды. Һуңынан белеүемсә, Салауат Юлаевҡа тотҡонда көнөнә биш тинлек ризыҡ биргәндәр икән. Бына шулай башланып китте минең Мәләүез районы биләмәһендәге тарихи ҡомартҡыларҙың береһе менән танышыу.

Воскресенск баҡыр иретеү заводын төҙөү 1734 йылда, Иван Кириллов етәкселегендәге тау-разведка экспедицияһынан башлана. Экспедиция һөҙөмтәһе буйынса, И.Кирилловҡа аҡса бүленә һәм башҡорт ерҙәрендә буласаҡ беренсе металлургия заводы төҙөү бурысы йөкмәтелә. Төҙөлөш тамамланып, заводты эксплуатацияға ебәреп өлгөрмәй ҡалалар, ошо уҡ исемле йылғала төҙөлгән плотина, бер нисә рудник һәм заводтың ҡайһы бер ҡоролмалары 1735-1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалында өлөшләтә емерелә. Ихтилал тамамланғас, 1740 йылда Кириллов урынына Татищев тәғәйенләнә. Яңы етәксе бинаны тергеҙеүҙән һәм уны производствоға ебәреүҙән баш тарта, сөнки бынан коммерция күҙлегенән ҡарағанда файҙа күрмәй - баҡыр рудаһы сеймалы заводтан алыҫ ҡына урында ҡаҙыла һәм уны бында ташыу иҡтисади яҡтан файҙалы булмай. Баҡыр иретеү заводы эшһеҙ бер нисә йыл буш тора. Ырымбур губернаторы Иван Неплюев Воскресенск металлургия заводын шәхси хужалар ҡулына күсереү тураһында ҡарар ҡабул итеүгә ирешә. Сауҙагәр Иван Твердышев Воскресенск заводын тергеҙергә теләк белдерә. Заводты уға биреү тураһында Сенат указы 1744 йылда донъя күрә. Иван Борисович кейәүе И. Мясников менән бер йылдан заводты тергеҙә, ләкин элекке урында түгел, яңы ерҙә, Табынскиҙан 90 саҡырым көньяҡта, Тор йылғаһы буйында. Был төҙөлөштә сауҙагәр Табынскиҙағы элекке завод ҡоралмаларын ҡуллана, алдаҡ юл менән Тор йылғаһы буйындағы бик күп башҡорт ерҙәрен һатып ала. Ауыл баҡыр заводы исемен ала. Ул завод менән бергә төҙөлә башлай һәм ҙур үсеш ала - беренсе торлаҡ эшселәргә тәғәйенләнә. Иван Твердышевтың эше бик уңышлы булып сыға - уның металлургия заводы Рәсәй сәнәғәтендә иң эре предприятиеларҙың береһе булып китә. Тәүге йыл заводта 15 мең бот (245,7 тонна) баҡыр етештерелә. Продукцияның ҙур өлөшө хәрби сәнәғәттә ҡулланыла, унан артиллерия ҡоралдары һәм снарядтар ҡоялар.

Завод тарихында билдәле бер ваҡиға ҙур урын алған. Ул Емельян Пугачев етәкселегендәге 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиән һуғышы менән бәйле. 1773 йылдың 12 октябрендә баҡыр иретеү заводы Пугачев ғәскәре тарафынан баҫып алына. Предприятиеның мөһим стратегик объект икәнен иҫәпкә алып, Пугачев армияһы үҙ арсеналына үҙгәртеп ҡора. Пугачевтың көрәштәше И.Антипов етәкселегендә баҡыр урынына туп һәм уға снарядтар етештерелә башлай. Биш ай эсендә Антипов етәкселегендә 15 артиллерия ҡоралы һәм күпләп снаряд етештерелә. 1774 йылдың мартында уны Пугачев Бердск биҫтәһенә ебәрә һәм ул унда һәләк була (Воскресенск ур-таһында матурлап буралған ҡойонан сыҡҡан һыуҙы ауыл халҡы Пугачев шишмәһе тип йөрөтә).

Емельян Пугачев киткәс, завод талана һәм емерелә, ә элекке хужаһы сауҙагәр Иван Твердышев вафат була. Металлургия етештереүҙе уның ҡустыһы Я. Твердышевҡа һәм кейәүе И. Мясниковҡа башҡарырға тура килә. 1783 йылда завод, хужаһы вафат булыу сәбәпле, эштән туҡтай. Мясниковтың ҡыҙҙары аталары мөлкәтен бүлешә һәм Воскресенск заводы Иван Мясниковтың ҡыҙы Дарьяға ҡала, был ваҡытта ул ябай офицер Александр Пашков ҡатыны була. Әйткәндәй, Дарья Ивановна үҙ эшселәре өсөн яңы ауыл төҙөтә. Бөгөн Ырымбур-Өфө трактында Маҡтаулы (Мәкәтәүле) йылғаһы ярында урынлашҡан Дарьино ауылы нәҡ уның исемен йөрөтә лә инде. Александр Ильич Пашков генерал-майор дәрәжәһе алып, заводтың тулы хоҡуҡлы хужаһына әйерелә. Уның вафатынан һуң Воскресенск металлургия заводын ҡустылары Николай һәм Сергей етәкләй.

1870 йылда Воскресенск баҡыр иретеү заводы Англия компанияһы етәкселегенә күсә. Был осорға инде рудниктарҙа сеймал бөтә һәм яңы етәкселек уны алыҫ ерҙәрҙән ташырға мәжбүр була. Быныһы үҙкиммәтте ҡырҡа күтәрә. 1891 йылда инглиздәр заводты һата, ә инде биш йылдан предприятие баҡыр етештереүҙе туҡтата. 1902 йылда Рәсәйҙә сәнәғәт кризисы башлана һәм ул Воскресенск металлургия заводын да урап үтмәй. Шул уҡ йылда предприятие эшмәкәрлеген туҡтата.

Бөгөн Воскресенск ауылы халҡы ике мең кешегә лә тулмай. 1937 йылда ошо исемдәге район булдырыла, ауыл район үҙәгенә әйерелә, ләкин Н.Хрущевтың күп һанлы үҙгәртеп ҡороуҙары осоронда, 1956 йылда ул юҡҡа сыға. Тәбиғәттең иң матур урындарының береһен һайлаған тораҡ пунктында йәшәүселәрҙең күпселеген әле пенсионерҙар тәшкил итә. Воскресенск ауылы бөгөн үҙенең икенсе объекты менән дә дан тота - Воскресенск картина галереяһы. Ул билдәле Рәсәй рәссамдары, В.И.Суриков исемендәге Мәскәү дәүләт художество институты ҡарамағындағы махсус художество мәктәбенең элекке тәрбиәләнеүселәре, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда, 1941-1943 йылдарҙа, Воскресенск ауылына эвакуацияланған Мәскәү рәссамдары инициативаһы менән 1970 йылда ойошторола. Уның башында Мәскәү рәссамдары - "воскресендар" В.А. Бабицын (1926-2000) һәм Р.А. Кобозевтар (1927-1997) тора. Филиал 1971 йылдың 6 ноябрендә асыла, 1979 йылдан М.В. Нестеров исемендәге Башҡортостан дәүләт художество музейы филиалы. Музей ауылдың уртаһында Тор йылғаһы ярында, Воскресенск баҡыр иретеү заводы ҡалдыҡтары һәм XVIII быуатта төҙөлгән Воскресенск сиркәүе - федераль кимәлдәге мәҙәни мираҫ объекттары - янында, Ватандың юғары наградаларына эйә булған, билдәле хирург, оҙаҡ йылдар Воскресенск дауаханаһында эшләгән Эргард Корлейстың элекке йортонда урынлашҡан. Коллекция нигеҙен Мәскәү "воскресенск" рәссамдарының 1970 йылда биргән һынлы сәнғәт, графика һәм скульптураһы 126 бүләге, 1941-1945 йылдарҙа ижад иткән 60 рәсемен дә ҡушып биргән 1987 йылғы 137 картинаһы тәшкил итә. Мәскәү рәссамдары-"воскресендарҙың" 349 экспонаты һаҡлана бөгөн музейҙа.

**Сәйфулла ӘМИРОВ.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

✓ *"Әгәр Аллаһ беҙгә байлыҡ бирһә саҙаҡа бирер инек һәм беҙ ҙә изгеләрҙән булыр инек, - тип, Аллаһ ҡаршыһында ант итеүселәр ҙә бар. Ләкин уларға байлыҡ бирелгәс, һаранланып, биргән анттарын боҙҙолар..."*



*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# БАЙЛЫҠ ХӘЙЕРЛЕМЕ?

**Кеше йыш ҡына: "Ошо ауырлыҡтар үтһә, дингә килер инем; һауыҡһам, намаҙ уҡыр инем; байыҡһам, зәкәт түләр, байлығымды изге юлда сарыф итер инем", - тип вәғәҙә итә. Әммә Аллаһы Тәғәлә еңеллек, һаулыҡ, байлыҡ биргәндән һуң был вәғәҙәләрен онота. Түбәндәге хәҙис ана шундай хәл хаҡында бәйән итә.**



Хәҙистәрҙең береһендә Сәғләбә ибн Хатиб әл-Ансари тигән кеше Мөхәммәт бәйғәмбәргә килә лә: "Аллаһы Тәғәләнән миңә байлыҡ бирһен тип һора әле", - тип мөрәжәғәт итә. "Хәсрәт һиңә, Сәғләбә. Бәләкәй генә байлыҡҡа шөкөр итеү күтәрә алмаҫлыҡ күп малдан хәйерлерәк бит", - тип яуаплай уға Аллаһ Рәсүле. Ләкин Сәғләбә тағы ла мөрәжәғәтен ҡабатлай. Бәйғәмбәр: "Аллаһ бәйғәмбәренә оҡшағың килмәйме ни? Әгәр ҙә теләһәм, миңә алтын һәм көмөш тауҙар бирелер ине", - ти. Әммә Сәғләбә: "Һине хәҡиҡәт менән ебәреүсе исеме менән һорайым. Әгәр ҙә доға менән мөрәжәғәт итһәң һәм Аллаһы Тәғәлә миңә байлыҡ бирһә, мотлаҡ һәр мохтажға уға тейешлене бирәсәкмен", - тип ныҡыша. Аллаһ Рәсүле Раббыһына: "Йә, Аллаһ, Сәғләбәгә байлыҡ бир", - тип доға ҡыла.

Ошо хәлдән һуң Сәғләбә ҡуйсылыҡ менән шөғөлләнә башлай һәм уның һарыҡтары селәүсен шикелле үрсей, күбәйеп китә. Мәҙинә ҡалаһы тығыҙ була башлай һәм Сәғләбә ҡала ситендәге бер далаға күсә. Элек йәмәғәт намаҙҙарының береһен дә ҡалдырмаһа, хәҙер инде өйлә һәм икенде намаҙҙарына ғына килә башлай. Бер аҙҙан уның һарыҡтары тағы ла артып китә һәм ул тағы йыраҡҡараҡ күсенә. Йәмәғәт менән тик йома намаҙын ғына уҡый. Тағы ла күпмеләр ваҡыттан һуң уның ҡуй малы тағы ла арта, ул бер намаҙға ла йөрөмәй. Бәйғәмбәр юлсы-мосафирҙарҙан Сәғләбә менән нимә булыуы хаҡында белешә. Уға әлеге кешенең ҡуйҙары күбәйеүе, Мәҙинәлә йәшәүе тығыҙ булып, алыҫҡараҡ күсенеп китеүе, намаҙҙарға йөрөүҙе туҡтатыуы хаҡында һөйләйҙәр. Аллаһ рәсүле: "Хәсрәт һиңә, Сәғләбә! Хәсрәт һиңә!", - ти.

Бер аҙҙан Аллаһы Тәғәлә: "Эй, Мөхәммәт, мосолмандарҙың малдарынан (мәғлүм бер күләмдә) саҙаҡа ал...", - тигән аятты ебәрә. Мөхәммәт бәйғәмбәр ике кешене Сәғләбә һәм тағы ла берәүҙән зәкәт алырға ебәрә. Зәкәт йыйыусылар тәүҙә Сәғләбәгә килә. Уға Бәйғәмбәрҙең хатын уҡыйҙар һәм зәкәт биреүен һорайҙар. Сәғләбә: "Мин был турала хәбәрҙар түгел. Юлығыҙҙы дауам итегеҙ, эшегеҙҙе тамамлағас, миңә килегеҙ. Ни хәл ҡылырымды әйтермен", - ти. Зәкәт йыйыусылар Бәйғәмбәр әйткән икенсе кешегә баралар. Ул иң яҡшы дөйәһен зәкәт итеп бирә. Эштәрен тамамлағас, ҡабаттан Сәғләбәгә киләләр. Ул Бәйғәмбәрҙең хатын ҡабаттан уҡыуҙарын һорай. Тыңлап бөткәс: "Барығыҙ, бер аҙ уйлармын да хәл итермен", - тип теге кешеләрҙе буш ҡул менән ҡайтарып ебәрә. Зәкәтселәр Бәйғәмбәр янына ҡайта. Ни булыуын ишетмәҫ элек үк Аллаһ Рәсүле: "Сәғләбәгә хәсрәт!", - тип әйтә. Һуңынан зәкәт йыйыусылар уға Сәғләбә хаҡында һөйләйҙәр. Шул ваҡыт Аллаһы Тәғәлә: "Улар араһында: "Әгәр Аллаһ беҙгә байлыҡ бирһә, һис шикһеҙ, саҙаҡа бирер инек һәм, әлбиттә, беҙ ҙә изгеләрҙән булыр инек, - тип, Аллаһ ҡаршыһында ант итеүселәр ҙә бар. Ләкин Аллаһ хазинаһынан уларға байлыҡ бирелгәс, һаранланып, Аллаһ әмеренән баш тартып, биргән анттарын боҙҙолар...", - тигән аяттар ебәрә ("Тәүбә" сүрәһе 75-76-сы аяттар).

Сәғләбәгә әлеге аяттар хаҡында еткерәләр. Ул Аллаһ рәсүле янына килеп, зәкәтен ҡабул итеүен һорай. Ләкин Бәйғәмбәр: "Аллаһы Тәғәлә һинең зәкәтеңде алыуҙы тыйҙы", - тип, уны алыуҙан баш тарта. Сәғләбә сыға ла башына тупраҡ ҡоя башлай. Бәйғәмбәр уға: "Был һинең ғәмәлең! Һораған саҡта һин баш тарттың", - ти. Сәғләбә шулай итеп өйөнә ҡайтып китә. Был донъянан киткәнсе Бәйғәмбәр уның зәкәтен алмай. Мөхәммәт бәйғәмбәр әхирәткә күскәндән һуң Сәғләбә зәкәтен хәлиф булған Әбү Бәкергә, унан һуң Ғүмәргә, аҙаҡ Ғосманға алып килә. Ләкин уларҙың береһе лә уның зәкәтен ҡабул итмәй.

**Арыҫлан ИБРАҺИМОВ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



## НИ ТЕЛӘГӘНЕҢДЕ БЕЛ

Электр энергияһы кеүек үк, аҡыл да - файҙалы көс, ул шулай булған һәм мәңге шулай буласаҡ. Электр энергияһы - ул магнит көсө. Тормош электр энергияһы менән тулы. Был һинең тәнеңә лә ҡағыла. Һин был фактты зиһенеңә һеңдерергә һәм үҙеңдең тартыу һәләтеңде тормошта үҙең теләгән әйберҙәрҙе тартыу өсөн файҙаланырға өйрәнергә тейешһең.

Психик магнетизм законы раҫлауынса, һин айырыуса ныҡышмалылыҡ менән уйлаған әйберҙе үҙеңә тартаһың. Психик магнетизм законы тәбиғи магнетизм законына оҡшаш. Мәҫәлән, магнит тик тимерҙән генә яһалған һәр предметты үҙенә тарта, ҡалған бөтә материалдарға ул битараф. Әйбер үҙенә оҡшаш әйбергә тартыла.

Төп уйыбыҙ нимәгә йүнәлтелгән - ауырыуҙы, әллә сәләмәтлекме, уңышмы, әллә уңышһыҙлыҡмы, муллыҡмы, әллә етешһеҙлекме, һөйөүме, әллә нәфрәтме - иғтибар объектың һиңә йүнәлтеләсәк. Тик нимә теләүеңде аныҡ белеү бик мөһим. Кире осраҡта һин теләгән һөҙөмтәңә өлгәшә алмаясаҡһың.

Үҙенең ни теләгәнен аныҡ аңламаған кеше ынтылыштарына тап килмәгән әйберҙәрҙе һәм ваҡиғаларҙы үҙенә йәлеп итә. Әлбиттә, һәр кеше уңыш, дуҫтар, бәхет, именлек һәм тыныслыҡ теләй, ләкин яңылыш фекерләү арҡаһында был әйберҙәргә теләгәнсә өлгәшелмәй. Ун мең кеше араһынан берәү генә быны тулыһынса аңлай.

Уңышҡа ирешергә бөтәһе лә теләй, әммә төптән уйлап ҡараһаң, улар быны теләмәй. Улар үҙҙәрендә уңышҡа йүнәлтелгән шәхес тәрбиәләмәй. Күптәребеҙ уңыш һөҙөмтәләрен булдырырға теләй, ләкин уға илтеүсе яуаплылыҡты йөкмәргә теләмәй. Ә бит бөгөнгө белем, күнекмәләр, танып белеүҙәр менән уңыш яулауы әллә ни ауыр түгел. Ләкин уңыш кешене ҡурҡыта һәм улар уңышһыҙлыҡҡа дусар була, сөнки зиһен төпкөлөндә шуны теләй.

Дуҫлашырға, һөйөп-һөйөлөргә теләйем, тип раҫлаған кешеләр бар, әммә уларҙың иғтибарын тәнҡит, нәфрәт, көнсөллөк, үсләшеү кеүек әйберҙәр нығыраҡ биләй. Танылыу һәм популярлыҡ яуларға теләйем, тип раҫлай ҡайһы берәүҙәр, ләкин үҙҙәре үк яңғыҙ ҡалыуҙы хуп күрә. Был исемлекте әллә күпме дауам итергә мөмкин. Бер ябай фактты иҫеңдән сығарма: төп иғтибарыңды ысынлап теләгән предметҡа йүнәлт, һәм ул психик магнетизм законына ярашлы, һиңә тартыласаҡ. Нимә теләгәнеңде, нимәгә ынтылғаныңды аңың менән тойоп белергә өйрән.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

*ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТТӘР*

# НӘУАДИР ТӘРЖЕМӘҺЕ

**XIX-XX быуат саттарында милли мәҙәниәт өлкәһендә тәрән эҙ ҡалдырыусыларҙың береһе, билдәле башҡорт уҡымышлыһы Хәбибназар Үтәки ғәрәп әл-Ҡолйубиҙың "Нәуадир" йыйынтығын төрки теленә ирекле тәржемәлә баҫтырып сығара. Уның "Нәуадир тәржемәһе" китабы XIX-XX быуат башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең айырылғыһыҙ биттәрен тәшкил иткән әһәмиәтле ҡомартҡы булып тора. Ошо китаптан ҡайһы бер фәһемле хикәйәттәрҙе "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ.**

### Изгеләрҙең ғибәҙәттәре

Ғосам бин Йософ тигән кеше Хатим әс-Сәм хәҙрәттәренең мәжлесенә килеп, уға ҡаршы һөйләү ниәтенән: "Ярабби, Ғабдрахман, һин намаҙҙы нисек уҡыйһың?" - тип һорай икән. Хатим әс-Сәм: "Намаҙ ваҡыты етһә, эс һәм тыш яҡтан таҙарынам, унан һуң шәриғәтсә намаҙ ҡылам", - тип яуаплаған. Ғосам бин Йософ: "Эсеңде нимә менән сафлайһың?" - тип тағы ныҡышҡан. Хатим әс-Сәм хәҙрәттәре: "Тәүбә һәм үкенеү, донъянан биҙеүҙе, халыҡтың маҡтауҙарын, улар менән етәкселек итеүҙе, хөсөттө, тәкәбберлекте ситкә ҡуйыу - ошо ете ғәмәл менән эсемде паклайым. Һуңыраҡ мәсеткә барам, ҡиблаға ҡаршы торам, гүйә, ҡәғбәлә булам һәм Аллаһы Тәғәләне күрәм, тип хис итәм. Йәннәт уң яғымда, тамуҡ һул яғымда, ғазраил арҡа тарафта, тип тә хис итәм. Аяғым менән, гүйә, сиратҡа баҫам һәм был намаҙ һуңғы намаҙ, икән тип хис итеп, шәриғәтсә намаҙ - рөкүғ ҡылам. Түбәнселек менән сәждә ҡылам, уҡыйым, ихласлыҡ менән сәләм бирәм. Утыҙ йылдан ашыу минең намаҙым ошолор", - тип яуаплаған. Бынан һуң Ғосам бин Йософ: "Әй, Әбү Ғабдрахман, был рәүешле намаҙ ҡылыуға һинән башҡа кешенең ҡеүәтенән һәм көсөнән килмәҫ", - тип илап ебәргән, ти.

### Һиммәт тураһында

Бер ир мәсеткә инеп йоҡлаған. Уның билендә аҡса янсығы булған. Йоҡоһонан уянғас ҡараһа, янсығы һәм аҡсаһы юҡҡа сыҡҡан да ҡуйған. Ул: "Бында һинән башҡа кеше юҡ, минең аҡсамды һин алғанһың, әлбиттә", - тип, мәсеттә намаҙ уҡып ултырған Йәғәфәр Садиҡ хәҙрәттәренә дәғүә белдергән. Йәғәфәр Садиҡ хәҙрәттәре: "Аҡсаң күп инеме?", - тип һорағас, был ир: "Мең динар", - тигән. Йәғәфәр был ирҙе өйөнә алып ҡайтып, ҡулына мең динар аҡса биреп ебәргән. Был ир үҙенең ултырҙаштары янына ҡайтып, үҙе менән булған хәлде һөйләп биргән. Быны ишеткәс, иптәштәре: "Һинең аҡсаң беҙҙә, шаяртып ҡына алғайныҡ. Һиңә мең динар аҡса биргән кеше Рәсүлулланың нәҫелдәренән Йәғәфәр Садиҡ булыр. Тиҙ генә бара һал, аҡсаһын үҙенә кире бир", - тигәндәр. Әлеге әҙәм шунда уҡ уның янына йүгереп бара ла: "Әй, олуғ кеше, хаталыҡ миндә булған, мин һеҙҙең аҡсағыҙҙы килтерҙем", - тигән. Йәғәфәр Садиҡ хәҙрәттәре иһә: "Мин һис ваҡыт ҡулымдан сығарған аҡсаны кире алғаным юҡ", - тип аҡсаһын алмаған, ти. Аллаһы Тәғәлә унан риза булһын.

**Илшат ЯНБАЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**



**15 МАРТА**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Премьера года. "Угрюм-река". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Познер. [16+]

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Склифосовский". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Небеса подождут". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-5". [12+]
4.05 Т/с "Черчилль". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Башкорт йыры". [12+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Спортивная история. [12+]**
**22.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**23.00 Кустәнәс. [12+]**
**23.30, 4.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Т/с "Долгий путь домой". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Цыпленок из букваря". [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

**16 МАРТА**
**ВТОРНИК**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.35 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Премьера года. "Угрюм-река". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф "Великий пост". [0+]

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Склифосовский". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Небеса подождут". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-5". [12+]
4.05 Т/с "Черчилль". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Холостяк". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Башкорт йыры". [12+]**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Мусорная реформа. [12+]**
**21.00 По сути дела... [12+]**
**22.00, 5.00 Тормош. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Т/с "Долгий путь домой". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Перед свадьбой". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

**17 МАРТА**
**СРЕДА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Премьера года. "Угрюм-река". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 "101 вопрос взрослому". [12+]

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Склифосовский". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Небеса подождут". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-5". [12+]
4.05 Т/с "Черчилль". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Холостяк". [12+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Преград.net. Мобильная помощь на дому. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Спортивная история. [12+]**
**17.00 Дорожный патруль. [16+]**
**17.30 Министерство правды.**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Т/с "Долгий путь домой". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Не улетайте, журавли!" [12+]**
**4.30 Башкорттар. [6+]**
**5.00 Үткән гүмер. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

**18 МАРТА**
**ЧЕТВЕРГ**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Премьера года. "Угрюм-река". [16+]
22.30 Большая игра. [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф "Гараж особого назначения". [16+]

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Склифосовский". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Небеса подождут". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия-6". [12+]
4.05 Т/с "Черчилль". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Холостяк". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 100 имен Башкортостана. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Башкорт йыры". [12+]**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Башкорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Т/с "Долгий путь домой". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Судьба выбранная мной". [12+]**
**4.30 Автограф. [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

**19 МАРТА**
**ПЯТНИЦА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Жить здорово! [16+]
10.55, 2.20 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.10 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.50 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.05 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Д/ф Премьера. "Я - Джеки О". История американской королевы". [12+]
1.30 Т/с "Белая ночь, нежная ночь..." [16+]

**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Близкие люди. [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Юморина. [16+]
0.10 Х/ф "Сәләми". [12+]
3.20 Т/с "Тайны следствия-6". [12+]
4.54 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Д/ф "Дмитрий Певцов. Я стал другим". [12+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр".[16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 4.00 Башкорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Курай даны". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 4.30 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башкорт йыры".**
**20.00 История одного села. [12+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Т/с "Долгий путь домой". [12+]**
**2.15 Спектакль "Пылкие любовники". [12+]**
**5.15 "Весело живем!" [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

**20 МАРТА**
**СУББОТА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.05 Д/ф Премьера. "Роман Мадянов. С купеческим размахом". [12+]
11.15, 12.10 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Х/ф "Верные друзья". [0+]
15.55 Д/ф "Я - Джеки О". История американской королевы". [12+]
17.30 "ДОстояние РЕспублики". Лучшее. [12+]
19.30 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 Премьера. "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Х/ф Премьера. "Агент Ева". [18+]
0.50 Т/с "Белая ночь, нежная ночь..." [16+]
1.40 Модный приговор. [6+]
2.30 Давай поженимся! [16+]
3.10 Мужское / Женское. [16+]

**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.15 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.15 Доктор Мясников. [12+]
13.20 Т/с "Родительское право". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Здравствуй, сестра". [12+]
1.40 Х/ф "Слабая женщина". [12+]
4.33 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 "Ете егет". [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [6+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Кустәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән гүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00, 4.00 Концерт группы "Каравансарай" - 30 лет. [12+]**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Ради добра. [12+]**
**19.30, 22.00 Яңы мон. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.30, 1.45 Новости недели (на баш.яз.).**
**23.15 "Башкорт йыры". [12+]**
**0.00 Т/с "Долгий путь домой". [12+]**
**2.30 Спектакль "Посетитель". [12+]**

**21 МАРТА**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00, 6.10 Т/с "Свадьбы и разводы". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая![12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Жизнь других. [12+]
11.20 "Честное слово". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Видели видео? [6+]
14.45 Д/ф "Я - Вольф Мессинг". [12+]
16.40 "Угадай мелодию". [12+]
17.05 Премьера. "Я почти знаменит". Большой финал. [12+]
19.35 "Точь-в-точь". Новый сезон. [16+]
21.00 Время.
22.00 "Точь-в-точь". [16+]
23.10 Т/с Премьера сезона. "Метод-2". [18+]
0.05 Д/с "Их Италия". [18+]
1.45 Модный приговор. [6+]
2.35 Давай поженимся! [16+]
3.15 Мужское / Женское. [16+]

**РОССИЯ 1**

6.05, 3.15 Х/ф "Любви целительная сила". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.15 Парад юмора. [16+]
13.20 Т/с "Родительское право". [12+]
17.45 Ну-ка, все вместе! [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым. [12+]
1.30, 4.35 Х/ф "Предсказание". [12+]

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Курай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [12+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 Нурбостан сәйәхәте. [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 4.15 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Концерт группы "Каравансарай" - 30 лет. [12+]**
**18.00 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**19.00 "Бирешмә!" Церемония вручения детской премии.**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.15 Т/с "Долгий путь домой". [12+]**
**2.00 Спектакль "Дурочка". [12+]**
**4.45 "Млечный путь". [12+]**

*✓ Кеше үҙенең ауырыуҙары тураһында һөйләшергә ярата. Ә үҙе өсөн ауырыуҙар - тормошондағы иң ҡыҙыҡ булмаған ҡара тап.*

*(Антон Чехов).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ЯҘ КИЛӘ!




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**10-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Миләүшә. Нөктә. Умырзая. Трюм. Башмаҡ. Барбарис. Лифт. Ата. Ҡылсыҡ. Елкән. Мамыҡ. Гәрнис. Сикә. Өкө. Йөргөнсө. Таба. Урҙа. Трир. Тибр. Роза. Наян.

**Вертикаль буйынса:** Бәпембә. Терһәк. Ҡуй. Насар. Умарта. Гитара. Мәк. Ландыш. Сама. Суртан. Зебра. Өтөр. Әсә. Ябалаҡ. Гөлбаҙран. Лорнет. Метис. Ҡоҙоҡ. Сыра.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**16 март "Амеля"** (А. Балгазина, Н. Крашенинников). 12+
**18 март "Руди - never off..."** (А. Абушахманов). 12+
**19 март "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), драма. 12+
**20 март "Һауанан ергә тиклем"** (А. Саҙрыев), бәпәй-театр. 0+
**"Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 18.00 12+
**21 март "Әбейүшкә@түщкә.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия. 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**16 март "Башҡорт туйы"** (М. Буранғолов, З. Бураҡаева), романтик драма. 12+
**17 март "Р"-һыҙ ҡалған Мырҙабай"** (З. Фәйзуллина), әкиәт. 11.00 0+
**18 март "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 11.00 0+
**19 март "Үлмәҫбай"** (М. Кәрим), үлемһеҙлек хаҡында хикәйәт. 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**19 март "О чем поет орнамент?"** (В. Аношкин). 12+
**20 март Премьера! "Живи!"** (Р. Сванидзе), Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына арналған спектакль. 18.00 6+
**21 март "Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен). 12.00, 14.00, 16.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**16 март "Сказ про Федота-стрельца"** #Аралашайыҡ проекты. 6+
**19 март Хироко Иноуэ концерты** (орган, Япония). 6+
**21 март "Өфө буйлап"** ғаилә өсөн концерт. 6+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**18 март "Иң матур йырҙарҙы һайлап ҡына"** ("Ашҡаҙар" төркөмө), караоке-концерт. 6+
**20 март "Атты ектем! Айға осам..."** (В. Шукшин), комедия. 12+
**21 март "Покатился мой клубочек"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 6+

## Сибай театр-концерт берекмәһе

**"Донъя матур, донъя шундай матур"** концерт программаһы менән
**15 март** - Иҫәнғол,
**16 март** - Күгәрсен (Ейәнсура районы),
**17 март** - Абҙан (Ейәнсура районы),
**18 март** - Баймаҡ,
**19 март** - Аҫҡар (Әбйәлил районы) ауылдары сәхнәләрендә. 6+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Март (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 15 (2) дүшәмбе | 6:03 | 7:33 | 13:30 | 17:48 | 19:18 | 20:48 |
| 16 (3) шишәмбе | 6:00 | 7:30 | 13:30 | 17:50 | 19:20 | 20:50 |
| 17 (4) шаршамбы | 5:58 | 7:28 | 13:30 | 17:52 | 19:22 | 20:52 |
| 18 (5) кесе йома | 5:55 | 7:25 | 13:30 | 17:54 | 19:24 | 20:54 |
| 19 (6) йома | 5:53 | 7:23 | 13:30 | 17:56 | 19:26 | 20:56 |
| 20 (7) шәмбе | 5:50 | 7:20 | 13:30 | 17:58 | 19:28 | 20:58 |
| 21 (8) йәкшәмбе | 5:48 | 7:18 | 13:30 | 18:00 | 19:30 | 21:00 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# САЛАУАТ ТЕАТРЫ БАШ ҠАЛАЛА

**24 мартта Салауат башҡорт дәүләт драма театры Өфө тамашасыһына танылған башҡорт прозаигы, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ноғман Мусиндың "Ике ир һәм бер ҡатын" повесы буйынса "Ғүмерҙең бер мәле" спектаклен тәҡдим итә. Ул баш ҡаланың М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры сәхнәһендә уйналасаҡ.**

Ноғман Мусиндың тәүге сәхнәләштерелгән әҫәре булыуы менән дә, тамашасыны уйландырыуы менән дә үҙенә йәлеп итә спектакль. Салауат театры хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, былтыр яҙыусы сәхнәләштереүҙе үҙе ҡарап баһалаған да инде. Әйткәндәй, повесть буйынса инсценировканы Зөһрә Бураҡаева яҙған, йәш режиссер Лиана Ниғмәтуллина сәхнәләштергән. Спектакль буйынса ҡуйыусы рәссам Лилиә Хисмәтуллина, композитор Илсаф Вәдүтов, хореограф Ольга Даукаева, яҡтылыҡ рәссамы Евгений Лисицын, вокал буйынса педагог Айгөл Ғайсина ла эшләгән. Ролдәрҙе Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Наҙгөл Иҫәнбаева, Нәүфилә Яҡупова, Гөлфирә Сафиуллина, артистар Нәркәс һәм Мирас Йомағужиндар, Радмир Дәүләтбаев, Әмир Үтәбаев, Риф Мусин, Радик Ғәлиуллин, Гөлфинә Ибәтуллина, Эльвина Мусина һәм Айнур Синағолов башҡара.

Спектакль "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Кесе Ватан мәҙәниәте" проекты сиктәрендә бойомға ашырыла. Сәхнә әҫәре айырыуса персонаждарҙың нескә психологизмы, күңел кисерештәре мөһим булған тамашасылар өсөн ҡыҙыҡлы буласаҡ, тип билдәләй салауаттар.

✓ Ҡыҙ байлығы - күркәм холоҡ, ир байлығы - тәүәккәллек.
(Башҡорт халыҡ мәҡәле).



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҠИССАЛАР ҺӘМ ДОҒАЛАР ЮЛЫ...

**Һуңғы йылдарҙа М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры актерҙарының ижад кисәләре, китап туйҙары гәжәп аһәңле һәм дәррәү үтә. Башҡорт актеры ижадына арналған тәрән эстәлекле күркәм сифатлы баҫмалар нәшер ителә: Гөлли Мөбәрәкова, Таңсулпан Бабичева, Заһир Вәлитов китаптары күҙ алдында. Театрыбыҙҙың йөҙ йыллығы уңайынан рус һәм башҡорт телдәрендә ифрат ҙур күләмле мәҡәләләр, ижади портреттар йыйынтығы хатта Рәсәй күләмендә ҙур баһа алды. Айһылыу Сәғитова менән Гөлсәсәк Саламатова яҙған "Башҡорт академия драма театры. 100 йыл" китабы илебеҙҙә "Йыл китабы" дәрәжәһен яуланы.**




Хөрмәтулла Үтәшевтың яңы китабының исем туйы була, тигән саҡырыу килеп еткәнгә хәтле мин күнелем менән ул китапты байҡай инем. Ни өсөн тигәндә, бер нисә йыл элек Хөрмәтулланың бер туған апаһы Фәриғә Күсәкованың бәләкәй генә китабы ҡулыма килеп эләкте. Йотлоғоп уҡып сыҡтым уны, сарсап барған ерҙән саф шишмә һыуы уртлап, терелеп киткәндәй булдым. Түҙмәнем, ул китапты яҙған Фәриғә апайҙың үҙен барып күрәйем, тип, Таштуғай ауылын эҙләп киттем. Ер менән күкте тоташтырған бейек һырттар аша барҙым, Әҙел ауылына илтә торған тау боролмаһын үттем, Баҡал тигән ауылдың ҡоро үҙәнен аша сыҡтым. Йәнен ялмаған һағышын дүрт тарафҡа таратып, йөрәгенән үлемһеҙ моң һарҡытып йырлаған ҡыҙҙың яҙмышын уйланым. Шул йыр алыҫ офоҡтарҙан ҡаҡлығып, кире күңелгә тулды. Сихри күренеш! Үҙенә әйҙәп йымылдап көлөп ятҡан Таналыҡ һыуы үҙәненә килеп төштөм. Таштуғай ауылына илткән юл мине хыялымда күптән саҡырған һәм ғүмеремдә лә онотолмаҫ бер юл ине. Ҡиссалар һәм доғалар юлы... Хөрмәтулла Үтәшев ошо юл буйында булған донъяуи һәм бәндәүи хәлдәрҙе китабына теркәгән булырға тейеш бит. Бары тик шулай!

Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының Бәләкәй залында серле тынлыҡ. Тамашасылар араһында билдәле шәхестәр күп, барыһынан бигерәк арҙаҡлы башҡорт актерҙары һәм актрисалары сәхнәгә төбәлгән. Һәм был гәжәйеп кисәне башлап, быуаттар аша килгән бер тарих бәйән ителә.

Йылайыр яғы Һаҡмар йылғаһы буйындағы Юлдыбай тирәһендә донъя көткән түңгәүер ырыуы ҡартының бер өйөр йылҡыһы ҡайҙалыр гәйеп була. Эҙләп-эҙләп тә төңөләп бөткәс, өйөрҙө Таналыҡ йылғаһы буйында, түңгәүерҙәрҙең аҫаба ерҙәрендә күреп ҡалалар. Йылҡыларҙы әйҙәп алып ҡайталар, әммә бер аҙҙан малҡайҙар Таштуғай далаһына кире китә. Уларҙы кире борорға ниәтләгән кешеләр был төбәктең хозур тәбиғәтен, үләне һутлы, һыуы тәмле икәнен күреп, үҙҙәре ошо яҡҡа күсенеп килә. Таштуғай ауылына нигеҙ һалына.

Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөрмәтулла Ғаззали улы Үтәшев үҙенең түңгәүер ырыуы тамырҙарына баш эйеп, оло ихтирам менән үҙе тураһында тарихты төптән башлай. Ысынлап та, шәжәрәне тарбаҡланып үҫкән ағас менән сағыштыралар. "Әҙәм тамыры ағасҡа миҫал, әҙәм күнеле һауаға миҫал", ти башҡорт әйтеме. Шул тамырҙың ҡеүәтен, тынын тойоу ниндәй гәжәйеп тойғо икәнен уны таныһандар, өйрәнгәндәр һәм белгәндәр генә аңлайҙыр. Башҡорт кешеһе өсөн мотлаҡ ҡанун булған "шәжәрәңде белеү" бөгөн айырыуса мөһим кеүек.

Хөрмәтулла Үтәшев сәхнәлә үҙенсәлекле ҡәлгәме, тәхетме ҡорған - тиҫтәнән ашыу ҡалын кирбестәй тарихи китаптар уны уратып теҙелгән: "Түңгәүер" ырыуы китаптары. Таш төҫөндәге был баҫмалар янында сәскә атҡан гөл кеүек, өр-яңы китаптары балҡып тора. Ысынлап та, был кисәлә тарих һәм хәтер сәскә атҡандай була. Күренекле актерҙың үҙе уҡыуында уның хикәйәттәре яңғырай. Бала саҡ ваҡиғалары телгә килә: актерға йәштәр ярҙам итә. "Илай белмәгән малай" сәме өсөн көрәшкән ир баланың кисерештәре уға тәүге тормош һабағы биргән туғандары менән бергә тасуирлана. Характер - ул яҙмыш. Тоторо̄ҡло холоҡ нисек нығына, нимә кешегә көрәш ҡыҙған майҙанға сығыр тәүәккәллек һәм сәхнәгә менеп баҫыр ажарлы дәрт бирә?

Атай рухы менән һуғарылған балаға яҙмыш тап ошо тәүәккәллекте һәм дәртте бүләк итә. Атай фатихаһының изгелеге әҙәм балаһын утҡа янмаҫ, һыуға батмаҫ сыныҡмыш итә.

Хөрмәтулла Үтәшевтың атаһы - арҙаҡлы Ғаззали батыр, бил бирмәҫ көрәшсе, Бөйөк Ватан һуғышын Башҡорт атлы дивизияһында үткән яугир, күренекле эшсән ер кешеһе. Һигеҙ балаһы - дүрт улы менән дүрт ҡыҙы Ғаззали батырҙың данын арттырып, бөгөн уға рәхмәт уҡый, ата рухына тәсбих әйтә-әйтә ил эшен үтәй. Хөрмәтулланың китабы ла атаһы рухына бер доға, атаһы һәм уның улы тураһында ҡиссалар шәлкеме...

Таштуғайға барығыҙ. Һәр бер башҡорт үҙ ғүмерендә "Таштуғай" моңона - тарихи йырыбыҙ ауаҙына әйәреп, ошо ҡиссалар һәм доғалар юлынан үтергә тейеш. Хөрмәтулланың яңы китабы һеҙгә асҡыс булыр. Ул баҫманы беҙ Башҡорт китабының быйылғы иң яҡшы ҡаҙанышы, тип әйтә алабыҙ.

**Сәрүәр СУРИНА.**

БАШҠОРТСА ҺҮҘЛЕК

# БӨТӨҮ - ҠОРАМА БУЛА

**Бөгөү** - подшивать, подрубать, подшивка, подрубка
**Бөрмә** - 1) сборчатый, с оборками, складками 2) сборка, складка.
**Бөрткә, бөртмә** *(каризел)* 3) рубец для продергивания шнура, резинки
**Бөрмәле** - сборчатый, со сборами
**Бөрмәләү, бөрөү, бермәсләү** *(ырғыҙ)* - делать сборки, сборить, присборивать, делать складки.
**Бөрө** - "почки" (узор)
**Бөрсөкләү, мөрсөктәү** *(мейәс)* - чистить от лохмотьев.
**Бөтмөр** *(урта)*, **көтмөр** *(каризел)* - оҫта.
**Бөтөйләү** *(дим)* - делать треугольным
**Бөтөргөс** - палочка или веревка для натягивания укорачивающейся основы
**Бөтөү** *(төньяҡ-көнбайыш)* - лоскут
**Буҙаҡлау** *(әйек)* - ткать в полоску
**Буй I** 1) длина 2) полоса, полоска 3) ряд
**Буй II** 1) полосатый 2) продольный
**Буй III** нити основы (в ткачестве)
**Буйгүлмәк** *(урта)*, **буйҙау күлмәк, буйҙай гүлмәк** *(мейәс)* - платье прямого покроя, неотрезное по талии
**Буйға** 1) вдоль 2) продольный
**Буйғау** *(әйек- һаҡмар)* - основа (в домашнем ткачестве)
**Буйғорама** *(һаҡмар)*, **буйһуҙма** *(һаҡмар, ырғыҙ)* - түр юрған
**Буйлау** *(әйек- һаҡмар)*, **оҙатыу** - сновать // снование
**Буйлы** - полосатый (например, ткань, палас)

**Рәмилә КӘРИМОВА.**

**"Башҡортса-урыҫса туҡыусылыҡ һәм ҡул эштәре терминдары һүҙлеге" китабынан.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЙЫРЫЛҒАН ИР АҘЫР, ҡушылған ир уҙыр

Ҡыҙ байлығы - күркәм холоҡ, ир байлығы - тәүәккәллек.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йәш саҡта хаталар яһағандарға йәшәүе еңелерәк. Улар иртәрәк йәшәргә өйрәнә.

**(Уинстон Черчилль).**

Камил булмау - дуҫтарыбыҙҙағы бына ошо сифат беҙгә оҡшай ҙа инде.

**(Филип Честерфилд).**

Кеше үҙенең ауырыуҙары тураһында һөйләшергә ярата. Ә үҙе өсөн ауырыуҙар - тормошондағы иң ҡыҙыҡ булмаған ҡара тап.

**(Антон Чехов).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер саҡ уҡыусылары Буддаға "Һеҙ беҙҙе берәй ваҡыт алдағанығыҙ булдымы?" тигән уңайһыҙ һорау биргән.**

**- Эйе, алдағаным булды, ләкин быны һеҙҙең файҙа өсөн эшләнем, - тигән Будда һәм үҙенең был ҡылығына аңлатма биреү өсөн шундай риүәйәт һөйләгән.**

**- Бер саҡ бер ғаиләнең йорто яна. Был саҡта ғына атай кеше урамда йөрөгән була. Янғын ялмап алған йортҡа урамдан инеп булмағанын аңлағас, ул йорт эсендә ҡалған балаларҙы тиҙерәк тәҙрәнән һикереп сығырға саҡырып, ҡысҡыра башлай. Уйын менән мауыҡҡан балалар аталарының ҡысҡырыуын ишетмәй, һаман шау-гөр килеп уйнауҙарын дауам итә һәм янғынды ла һиҙмәйҙәр. Шунан атай кеше: "Балалар, мин һеҙ күптән һораған шәп уйынсыҡтарҙы алып ҡайттым, тиҙерәк тәҙрә янына килегеҙ һәм тышҡа һикерегеҙ",- тип бар көсөнә һөрәнләй. Шул саҡта ғына балалар атаһының тауышына иғтибар итә һәм берәм-берәм тәҙрәнән һикереп килеп сығалар. Уйынсыҡ алып ҡайтыу ялған хәбәр булһа ла, атай кеше шулай балаларын уттан ҡотҡара... Шуның өсөн, - тип дауам итә Будда, - минең һеҙгә дөрөҫтө йә ялғанды һөйләүем түгел, ә был ялғандың һеҙҙе ниндәйҙер ауыр хәлдән ҡотҡарыуы мөһим...**

**Эйе, беҙ һәр саҡ ялғанды ғәйепләйбеҙ, ә дөрөҫ һүҙҙе изге төшөнсә итеп ҡабул итәбеҙ. Ләкин тормошто әхлаҡ сиктәренә генә бикләп ҡуйып булмай, тормош үҙгәреүсән һәм көтөлмәгәнсә лә булып китә, шуға ла нимә дөрөҫ, нимә дөрөҫ түгел тип фекер йөрөтөү ахмаҡлыҡ. Ниндәйҙер хәл-ваҡиғанан, контекстан сығып эш итергә кәрәк, сөнки теге йәки был хәлгә ҡарата әҙер ҡарар һәм ҡағиҙәләр ҡулланып булмаҫҡа ла мөмкин. Әгәр ҙә һинең ялғаның кемдәлер ҡотҡара һәм ярҙам итә икән, мораль тураһында онот һәм ялғаның өсөн үҙеңде ғәйепләмә. Һине алдаҡсы тигәндәрәнә лә көймә. Ҡайһы саҡта кеше хәҡиҡәтте ишетергә әҙер ҙә булмай һәм был уға зыян килтереүе лә бар..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Кин коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү танылығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирәт:**
Сәриә ГАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
12 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3400
Заказ - 181/03